ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 март (буранай) 2016

№ 12 (690)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Халыҡ фекере...



махсус өйрәнелә

5

Балалар баҡсаһында, мәктәптә генә түгел...

Интернет аша ла өйрәнеп була туған телде



8-9

Һүрәт эсендә йәшәйбеҙ...



11

Замана беҙгә бәйлеме,

әллә беҙ - заманағамы?



12-13

ТВ-программа 14

***Үйлап та тормайынса миңә яуызлыҡ күрһәткән кешегә мин баш эйәм һәм уны иң йомарт һөйөү менән бүләкләйем; ул ни тиклем күберәк яуызлыҡ ҡылһа, мин шул тиклем күберәк изгелек ҡыласаҡмын.***

***(Будда).***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ҡулланыусының ниндәй хоҡуҡтары бар һәм һеҙ уларҙы беләһегеҙме?

***Рәйлә КУСЕМХАНОВА, журналист:*** Беҙ көн һайын тауар һатып алабыҙ, транспортта йөрөйбөҙ, коммуналь, медицина, көнкүреш һәм башҡа хеҙмәттәр менән файҙаланабыҙ. Һәм шул уҡ ваҡытта көн һайын тигәндәй ошо хеҙмәттәргә бәйле күңелһеҙлектәр менән дә осрашабыҙ. Кемдер магазиндан алып ҡайтҡан икмәктең сифатһыҙ һәм иҫке булыуын асыҡлай, кемдер ҡиммәт кенә хаҡҡа һатып алған башҡа берәй тауарының ниндәйҙер етешһеҙлектәрен шәйләй. Әммә шул икмәкте йә башҡа тауарҙы магазинға кире алып барып тапшырырға һәр кемдең дә түҙемлеге етмәй. Был күп осраҡта ҡулланыусы хоҡуҡтарын белмәүҙән дә килеп сыға. Унан һуң, йыш ҡына магазиндарҙа "Тауар кире ҡабул ителмәй" тигән яҙыу ҙа элеп ҡуйыла бит. Был яҙыуҙы балалар кейемдәре, эске кейемдәр, колготкиҙар, биҙәнгестәр һатылған бүлектәрҙә күрергә мөмкин. Бына был ҡулланыусы хоҡуҡтарын боҙоу була инде. Сифаты буйынса бәхәстәр сыға икән, бөтә тауар ҙа кире ҡайтарыла ала. Хатта эске кейемдәр ҙә. Тауар алған урында ошондай яҙыу эленеп тора икән, администраторға быны законға ҡаршы икәнлеген иҫкәртергә кәрәк.

Телефон һәм шундай электроника техникаһы буйынса сыҡҡан проблемалар тураһында ла күп тауыш сыға, әммә бында һаман да һатып алыусы алйот хәлендә ҡала килә.

> **Телефон насар эшләй икән, иң башта был хаҡта уны һатып алған магазинға барып әйтергә, уларға дәғүәләреңде яҙма рәүештә еткерергә, әммә экспертизаны ул магазинда түгел, ә башҡа ерҙә эшләтергә кәрәк.**

Сөнки сауҙа үҙәге тикшереүҙе үҙе файҙаһына эшләйәсәк. Ә былай, һатыусылар телефонды алыштырып бирмәй икән, экспертиза яҙмаларын нигеҙ итеп алып, уларҙы судҡа бирергә була. Суд ғаризаһында мораль зыян күреүегеҙҙе өҫтәргә лә онотмау мөһим.

Шуны ла аңғарғаным бар, һатыусылар һатып алыусының наҙан түгел икәнен, үҙ хоҡуҡтарын белеүен аңлай икән, шунда уҡ уға мөнәсәбәт тә, бәхәсте асыҡлау юлдары ла үҙгәрә. Шунлыҡтан, яҡлай белә йек үҙебеҙҙе.

***Рәмилә СӘЙФУЛЛИНА, уҡытыусы:*** Хәҙер интернет магазиндарҙан тауар алыу күренеше йышайҙы. Үҫмер ҡыҙым интернет аша кейенергә ярата. Унынса, был ысул осһоҙораҡ һәм һайлау мөмкинлеге лә киңерәк. Магазиндар буйлап йөрөп эҙләнергә түгел. Тик йыш ҡына тап һин һораған түгел, йә башҡа төҫтәге, йә фасондағы тауар килә. Ә тауар хаҡы заказ эшләгәндә үк түләнгән була бит инде. Ни эшләргә? Алынғанды кире ҡабул итмәйҙәр, иткән хәлдә лә уны почта аша ебәреп, айҙар буйы көтөргә кәрәк һәм аҡсанды ҡайтаралармы әле? Ошо мәсьәләне махсус рәүештә интернет магазиндар селтәре юрисынан белешкәйнем. Бәктиһәң, уның тәртибе былай икән: һайланған тауарға уның утыҙ проценты ғына түләнә. Һатып алыусыны хеҙмәтләндергән консультант тауар хаҡында бөтә мәғлүмәттәрҙе лә бирергә тейеш: ниндәй материалдан, буяуы ниндәй, сифаты һ.б. Алынған әйбер һү-рәттәгенән айырыла икән, һин уны тейешлеһе килгәнсе үҙеңдә ҡалдыра алаһың, кәрәген алғас ҡына тулыһынса түләйһең. Интернет һатыусылар үҙҙәренең башынан "себен осороу" йәки яуаплылыҡ алмау өсөн клиенттан тауар хаҡын алдан уҡ тулыһынса түләтеү юлдарын уйлап таба. Шунлыҡтан, был ысул менән һатыу иткәндә лә хоҡуҡтарҙы белеү кәрәк икән.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдән хаҡтар үҙгәрәсәк, шуға ла 31 мартҡа тиклем "Киске Өфө" гәзитенә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс - 50665) яҙылып ҡалығыҙ. Почтала абонемент йәшниге булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала.**





• Мартта ла 2016 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 3 уҡыусыбыҙға **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап бүләк итмәксебеҙ. Йә, кем алыҡ?

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog. kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**





12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ӨЛГӨЛӘР КӘРӘК...

***Гөлдәр МОРАТОВА, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БР Милли әҙәбиәт музейы директоры:*** Йәш быуын китапты һирәк уҡый, күберәк үҙенә файҙалы булмаған компьютер уйындары менән мауыға, тиҙәр. Әммә былтыр Рәсәйҙең 83 төбәге араһынан иң күп китап уҡыған унау исемлегенә республикабыҙ ҙа индерелде.

Йәштәрҙе ҡулдарына китап алырға күндереү өсөн уларҙың талаптарына ярай белергә кәрәк. Әҫәрҙәрҙең электрон вариантын булдырыу, китапханаларҙа төрлө саралар үткәреү ярҙамында һәм башҡа төрлө ысулдар менән уларҙы быға ылыҡтырырға була. Ни тиһәң дә, был хәл ителгәндәй мәсьәлә. Ә бына ауыл йәштәрен нисек әскелек, эшһеҙлек, күңел төшөнкөлөгөнән йолоп алып ҡалыу проблемаһы күпкә етди. Ауыл урамдарынан уҙған саҡта "йәшел йылан" ҡоллоғона эләккән йәштәрҙе күреп, хафаланам. Сөнки халҡыбыҙҙың киләсәге, беҙҙең ауылдарҙан сыҡҡан билдәле шәхестәребеҙгә алмаш булырҙай быуын яҙыҡ юлдан китеп бара. Хатта бөтә Рәсәй буйынса хәмергә ҡаршы ҡаты закондар ҡабул ителһә лә, аңлатыу эштәре ойошторолһа ла, белә күрә упҡынға тәгәрәгән милләттәштәр бар. Уларҙы ошо афәттән ҡотҡарыу өсөн һәр башҡорт үҙ өлөшөн индерергә, үҙ миҫалында өлгө күрһәтергә тейеш. Әгәр беҙҙең йәштәр башҡа милләт вәкилдәре күрһәткән өлгө буйынса йәшәй, уларҙың тормошон, холоҡфиғелен үҙләштереп маташа. Башҡорттар араһында ла матур ғаилә ҡорған, үҙебеҙҙең рухи ҡиммәттәребеҙҙе тотоп йәшәгән бынамын тигән кешеләр бар. Бөтә донъяға билдәле шәхестәребеҙ ҙә етерлек. Әгәр ҙә совет заманында бөтә үҫмерҙәр тимурсылар булырға атлығып торһа, хәҙер балаларҙы үҙебеҙҙең лидерҙар миҫалында тәрбиәләй алабыҙ бит. Йәғни, республикабыҙҙың һәр төбәгендә билдәле яҡташтарҙың исеме менән аталған йәштәр ойошмалары булдырға бер кем ҡамасауламай. Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Муса Мортазин, Миңлегәле Шайморатов кеүек үҙенең эшенә мөкиббән киткән, халҡы һәм иле өсөн йәнен, һаулығын аямаған милләттәш геройҙарҙы өлгө итеп алырға мөмкин. Уларҙың исеменә тап төшөрмәй йәшәүҙе башҡорт йәштәре үҙенең бурысы тип һанарға тейеш. Ындай ойошмалар һәр яҡлап тәрбиәүи әһәмиәткә эйә буласаҡ. Әхлаҡ, намыҫ, әҙәп, эшһөйәрлек, рух төшөнсәләре башҡорт халҡы күҙлегенән сығып аңлатылһа, хәл күпкә яҡшырасаҡ.

Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ҡулланыусының ниндәй хоҡуҡтары бар һәм һеҙ уларҙы беләһегеҙме?



(Башы 1-се биттә).

***Фәнил БУРАНШИН, оҙон юлға йөрөүсе водитель:*** Бөгөн "коллектор" тигән һүҙ ҙә йыш яңғырай. Күп кенә таныштарымды шулар ҡаңғырта. Асылда кем һуң ул - коллектор? Ысынында, законға нигеҙләнгән ундай хеҙмәт тә, махсус органдар ҙа юҡ. Улар суд приставы ла, полиция ла түгел. Еңел юл менән аҡса эшләргә теләүселәр коллекторҙар агентлығы булдырып, банктарҙан кешеләрҙең бурыстарын һатып алалар ҙа, янау, ҡурҡытыу, психик баҫым ярҙамында бурыслының бирәсәген икеләтә арттырып түләтеп алалар. Шуға, коллекторҙарҙың шылтыратыуҙарына яуап бирмәскә һәм ҡурҡмаҫҡа, улар өйөгөҙгә килгән осраҡта полиция саҡырырға кәрәк икәнен һәр кем белеп ҡуйырға тейеш.

Беҙҙең кеүек оҙон юл водителдәренә, мәҫәлән, юлға бәйле законларҙы белеү зарур. Йыш ҡына ниндәйҙер һорау килеп тыуа. Был осраҡта иһә, иң башта ҡайҙа мөрәжәғәт итеүҙе белергә кәрәк. Автотранспорт хәрәкәте һәм йөк ташыуға бәйле закон акттарын контролдә тотоу эше Федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса автоюл күҙәтеүе дәүләт идаралығына тапшырылған. Ул ошо мәсьәләгә бәйле бар закон акттарын көйләй.

Белеүебеҙсә, күп бәхәсле мәсьәләләр судҡа барып етә. Халыҡта судтан ҡурҡыусылар ҙа бар. "Суд" төшөнсәһен беҙҙә, ғәҙәттә, "аҡса" төшөнсәһе менән берләштерәләр. Йәнәһе, юрист, адвокат ялларға кәрәк һ.б. Ә суд ул бушлай үтә торған процесс һәм мөрәжәғәт иткән кешегә махсус сәркәтиптәр барлыҡ ҡағыҙҙарҙы ла бирә, аңлата. Быны белмәгәндәр адвокаттар, юристар тупһаһын тапап, аҡсаһын әрәм итә. Бушлай юридик ярҙам алыу ҙа беҙҙең хоҡуҡ - шуны ла онотмайыҡ.

***Гөлнур ҒАЙСАРОВА, юрист:*** Һуңғы йылдарҙа косметика салондарында алданған ҡатын-ҡыҙҙарҙан ялыуҙар күп килә. Уларҙы шул матурлыҡ биләмәләрендә ни ғиллә менәндер кредитҡа ултырталар. Йәғни, ханым матурлыҡ салонына мастер-класҡа бара ла, процедура мәлендә уны консультант ниндәйҙер бик шәп косметиканы бүләп түләүгә алырға өгөтләй башлай. Уға был косметика менән маскалар эшләйҙәр, майҙарын һылайҙар һ.б. Нисек булғанда ла, иң аҙаҡтан ҡатын-ҡыҙ 40-60 мең һумлыҡ кредитҡа килешеү төҙөп сыға. Бер нисә көндән ул, әлбиттә, был хәлдең аҡылһыҙлыҡ икәнен аңлай, әммә документтарға ҡул ҡуйылған була. Ә бит судҡа ла барыһы ла мөрәжәғәт итмәй. Шулай хаҡына торошһоҙ әйбер өсөн кредит түләргә мәжбүр ҡайһы берәүҙәр. Был тәңгәлдә кәңәш шул: бер ниндәй мастер-класта ла документ талап ителмәй. Әгәр ҙә һеҙҙе ҡайҙалыр саҡырып, "мотлаҡ паспорт алып килергә" икәнлекте иҫкәртәләр икән - бармағыҙ, унда һеҙҙе яҡшы нәмә көтмәй. Алданмағыҙ.

***Мәрйәм ҒӘБИЗУЛЛИНА, "Йәрминкә" магазин селтәрҙәре һатыусыһы:*** Магазиндарҙа һатып алыусының тауыш ҡуптарыуына йыш шаһит булырға тура килә. Асылда, ҡулланыусының сауҙа хеҙмәткәрҙәре менән телдән мөнәсәбәт асыҡлауы төп хата булып тора. Ә бит һатып алыусы мәсьәләне ни тиклем шауышыулы хәл итергә тырышһа, шул тиклем үҙенә зыян килтерә. Шуға күрә, магазинға аныҡ дәғүәгеҙ булып (туфли табаны аҡтарылған, микротулҡынлы мейес ватылған, телефон боҙолған һәм башҡа осраҡтар), аҡсағыҙҙы кире ҡайтарырға ниәтләйһегеҙ икән, дәғүәне мотлаҡ яҙма рәүештә теркәп, законлы рәүештә көрәшергә кәрәк. Ә бының өсөн сабырлыҡ һәм айыҡ аҡыл талап ителә. Дәғүәлә тауарҙы ҡайҙан һәм ҡасан һатып алыуығыҙ, ниндәй етешһеҙлектәр табылыуы күрһәтелергә, "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында"ғы Законға таянып, талаптарығыҙ белдерелергә тейеш. Әгәр ҙә тауар гарантияла булһа, йәғни уның һаҡлау срогы, шулай уҡ һатып алғандан һуң ике йыл ваҡыт үтмәгән икән, сифатһыҙ тауарға ҡарата биш төрлө дәғүә белдерергә мөмкин. Үрҙә телгә алынған Закондың 18-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, ошо бишәүҙең береһен һайларға була, сөнки һәр талаптың үҙ үтәлеү срогы бар. Тауар чегы булыу-булмауҙың әһәмиәте юҡ (!) - ул һеҙҙең талапты үтәүҙән баш тартыуға нигеҙ була алмай. Дәғүәне ике нөсхәлә эшләгеҙ. Үҙегеҙгә ҡалдырылғанына сауҙа нөктәһенең рәсми мисәтен, һатыусының имзаһын ҡуйҙыртып алығыҙ. Баш тарталармы? Ғаризағыҙҙы заказлы хат менән магазиндың юридик адресына ебәрегеҙ. Әгәр ҙә тауарҙы бәләкәй сауҙа нөктәһендә һатып алғанһығыҙ икән, ике шаһит табып, һатыусының ҡул ҡуйыуҙан баш тартыуын документаль рәүештә теркәгеҙ. Эш судҡа барып етһә, быларҙың кәрәге тейәсәк.

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# РӘНЙЕШ МӨҘҘӘТЕ

Ике йылдан 1917 йылғы түңкәрелешкә 100 йыл тула. Илебеҙ мандып йәшәп китһен өсөн тағы ла 250 йыл кәрәк буласаҡ. "Ни өсөн шунсама ваҡыт?" тип һорар берәү. Сөнки ошо ваҡыт арауығында бер ниндәй ғәйебе булмаған күпме кешеләрҙең йәне ҡыйылып, күпме ғаиләләр оло михнәттәргә дусар ителеп, күпме сабыйҙарҙың, уларҙың ғәзиз әсәләренең, яҡындарының күҙ йәше түгелде. Улар илебеҙҙең ошондай сәйәсәтенә, ил етәкселәренә ҡарап рәнйемәгән, Аллаһы Тәғәләгә ялбармаған тиһегеҙме? Бындай сәйәсәтте ойоштороусылар үҙҙәре исән саҡта хатта халыҡтан ғәфү үтенә лә белмәне.

Миллиондарҙың түгелгән ҡандары, күҙ йәштәре, рәнйештәре ебәрмәй илебеҙҙе. Рәнйеш 7 быуындан һуң ғына юйыла, тиҙәр. Әгәр ҙә һәр быуынды уртаса 50 йыл тип алған саҡта ла, 350 һаны килеп сыға. Әлегә ни бары бер быуат, 100 йыл ғына үтте...

Һөйөндөк АҪЫЛОВ.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктең 2015 йылдағы социаль-иҡтисади үҫеш йомғаҡтарына арналған республика Хөкүмәте ултырышын үткәрҙе. Былтыр сәнәғәт етештереүе күләме - бер, ауыл хужалығы 3,2 процентҡа артҡан, тип билдәләне республика етәксеһе. 2016 йылдағы иҡтисади хәл тураһында һөйләгәндә, Башҡортостан Башлығы төп күрһәткестәрҙең кәмеүен билдәләне. Мәҫәлән, тәүге ике айҙа сәнәғәт етештереүе индексы - 1,9, торлаҡ тапшырыу 10 процентҡа тиерлек кәмегән. Инфляция 1,5 процентҡа тиерлек үҫкән.

✓Өфөләге "ВДНХ-Экспо" майҙансығында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "АгроКомплекс-2016" халыҡара махсуслаштырылған күргәҙмәһе менән танышты. Тәүҙә республика Башлығы "ВДНХ-Экспо" алдындағы асыҡ майҙанда урынлашҡан машина эшләү комплексының яңы әсбаптарын ҡараны. 120-нән ашыу Рәсәй һәм сит ил компаниялары, шул иҫәптән республиканың ауыл хужалығы машиналарын эшләү предприятиелары яңы ауыл хужалығы техникаһы, ҡоралмалар тәҡдим итте.

✓Башҡортостан Хөкүмәте "Торлаҡ" федераль маҡсатлы программаһының "Йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү" ярҙамсы программаһында ҡатнашыусыларға социаль түләүҙәр биреү тәртибен раҫланы. Дәүләттән ярҙам алыу өсөн ҡатындың да, ирҙең дә йәше 35-тән үтмәскә, ғаилә торлаҡҡа мохтаж булырға тейеш. Йәш ғаиләнең торлаҡ хаҡының бер өлөшөн түләй алырлыҡ килеме булыуы ла мөһим. Торлаҡ хаҡының бер өлөшөн финанслау күләме балаһыҙ йәш ғаиләләргә - кәмендә 30 процент, балалылар өсөн 35 процент тәшкил итә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Аҡбуҙат" ипподромында асылған Башҡорт балы йәрминкәһендә булды. Бында Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге, шулай уҡ республиканың фермер хужалыҡтарында етештерелгән балдың 500-гә яҡын төрө һәм умартасылыҡ продукцияһы тәҡдим ителгән. Республика Башлығы "Башҡорт балы" брендын яҡлағандан һаҡлау, умартасылыҡ продукцияһын һатыуҙы ойоштороу менән ҡыҙыҡһынды.

✓Силәбелә Шәйехзада Бабич исемендәге 15-се китапханала әҙәби-музыкаль кисә уҙҙы. Сара Силәбе өлкәһе Сосновка районындағы балалар сәнғәт мәктәбе уҡыусыһы, башҡорт шағиры Урал Ҡолошовтың 50 йәшенә арналды.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ТАҒЫ ЛА ШУЛ...

## эскелек тураһында

**Яңыраҡ ҡына районда килгән бер танышымды осраттым. Тыуған ауылындағы ҡот осмалы хәлдәрҙе һөйләп, аптырауға һәм хафаға һалып китте ул. Был ауылда яҡын ғына ҡәрҙәштәрем йәшәгәнлектән, ишеткән хәбәрҙәргә ысынлап та борсолдом.**



Был уҡытыусының ҡасандыр уҡыусыһы булған, әле үҙе лә пенсия йәшенә етеп барған бер ҡатынҡайҙың туҡтауһыҙ эскенән төн эсендә өйөндә йән биреп ятыуы, икенсе бер уҡыусыһының аҫылынып үлеүе, өсөнсөһөнөң дә эсеүҙән тамам миктәп, бауыры сереп вафат булыуы хаҡында күҙенә йәш алып һөйләүен битараф ҡына тыңлап та булмай ине. Эскеселәрҙе йәлләп түгел, үҙен гәйепләп, насар уҡытыусы булғанмын, тип йәне аҙарыныуы ине был танышымдың. Уны йыуатып, ни әйтергә лә белмәнем. Уҡып йөрөгәндә ыңғай ғына балалар ине, ти уҡытыусы. Уҡып бөткәс тә башлы-күҙле булып, ауылда донъя ҡороп, балалар үҫтереп, ҡаҙимге тормош алып барғандар. "Ни арала эскегә бәйләнеп киткәндәр - һиҙмәй ҙә ҡалғанмын", - тип бөтөрөнә танышым. Дөрөҫ, ауылда сер һаҡлап булмай. Әлеге ҡатындың шым-шым самогон ҡоя башлауы хаҡында ишетеп, бер-ике тапҡыр әйтеп тә ҡарай ул. Тик янғыҙаҡ ҡатындың, ир ҡулдары талап иткән эштәргә, бесән-утын хәстәрләү өсөн генә тотонам, тигән һүҙҙәренә ысын күңеленән ышанып, йәлләп кенә ҡуя ла, башҡаса был хаҡта ҡыҙыҡһынмай. Хәйер, күп ваҡыт ул ауылда ла тормай, күберәк ҡалалағы балаларында була. Йәнә лә уның йәшен ҡыуып, үксәһенә баҫып барған әҙәмдәргә аҡыл өйрәтеп буламы? Ҡартайған ата-әсәһе, туғандары һүҙен тыңлау түгел, уларға төкөрөп тә бирмәгән эскеселә намыҫ, оят ҡайғыһымы? Эскенән күҙе тонған туғанына өйрәтеп һүҙ әйтеп ҡара: йә уның мәңгелек дошманына әйләнәһең, йә дөмбәҫләнеүең дә бик ихтимал. Ундай ғибрәттәрҙе лә ишеткән бар.

**Әле бит был хаҡта туҡтауһыҙ уйлай торғас, "туннель осонда яҡтылыҡ"тың, исмаһам, осмото ла күренмәгәс, яҡындарын терелэй көйҙөрөп, утҡа һалыусы, балаларын йөрәк өйәнәкле итеп, эшлектән сығарыусы бындай хәсрәттәргә йогонто яһауҙың бер генә юлын тәҡдим итергә лә бик ауыр. Тик ерләнгәндәй булам: ул да булһа, әлеге лә бағыш тыйыу (сикләү, ҡаты контроль, административ саралар, мәжбүри дауаланыу).**

Тик был инде эскесенең яҡындары ҡулынан ғына килмәйәсәк, әгәр урындағы власть органдары был эшкә ныҡлап тотонмай икән. Һуңғы йылдарҙа йәмәғәтселек, бөтөн мир менән тип әйтерлек "Айыҡ ауыл" тигән конкурс ойоштороп, эскелеккә ҡаршы дәррәү генә күтәрелеп алғайныҡ. Һөҙөмтәләре лә булманы түгел бит. Булмаған урындарҙа ла хатта айыҡ ауылдар өсөн был күтәрелештең шаңдауы ғына ҡаҡлығыу ҙа эскелектән йонсоған кешеләрҙең йөҙҙәрендә өмөт нуры уята бирәп ҡуйғайны. Оҙаҡ балҡыманы ул, үкенескә күрә. Дөрөҫөрәге, балҡымаҫ борон һүнеп тә ҡуйҙы. Ә бит ниәттәр ниндәй изге, шәп ине! "Айыҡ ауыл" конкурс итепме акция итепме, хәрәкәт итепме, дауам ителергә тейеш ул барыбер.

Йүнле кешеләр йәшәгән йүнле ауылдарҙа, үҙ мәнфәғәтендә генә түгел, иле өсөн дә тырышып йөрөгән етәкселәр хакимлыҡ иткән төбәктәрҙә ауылдарҙың рухи мөхите барыбер ҙә күҙ уңында тотола, айыҡлыҡ хаҡына байтаҡ матур саралар эшләнә. Улар, эйе, айыҡлыҡ өсөн көрәшә, ә күп кенә ауылдарыбыҙҙа иң тәүҙә эскелеккә ҡаршы ныҡ ҡына көрәш алып барырға кәрәк. Бындай ауылдарға абруйлы, ҡаты ҡуллы хужа - хакимиәт башлығы кәрәк. Ауыл башлығы вазифаһының, ауыл Советы депутаттарының әһәмиәтен, абруйын күтәреү, был вазифаға халыҡ араһында ойоштороу, тәрбиәүи-мәҙәни эштәрҙе гөрләтеп алып барырҙай "тере" кешеләр ҡуйылыуы шарт. Үкенескә күрә, хәҙер ҡайһы бер ауылдарға хакимиәт башлығы итеп осраҡлы кешеләр тәғәйенләнә, улар үҙҙәрен ситтәрҙең туйында ултырған "почетлы генерал" һымаҡ тота. Дөрөҫөрәге, уның ауылда бармы, юҡмы икәнлеге лә һиҙелмәй хатта. Урын биләп кенә ултыра ул. Ә ярҙамсыларының бар эше - "яһаҡ", эйй, һалым йыйыу. Ә район башлыҡтары уларҙың эш сифатын ошо өлкәлә план биреүҙәренә ҡарап ҡына баһалай. Һөҙөмтәлә ауылда кем бар, кем юҡ, кем ни менән шөғөлләнә, шул иҫәптән, кем самогон ҡойоп, кем ситтән арзан, хәүефле алкоголле эсемлек ташып кенә төнгө ауылдаштарын ағыулай - уларҙа бер кемдең дә эше юҡ. Әйтерһең дә, башһыҙ һыбайлы хәҙер бәғзе бер ауылдарыбыҙ - баш юҡ, ә һыбайлы төпһөҙ упҡын ярына табан саба ла саба...

Фариза МӨХӘРРӘМОВА.

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# БАШҠОРТСА УЙЫНДЫ...

## башҡортса ғына уйнап була



**"Киске Өфө"лә, ғөмүмән, гәзит-журналдарҙа телебеҙгә ҡағылышлы күтәрелгән һәр мәғлүмәткә иғтибар итәм. Әле бына "Киске Өфө"нөң 9-сы һанында күренекле ғалимдарыбыҙ Луиза Сәмситова һәм Вәкил Хажин менән ҡоролған әңгәмәне ҡыуанып та, әсенеп тә уҡып сыҡтым.**

Йәш саҡта беҙ ҙә, замандан артта ҡалмайбыҙ, тип, тырыша-тырмаша руссаға өйрәндек, сөнки ул илебеҙҙәге төрлө халыҡтар менән аралашыу, аңлашыу өсөн мотлаҡ икәнен аңлай инек. Бынан тыш, бер-беребеҙҙең телен дә ҡыҙыҡ күреп өйрәнә инек. Ысынлап та, ул төрлөлөк үҙе бер матур гөлләмә ине. Үкенескә күрә, шул мәлдә үк үҙ телебеҙ ауыр хәлдә икәнен аңламағанбыҙ - балаларҙы урыҫса уҡыттыҡ. Бөгөн дә ата-әсә балаларын башҡорт класына биреүҙән өркә, БДИ тип ҡаңғыра.

"Рәсәйҙә барыһы ла бер телдә генә һөйләшһен ине, тип теләүселәр, уйлаусылар барҙыр. Ләкин беҙ бер ниндәй ҡыҫымдарға, һынауҙарға ҡарамаҫтан, телебеҙҙе юғалтмайынса һаҡлап ҡала алғанбыҙ икән - ул барыбер һаҡланасаҡ, ике миллионлыҡ халыҡтың телен бөрөү ҙә бөтөрә алмаясаҡ. Шул ышаныс менән йәшәргә һәм ҡулдан килгән тиклем, бигерәк тә йәштәргә, шул фекерҙе һеңдерергә кәрәк", - ти әлеге әңгәмәлә Вәкил Хажин. Шулай икәнен барыбыҙ ҙа аңлай. Тик нисек һеңдерергә? Ғаиләлә генә алып барылған тәрбиә аҙ, телебеҙҙең ҡулланылышын йәмғиәттә лә ныҡыта барырға кәрәк бит. Бөгөн республикабыҙҙа үҙ телевидение-радиобыҙ, театрҙарыбыҙ, гәзиттәребеҙ бар, китаптар сығарабыҙ, тип маһаябыҙ. Әлегә уларҙы тыңлар, ҡарар, уҡыр быуын бар. 10-15 йылдан нисек булыр? Әгәр мәктәптәребеҙ бөгөнгө кеүек БДИ менән баҫыла килһә, русса белеү генә әһәмиәтле, тигән фекер һаман өҫтөнлөк итһә, туған телебеҙ, ысынлап та, икмәк-тоҙлоҡҡа ғына тороп ҡалыр тимә. Әлбиттә, тел менән ҡыҙыҡһыныусылар, уны өйрәнеүселәр ҙә булыр. Тик улар ғына телде һаҡлай алмаҫ бит.

Уйлауымса, беҙ бөгөн балаларҙы, йәштәрҙе ылыҡтырырҙай бик күп мөмкинлектәрҙе ҡулланмайбыҙ. Кеше шулай яратылған - ул һәр ваҡыт яңыраҡҡа, сағыуыраҡҡа ынтыла. Бер генә миҫал: ата-әсә балаһын рус класына биреүгә компьютер дәрестәренә бәйләй. Баҡһаң, компьютер дәрестәрен рус кластары тәүге йылдан, ә башҡорт кластары 8-се класта ғына уҡый башлай икән. Икенсенән, шул уҡ компьютерҙарҙа балалар өсөн башҡортса уйындар ҙа күренмәй. Ә бит бөгөн бала телевизор ҡарап ҡына ла русса теле асыла. Эйе, беҙ ҡыҙыҡлы йәнһүрәттәр, сағыу уйынсыҡтар, әүрәткес китапсыҡтар йәһәтенән башҡалар менән ярыша алмайбыҙ. Уның урынына һәр кем һоҡланырҙай матур байрамдар ойоштора алабыҙ. Башҡортса һөйләшкән Ҡыш бабайҙарыбыҙ, әкиәт геройҙары, батырҙарыбыҙ бар. Үкенескә күрә, улар ҙа барыһы ла "аңлаған" телгә күсә бара. Үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта сабабыҙ түгелме?

...Бөгөн урамдан китеп барһам, ҡайҙандыр таныш һамаҡлау ишетелә. Тауыш килгән яҡҡа ыңғайлайым. Бер төркөм балалар ҡапма-ҡаршы теҙелешеп, геү килеп уйнай. "Аҡ тирәк, күк тирәк, беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?" - тип һамаҡлай бер яҡ башҡортсалап. "Беҙгә Маша кәрәк!" - тип яуаплай ҡаршы яҡтағылар руссалап. Уйынды тамаша ҡылыусы ололар, ҡыҙыҡ күреп, оҙаҡ ҡына ҡарап торабыҙ. Эйе шул, "Аҡ тирәк, күк тирәк"те тик башҡортса ғына уйнап була. Балалар быны бик яҡшы белә...

Гөлиә МЫРҘАҒӘЛИНА.
Баймаҡ районы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Ирек Мөхәмәтдинов Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Тейешле Указға республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан Башлығының икенсе Указы менән Илдар Тимерғәлин, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһынан бушатылды.

✔РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Конституцион закондар һәм дәүләт төҙөлөшө комитеты ағзаһы Рөстәм Ишмөхәмәтов Дәүләт Думаһы Рәйесе Сергей Нарышкиндың Рәхмәт хаты менән бүләкләнде. Рөстәм Рифат улы Дәүләт Думаһында йыл ярым эшләү дәүерендә 36 закон проекты авторы булырға өлгөрҙө. Ул бигерәк тә конституцион закондар, дәүләт төҙөлөшө, административ хоҡуҡ боҙоуҙар, мәғариф өлкәһенә ҡағылған закондар сығарыу буйынса әүҙемлек күрһәтә.

✔Марат Хөсәйенов Башҡортостан Профсоюздар федерацияһы рәйесе итеп һайланды. Яңы етәксе 15 мартта Өфөлә уҙған республика Профсоюздар федерацияһының XXV конференцияһында билдәләнде. Конференцияла республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, Рәсәйҙең Бойондороҡһоҙ профсоюздар федерацияһы рәйесе Михаил Шмаков, шулай уҡ республика Хөкүмәте Аппараты вәкилдәре, министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре ҡатнашты.

✔Быйыл ғинуар-февраль айҙарында Башҡортостан йән башына торлаҡ тапшырыу буйынса Волга буйы федераль округында дүртенсе урын биләне. Башҡортостанстат хәбәр итеүенсә, ике ай йомғаҡтары буйынса финанслауҙың бөтә сығанаҡтары иҫәбенә республикала дөйөм майҙаны 309,7 квадрат метрлыҡ 3415 фатир сафка индерелгән, был 2015 йылдың ғинуар-февраленә ҡарата 87,5 процент тәшкил итә.

✔Башҡорт әҙәбиәте ҙур юғалтыу кисерҙе. Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡорт АССР-ның һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Рәми Ғарипов һәм Фәтих Кәрим исемендәге премиялар лауреаты, республиканың Яҙыусылар союзы ағзаһы Тимербай Йосопов оҙаҡ ауырығандан һуң 78-се йәшендә вафат булды.

"Башинформ"дан.

✓ Быйыл коммуналь хеҙмәттәр соҡорҙарҙы ремонтлауға ғәҙәттәгенән бер ни тиклем алдараҡ тотондо. Ғинуарҙан алып 500 тонна "һалҡын асфальт" ярҙамында 3 мең квадрат метр майҙанда ремонт эштәре башҡарылды.



МӘШӘҠӘТТӘР

# СОҠОРҘАР...

## ямала



**Һуңғы айҙар Рәсәйҙең күпселек төбәктәрендә генә түгел, Башҡортостан һәм уның баш ҡалаһы өсөн дә көтөлмәгән һауа торошо менән аптыратты.**

Республика буйынса ҡышҡы осорҙа һауа температураһының бер йылынып, бер һыуыныуы 60 тапҡыр ҡүҙәтелә. Күп йыллыҡ күҙәтеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай күренештәр миҙгеленә уртаса 10 ғына була. Һауа торошонаң ҡапыл үҙгәреүе, ҡар аралаш ямғыр яуыуы кешеләрҙең сәләмәтлегенә генә түгел, хатта юлдарға ла емергес йоғонто яһай. Һәҙәмтәлә тегендә йәки бында соҡорҙар барлыҡҡа килә. Шуға күрә быйыл коммуналь хеҙмәттәр соҡорҙарҙы ремонтлауға ғәҙәттәгенән бер ни тиклем алдараҡ тотондо. Ғинуарҙан алып 500 тонна (былтырғынан 4,5 тапҡырға күберәк) "һалҡын асфальт" ярҙамында 3 мең квадрат метр майҙанда ремонт эштәре башҡарылды. 11 марттан баш ҡаланың барлыҡ райондарында ремонт эштәрендә ҡойоп эшләнгән асфальт ҡулланыла. Ҡатнашманың сифатын "Өфө ҡалаһын төҙөкләндереү буйынса заказсы һәм күҙәтеү хеҙмәте" МБУ-һының бойондороҡһоҙ юл-төҙөлөш лабораторияһы тикшерә. Шулай уҡ асфальт һалыуҙың барлыҡ технологик процесы белгестәрҙең күҙәтеүе аҫтында ҡала.

Ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә район хакимиәте башлыҡтарына ла юлдарҙы ремонтлау буйынса хәл-торошто айырым контролгә алырға ҡушылды. Соҡорҙар үҙәк урамдарҙа ғына түгел, бәләкәй урамдарҙа ла ремонтланасаҡ. Шуны ла билдәләп китеү зарур: соҡорҙарҙы ремонтлау - юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә һәм юл ҡатламының артабан емерелеүен иҫкәртеүгә йүнәлтелгән ваҡытлы сара. Шуны иҫтә тотоп, ҡала хеҙмәттәре халыҡты унайһыҙлыҡтарҙы алдан ҡабул итергә, автомобиль йөрөтөүселәргә тиҙлек режимын һәм интервал һаҡларға, ремонтланған участкаларҙағы юл билдәләренә иғтибар бирергә саҡыра.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ҺӘР БАЛАҒА ИҒТИБАРЛЫБЫҘ



**Өфөнөң Киров районында урынлашҡан Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы ошо төбәктә йәшәгән һәм башҡорт телен тәрәндән өйрәнергә теләгән балаларҙың, ата-әсәләрҙең хыялын тормошҡа ашырыу маҡсатында төҙөлә.**

Гимназиябыҙ 900 уҡыусы өсөн тәғәйенләнгән булһа ла, әлеге көндә 1024 балаһы һыйҙыра. Белем усағындағы уҡытыу-тәрбиә мөхите халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тормош һәм ижади фәлсәфәһенә бәйле ҡоролған. Мәҫәлән, "Айгөл иле" рәсем студияһы, "Кендектәр" КВН-командабыҙ, "Өс таған" тип аталған ата-әсәләр, педагогтар һәм уҡыусылар советы эшләп килә. Үҙе бәләкәй ауылдан сығып, ҙур уңыштарға өлгәшкән, бөтә донъяға билдәле шәхес өлгөһөндә балаларға ала ынтылышлы үҫеш программаһы һалырға тырышабыҙ. Хеҙмәт көсәбеҙ юҡҡа китмәй, баш ҡала мәктәптәре араһында рейтингыбыҙ йылдан-йыл күтәрелә бара.

Белем усағына милли мәктәп статусы бирелһә лә, микрорайондарға беркетелеү һөҙөмтәһендә, беҙҙә төрлө милләт балалары уҡый. Шуға ла, шартына килтереп, бөтә предметтарҙы башҡорт телендә уҡыта алмайбыҙ. Әммә педагогтарыбыҙ беҙгә килгән балаларҙың рухын үҫтереү, телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү юҫығында фиҙаҡәр эшләй. Уҡыусыларыбыҙ, уларҙың ата-әсәләре әлегә башҡорт телен өйрәнеүҙән, туған телдә һөйләшеүҙең әһәмиәтен тулыһынса аңлап етмәһәләр ҙә, киләсәктә рәхмәтле буласаҡтар, тип ышанам. Башҡорт балалары саф башҡорт ғаиләләре ҡороп, рухи ҡиммәттәребеҙҙе быуындар аша тапшыра алыр. Башҡа милләт вәкилдәре башҡорт теле аша улар өсөн сит булған, ләкин иң киткес рухиәтле, боронғо мәҙәниәтле, тәрән тамырлы халҡыбыҙ тураһындағы ғилемгә юл асыр. Быға тәүге аҙым башланғыс синыфтарҙа уҡ һалына. Уҡыусылар аҙнаһына бер сәғәт мәшһүр "Урал батыр" эпосын өйрәнә, яттан һөйләүҙән тыш, был үлемһеҙ әҫәрҙәге һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡлай, фәлсәфәүи фекерҙәрҙең айышына төшөнә. Гимназия уҡыусылары өсөн 34 төрлө түңәрәк эшләй, беренсе класта бөтәһе лә мотлаҡ рәүештә шашкалар буйынса түңәрәккә йөрөй. Балалар бер юлы ике-өс түңәрәктә шөғөлләнә ала, үҙен һынап, ҡайһы өлкәлә һәләтле булыуҙарын асыҡлай. Милли көрәш, ҡаяға менеү, тхеквондо, фехтование, карате, еңел атлетика, баскетбол, волейбол, туризм түңәрәктәрендә балалар физик яҡтан камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн етди күнекмәләр яһай. Рәсәй һәм донъя кимәлендә чемпион титулын яулаусы уҡыусыларыбыҙ ҙа бар.

Балалар башҡорт халҡының мәҙәниәтен, этнографик ҡомартҡыларын, тарихын китаптан уҡып ҡына өйрәнмәһен өсөн өс класта музей астыҡ. Береһе Мостай Кәримдең шәхесенә арналған, икенсеһе Мәрйәм Бураҡаева исемен йөрөтә. Өсөнсө музей үткән йылдың декабрендә генә асылды, ул "Дан музейы" тип атала. Был кабинетта башҡорт халҡы ҡатнашҡан бөтә яуҙарҙа батырлыҡ күрһәтеүсе бөйөк шәхестәребеҙ тураһында мәғлүмәт тупланған. Ғөмүмән, балаларҙы милли рухта, донъяла үҙ урынын таба алырлыҡ, белемле, алдынғы ҡарашлы, уңышлы шәхес итеп тәрбиәләү талаптарына ярашлы эшләйбеҙ. Сөнки бөгөн милли мәғариф учреждениелары инновацион уҡытыу, электрон белем биреү кеүек заман талаптарын уңышлы тормошҡа ашырыу менән бер рәттән, классик педагогиканың кешелеклелек, һәр балаға иғтибарлы булыу принциптарынан да тайпылмаҫҡа тейеш.

**Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА,**
**М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы директоры.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТЕЛДЕ ЯҠШЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ? БУЛӘК ОТ!

**Баш ҡалала сираттағы тапҡыр "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса "Грамоталы ҡала" дөйөм ҡала конкурсы уҙғарыла.**

Уның маҡсаты - Башҡортостандың дәүләт телдәрен һаҡлауҙа, өйрәнеүҙә һәм үҫтереүҙә булышлыҡ итеү, шулай уҡ предприятиеларҙың, ойошмаларҙың, учреждениеларҙың алтаҡталары, атамалары, эш ваҡыттары яҙылышының эстетик һәм художество кимәлен күтәреү. Сара сиктәрендә телдең терминологияһына, тел сәйәсәте һәм туған телдәрҙе үҫтереү эшмәкәрлеге әүҙемләшеүгә бәйле методик һәм ғәмәли ярҙам күрһәтелә. Жюри составына Өфө ҡала хакимиәте башлыҡ урынбаҫары етәкселегендә лингвистика дисциплиналары белгестәре, филологтар, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре инә. Конкурстың район этабында предприятиеларҙың, ойошмаларҙың, учреждениеларҙың Законды тормошҡа ашырыу буйынса эшмәкәрлеге баһаланһа, икенсе ҡала этабында район хакимиәттәренең ошо йүнәлештәге эште ойоштороу кимәле анализланасаҡ, ә инде апрель һуңында - май башында кҫсмә тикшереүҙәр башланасаҡ. Уға июнь аҙағында йомғаҡ яһаласаҡ. Конкурс еңеүселәре һәм лауреаттары Өфө ҡала округы хакимиәте ҡарамағындағы "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның дипломдары һәм ҡиммәтле бүләктәр менән наградланасаҡ.

# ҮЛЕМ МЕНӘН САУҘА ҠАЙҘА БАРА?

**14 - 25 мартта Башҡортостанда "Үлем һатылған ерҙе хәбәр ит" тип аталған наркотиктарға ҡаршы Бөтә Рәсәй акцияһының беренсе этабы уҙғарыла.**

Уның маҡсаты - республикала наркоманияның һәм наркоенәйәтселектең таралыуына юл ҡуймау сараларына йөмгәтселектең иғтибарын йәлеп итеү. Тәжрибә хоҡуҡ һаҡлау органдары менән йәмғәтселек бәйләнешенең ыңғай һөҙөмтәләр биреүен күрһәтә. Мәҫәлән, былтыр 16-27 ноябрҙә уҙғарылған акция барышында барлығы 126 мөрәжәғәт ҡабул ителә. Республикала тәүлек әйләнәһенә наркоконтролдең +7 (347) 250-20-30 һанлы "ышаныс телефоны" эшләй. Уның буйынса халыҡ наркотиктар әҙерләү, ҡулланыу, һаҡлау һәм һатыу, притондарҙың ҡайҙа урынлашыуын хәбәр итә ала. Шылтыратыуҙар иғтибарһыҙ ҡалдырылмай. Мәғлүмәт булыу менән тиҙ хәрәкәт итеүсе оператив-тәфтиш төркөмө шунда уҡ урындарға сығасаҡ. Шундай уҡ телефон (128) Эске эштәр министрлығының Башҡортостан буйынса идаралығында ла эшләй. Теләүселәр наркотиктарға ҡаршы ведомстволың етәкселегенә үҙҙәренең һорауҙарын һәм тәҡдимдәрен идаралыҡтың рәсми сайтында (www.gnkrb.ru) ҡалдыра йәки яҙма мөрәжәғәттәрен 450076, Өфө ҡалаһы, Коммунистик урамы, 29 адресына ебәрә ала.

**Рәсәй Наркотиктар әйләнешен контроллләү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығы.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓28 мартта Актерҙар йорто сәхнәһендә Бөтөн донъя театр көнөнә арналған "Веселая кулиса" 16-сы Республика фестивале үтә. Быйыл ул яңы форматта ойошторола, тип хәбәр итә республиканың Театр эшмәкәрҙәре берлеге. Унда Башҡортостандың бөтөн милли театрҙары ҡатнашыуы көтөлә.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә Рәсәй Эске эштәр министрлығы ҡала идаралығының яңы етәксеһе, полиция полковнигы Виталий Дудко менән таныштырҙылар. Виталий Дудко 1966 йылда Ҡаҙағстан Республикаһының Павлодар өлкәһендә тыуған. Ҡораллы Көстәрҙә хеҙмәт иткән. 1987 йылдан алып эске эштәр органдарында эшләй. 2014 йылдың сентябрендә Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығына күсерелә, әлегә тиклем унда Енәйәтте тикшереү идаралығы начальнигы урынбаҫары була.

✓Дәүләт автоинспекцияһы 14 марттан 8 апрелгә тиклем "Иғтибар - балалар!" операцияһы уҙғара. Уның төп маҡсаты - каникул осоронда балалар ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаларын иҫкәртеү, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен пропагандалау.

✓Күмертау ҡалаһындағы Республика политехник лицей-интернатында йәштәр форумы уҙҙы. Уны Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Йәштәр советы, Башҡорт йәштәре союзы ойошторҙо. Форум барышында Күмертау башҡорт гимназияһында яҡын-тирәләге район йәштәре араһында волейбол буйынса турнир ҙа булды.

✓Башҡортостанда вакансиялар банкында 24 мең самаһы буш эш урыны иҫәпләнә. Ысынында иһә март башына рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 28 мең кешенән арткан. Теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,42 процент тәшкил иткән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында.

✓Башҡортостандың аҙыҡ-түлек сәнәғәте вәкилдәрен Ҡытайҙа халыҡ-ара ауыл хужалығы продукцияһы һәм аҙыҡ-түлек күргәҙмәһендә ҡатнашырға саҡыралар. Күргәҙмә 20 апрелдән 3 майға тиклем Шаньдун провинцияһының Вэйфан ҡалаһында уҙғарыла.

✓Түмәндә йөҙөү буйынса донъя чемпионаты тамамланды. Донъя беренселегендә 42 илдән 1200-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. 170 комплект миҙал уйнатылды. Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостандан 20 спортсы сығыш яһаны. Улар бер алтын, ике көмөш һәм ике бронза миҙалға лайыҡ булды.

✔ *Яуап биреүселәрҙең 29,8% милли хистәренән көлөү йәки ихтирамһыҙ мөғәмәлә менән осрашырға тура килмәүен белдерһә, 28,1% туған теленә һәм милли ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирамһыҙ мөнәсәбәт күрһәтелеүен билдәләй.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



**Өфө - күп милләтле ҡала һәм унда "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса мәғлүмәт сәйәсәтен дөрөҫ алып барыу өсөн милләт-ара мөнәсәбәттәр, туған телдең тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләрендә ҡулланылыу әһәмиәтен һәм дәрәжәһен белеү мөһим. Ошо маҡсаттан ҡала округы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы - матбуғат хеҙмәте даими рәүештә баш ҡала халҡы араһында социологик тикшеренеүҙәр уҙғарып тора.**

# ХАЛЫҠ ФЕКЕРЕ...

## махсус өйрәнелә

Былтыр был сара йәйгеһен ойошторолоп, Өфө халҡының төрлө телдәр белеү-белмәүе асыҡланды. Яуаптарҙан күренеүенсә, рус телен яуап биреүселәрҙең 91,4 проценты камил белә, башҡорт телен - 20,4, татар телен - 22,8, сит телде - 5 процент.

Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең тотороҡлолоғон Өфө халҡының 7 проценты "бик яҡшы" тип баһалаһа, 57,6 проценты - "насар булыуға ҡарағанда яҡшы", ә 11,8 проценты - "яҡшы булыуға ҡарағанда насар", 3,4 проценты "бик насар" тип баһалай. 20,2 процент респондент яуап бирергә ҡыйынһына. Ыңғай һәм кире ҡылыҡһырламаларҙы сағыштырып ҡарағанда, ыңғай үсеш күҙәтелә, йәғни ыңғай яуаптар күберәктә тәшкил итә. Былдай күренеш 2010 йылдан алып тотороҡло килә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, дөйөм алғанда Өфө халҡы башҡа милләттәргә ыңғай ҡараштa, 2010 йыл менән сағыштырғанда, был һан 78,6 проценттан 92,1 процентҡаса үҫкән.

Социологик һорау алыу барышында яуап биреүселәрҙең 29,8 проценты милли хистәренән көлөү йәки ихтирамһыҙ мөғәмәлә менән осрашырға тура килмәүен белдерһә, 28,1 проценты туған теленә һәм милли ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирамһыҙ мөнәсәбәт күрһәтелеүен билдәләй. Һәр өсөнсө респондент (32,1 процент) урындағы халыҡтың эшкә килеүсе гастарбайтерҙар менән низағҡа инеүен билдәләй. Яуап биреүселәрҙең 15 проценты туған телендә гәзит-журналдар, телеһәм радиотапшырыуҙар етешмәүенә борсолһа, 14,1 процент милли сығышына бәйле эшкә йәки уҡыуға ҡабул ителмәүен белдерә. Хеҙмәт йәки уҡыу коллективында 8,3 процент кеше милли ерлектә низағҡа эләгә. 9,3 процент респондент милли ерлектә көс ҡулланыуға тарыуын билдәләй.

Әҙәбиәт йылы сиктәрендә былтыр халыҡты әҙәбиәткә һәм уҡыуға ылыҡтырыу маҡсатынан квартал һайын һорау алыуҙар ойошторолдо. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ҡала халҡының уҡыуға ҡыҙыҡһыныуы артҡан. Әгәр 2014 йылдың декабрендә респонденттарҙың 9,1 проценты даими рәүештә китап уҡыһа, былтыр ошо уҡ ваҡытта был һан 14,7 процентҡа еткән. Шул уҡ ваҡытта бөтөнләй уҡымаусылар һәм һирәк уҡыусылар һаны йыл эсендә 24, 5 процентҡа кәмеп, 51,7 процент тәшкил иткән. Шулай уҡ матбуғат баҫмаларына ҡыҙыҡһыныу ҙа артҡан: 2014 йылдың декабрендә гәзит уҡыусылар - 9,1, журнал уҡыусылар 3 процент булһа, былтыр был һан 20,4 һәм 8,3 процентҡа еткән.

**Ҡала халҡының уҡыуға ынтылышына Әҙәбиәт йылы уңайынан яҙыусыларҙың һүҙҙәре яҙылған реклама щиттарының барлыҡҡа килеүе лә этәргес булған. Халыҡтың 78 проценты уларҙы үҙ күҙҙәре менән күрһә, 11 проценты ишеткән йәки фотоларын ғына күргән. Дөйөм алғанда, былтыр шундай 775 реклама урыны файҙаланылған.**

Мәғлүмәт-аналитика идаралығы туған телдәрҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән сараларҙы яҡтыртыуға ла ҙур әһәмиәт бирә. Өфө ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында көн һайын телдәр тураһындағы Законды тормошҡа ашырыуға ҡағылышлы ниндәй ҙә булһа материал урынлаштырыла. Сайттың башҡорт телендәге битен яңыртыу буйынса эш алып барыла. Был теманы яҡтыртыу буйынса ҡаланың "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости", "Киске Өфө" гәзиттәрендә, "Уфа" журналында бик күп мәҡәләләр донъя күрә. Һәр һанда мотлаҡ рәүештә тарихҡа, мәҙәниәткә, телгә, ғөрөф-ғәҙәттәргә, мәғарифҡа бағышланған материалдар сыға. Гәзит редакциялары бөгөнгөнө һәм тарихи мираҫты өйрәнеүгә йүнәлтелгән, шул иҫәптән "Шәжәрә байрамы", "Йыл уҡытыусыһы", "Шаяниум" һ.б. конкурстарҙың мәғлүмәти бағыусыһы булып тора.

"Вечерняя Уфа" гәзитендә "Грамотный город", "Комиссия по языкам", "Аксаковские дни" кеүек тематик рубрикалар ойошторолоп, уларҙа туған телдәрҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә, рухи традицияларҙы нығытыуға, республикала һәм уның баш ҡалаһында йәшәүсе халыҡтарҙың милли мәҙәниәтен, үҙенсәлеген, матурлығын күрһәтеүгә йүнәлтелгән мәҡәләләр баҫтырыла. Мәҡәләләр гәзиттән сайтына ҡуйылып, интернет аша танышыу мөмкинлеген дә бирә.

"Уфимские ведомости" гәзите, "Уфа" журналы биттәрендә һәм Ufaved.info сайтында даими рәүештә республикала йәшәүсе халыҡтар берлеге, үҙенсәлектәре, уларҙың мәҙәниәтен һәм телдәрен һаҡлау темаһына арналған материалдар донъя күрә. "Уфа" журналында 2006 йылдан алып "Мин башҡорт телен өйрәнәм" рубрикаһы аҫтында башҡорт теленән һүҙҙәрҙе әйтеү, мәғәнәһен аңлатыу буйынса дәрестәр бирелә. Бөгөнгә был рубрикала 120 дәрес бирелгән. Бынан тыш, "Уфимские ведомости" гәзитендә "Ялыу кенәгәһе" рубрикаһында грамматик хаталар булған алтаҡталарҙың һәм рекламаларҙың фотолары баҫыла. Уның маҡсаты - йәмәғәтселектең, реклама биреүселәрҙең иғтибарын визуаль мәғлүмәттең дөрөҫ яҙылышына, әҙәби тел нормалары һаҡланыуға йәлеп итеү.

Башҡорт телендә сыҡҡан "Киске Өфө" гәзитенең һәр һанында мәктәптәрҙә туған телдәрҙе уҡытыу проблемаларын яҡтыртҡан түңәрәк ҡорҙар, диалогтар, аналитик мәҡәләләр донъя күрә. Редакция Өфөнөң ҡала һәм район власть органдары вәкилдәре менән берлектә предприятиеларҙа, ойошмаларҙа һәм учреждениеларҙа "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыуҙы тикшереү буйынса даими рейдтар үткәрә, алтаҡталарҙы, мәғлүмәт күрһәткестәрен, бланкыларҙы тәржемә итеү буйынса предприятиеларға ярҙам итә.

Ғөмүмән алғанда, телдәр тураһында законды тормошҡа ашырыу буйынса мәғлүмәт ярҙамы күрһәткәндә беҙ төрлө халыҡтарҙың тиңлеген, баш ҡала территорияһында йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәре араһында үҙ-ара ихтирамды, татыулыҡты, дуҫлыҡты пропагандалау төп бурысыбыҙ булып тороуын бер ваҡытта ла иҫебеҙҙән сығарырға тейеш түгелбеҙ.

**Камил ЮЛАЕВ,**
**Өфө ҡалаһы округы хакимиәтенең Мәғлүмәт-аналитика идаралығы - матбуғат хеҙмәте етәксеһе.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ



# ТӨНЬЯҠ КОРЕЯ ХӘҮЕФЕ

**Һуңғы ваҡытта халыҡтың иғтибарын үҙенә йүнәлткән ваҡиғалар Яҡын Көнсығыш илдәре тирәһендә барыуына күнегеп тә киттек, шикелле. Шул уҡ мәлдә киләсәгебеҙҙе төбө-тамыры менән үҙгәртерлек хәлдәр "авторы" булырлыҡ башҡа илдәр барлығына әллә ни әһәмиәт бирмәйбеҙ. Дөрөҫөрәге, ҡайһы бер илдәрҙең башлыҡтары ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәрҙе ишетмәйбеҙ. Ә ишетергә кәрәк ине, сөнки был һүҙҙәр бөгөн ҡурҡытыу өсөн генә әйтелгән кеүек булһа ла, уларҙың телгән бер ваҡытта ысынбарлыҡҡа әйләнеүе мөмкин.**

Һүҙем - Төньяҡ Корея (КНДР) тураһында. Ким Чен Ындын "илдә тәүге водород бомбаһының һынауы уңышлы үтеүе" тураһындағы белдереүе күп илдәр араһында һәм тәү сиратта, Көньяҡ Корея менән Япония тарафынан, ҡаты шелтәләнде. Уларҙы аңларға була, сөнки КНДР-ҙың был аҙымы былай ҙа тынысһыҙ Корея ярымутрауындағы хәлдәрҙе тағы ла ҡатмарлаштыра һәм әгәр ҙә Өсөнсө бөтә донъя һуғышына уҡ булмаһа ла, Көньяҡ һәм Төньяҡ Корея араһындағы хәрби бәрелештәргә алып килеүе бик ихтимал.

1950-1953 йылдарҙа барған Корея һуғышы миллионлаған кешенең ғүмерен өҙә. 1910 йылдан алып Корея Японияның колонияһы һанала. Икенсе бөтә донъя һуғышында ҡыҫымға алынған Япония 1945 йылдың авгусында бер һүҙһеҙ капитуляция яһауы тураһындағы актҡа ҡул ҡуя. Кореяны колонистар ҡулынан азат итеү маҡсатында АҠШ һәм СССР Корея ярымутрауын икеүгә бүлергә ҡарар итә. Ул ваҡытта был аҙымдың бер нисә йылдан ике эре дәүләт араһында үҙ-ара идеологик көрәшкә алып килерен бер кем дә күҙ алдына килтермәй, әлбиттә. Үҙ-ара ғына түгел, ә башҡа илдәрҙе лә хәрби бәрелештәргә ылыҡтырған Корея һуғышы ваҡытлы килешеүгә ҡул ҡуйыу менән тамамлана. Әлегә тиклем Корея республикаһы һәм КНДР араһында тулы хоҡуҡлы тыныслыҡ килешеүе юҡ.

Төньяҡ Кореяның водород бомбаһын һынауы, Япон диңгеҙенә табан бәләкәй радиуслы ракеталар ебәреүе һәм башҡа төрлө "ҡылыҡтары" бөтә донъя илдәренең Пхеньянға ҡарата санкциялар ҡулланыу тураһындағы резолюцияһын барлыҡҡа килтерҙе. Ләкин барыһының да фекеренә, һүҙенә, ҡарашына төкөрөп ҡараған Пхеньянға был сараларҙың тәьҫир итеренә ышанып булмай. Бөгөнгә көндә Төньяҡ Корея нисә ядро ракетаһына эйә икәнлеге билдәһеҙ. Бөтә яҡлап та ябыҡ ил үҙе тураһындағы мәғлүмәтте ете ҡат йоҙаҡ аҫтында тота.

Яҡын арала АҠШ менән Көньяҡ Кореяның берҙәм хәрби күнегеүҙәре үтергә тейеш. Әгәр ҙә был күнегеүҙәр үҙе өсөн хәүеф тыуҙыра ҡалһа, Пхеньян уларға ҡарата превентив ядро һөжүме эшләйәсәге тураһында белдерҙе һәм бөтә донъя йәмәғәтселеген, шул иҫәптән Рәсәйҙе лә, оло хәүефкә һалды. Шулай ҙа хәлдәр былдай һәләкәткә тиклем барып етмәҫ, тип ышанғы килә.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Трофик язва

❖ 400 грамм цинк окисы порошогы, 600 грамм глицерин, 100 грамм желатин, 200 мл дистилләштерелгән һыуҙы ҡушып болғатып, яраға һалырға, бинт менән бәйләргә һәм 20-30 көн буйына гипс кеүек сисмәйенсә йөрөргә. Ҡатнашманы дарыуханала эшләтеп алырға була.

❖ 1 ҡалаҡ һары майға 1 балғалаҡ балауыҙ, 2 грамм канифоль, бысаҡ осонда ғына баҡыр купоросы өҫтәргә. Иретергә, ҡайнап сыҡҡас та уттан алырға. Ҡаткасы булған һауытта һаҡларға. Ярағa һалып бәйләргә, бер тәүлек торорға.

### Киҙеү

❖ Киҙеүҙе, һалҡын тейеүҙе профилактикалау өсөн: 1 уртаса ҙурлыҡтағы һарымһаҡты таҙартып иҙергә, ярты стакан ваҡланған әстерхан сәтләүеге, 2-шәр ҡалаҡ үҫемлек майы, лимон һуты, бер семтем тоҙ ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан алда икмәккә һылап ашарға.

### Гастрит

❖ 1 стакан бал, 1 ҡалаҡ кипкән һәм иләктән үткән сөйәл үләнен (чистотел) болғатып, иртәле-кисле 1-әр ҡалаҡ ашарға.

### Бронхит

❖ Тигеҙ өлөштә шәкәр, бал һәм лимон һуты алырға. Бер нисә көн төнәткәс, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡты сәйгә ҡушып эсергә.

❖ Һөттө ҡайнатырға, бер аҙ һыуытырға, ярты балғалаҡ сода өҫтәргә һәм төнгөлөккә эсергә.

### Диабет

❖ Икенсе типтағы диабет топинамбур менән "һыйышмай". Был үҫемлектән яһалған тәмле салаттар ҡандағы шәкәр кимәлен түбәнәйтә. Топинамбурға ҡушып редис, ҡара торма, укроп һалырға була. Топинамбурҙан яһалған ҡәһүә лә шәкәр кимәлен кәметә. Топинамбурҙы ваҡлап турап, духовкала киптерергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# НАУРУЗ БАЙРАМЫ

**Науруз байрамы көн менән төн тигеҙләшкән көндө башлана ла, ай ахырына тиклем һуҙыла. Уны халыҡ Яңы йыл башы, Яңы йыл байрамы тип тә йөрөтә.**

Науруз байрамына алдан әҙерләнеп ҡуялар. Һәр кем, һәр ауыл хәленән килгәнсә йыйына, уйын тирәһен уйлай, ҡайһы ерҙә ҡайһыһын ойоштороу тураһында һүҙ беркетелә.

Науруз тыуған көндө һәр өйҙә һый әҙерләнә. Айырыуса бешкән итте табаҡҡа турап, шуның өҫтөнә килеләтөйөп быҡтырылған бойҙай һалынған ашҡа өҫтөнлөк бирелә. Бойҙай - туҡлыҡ, ырыҫ билдәһе ул. Унан аш әҙерләгәндә:

*- Науруз йылға баш булыр,*
*Бойҙай ашҡа баш булыр,*
*Бойҙай уңһа, аш булыр,*
*Уңмаһа, таш аш булыр.*
*Йылдың башы уң булһын!*
*Ырыҙғыһы мул булһын!*
*Игендәр шашып уңһын!*
*Ҡаҙандар ташып торһон!*
*Бир көндәрҙең һилен -*
*Илдәр булһын имен!* - тип һамаҡлайҙар. Шулай һамаҡлай-һамаҡлай тәүҙә бойҙайҙы ауыҙ итәләр. Сөнки бойҙай - аштың иң өлкәне.

Науруз башланғас та, иртә менән бөтә бала-саға, йәштәр, үсмерҙәр ауылдың ҡарттарын күреп сығырға тейеш. Һәр өйгә инеп: "Әссәләмөғәләйкүм!" - тип сәләм биреп, ике ҡуллап оло кешеләр менән күрешәләр. Уларҙан фатиха алалар. Ситтә булған оло ҡәрҙәштәренә барып, улар менән күрешеп, фатиха алыу ҙа изге эш һанала. Тәүге көндә күрешә алмағандары аҙаҡ күрешә. Тик байрам бөтмәҫ элек.

Науруз байрамына бөтәһе лә борондо милли кейем кейә. Урам тулып йөрөйҙәр. Эске-фәлән булмай. Оло инәйҙәр хәтерләүенсә, элек иҫке һаламдан оло ҡурсаҡ һыны эшләп, төрлө суктар менән биҙәгәндәр, унан һуң, изге теләктәр теләп, яндырғандар.

Науруз байрамында ат сабыштырыу, көрәш, ҡыҙ ҡыуыу, тартышыу (һыбай сабып килеп, ерәү ерҙә ятҡан һарыҡ, ҡуй, кәзә түшкәһен эләктереп ала. Ҡалғандар уны тартып алмаҡсы була. Китә тартыш, китә айҡалашыу, китә алыш) үткәрелә.

Науруз байрамында бүтән төрлө бәйге, ярыштар ҙа була. Никах туйын шул байрамға тура килтереү изге һанала. Байрам Науруз айы бөткәнсе дауам итә.

Зөйәк ауылында (Белорет районы) "Ҡышты оҙатыу" байрамы Инйәрҙең боҙо өҫтөндә үткәрелә. Унда ете йәштән алып етмеш йәшкә хәтлемге кешеләр үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтә. Әбейҙәр тоҡ кейеп йүгерешә, бабайҙар саңғыла "ярыша". Был байрамға хужабикәләр төрлө-төрлө ризыҡтар алып килә. Күрше ауылдар ҡунаҡҡа саҡырыла.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**
**(Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ



# ХӨСӨТЛӨК ЭҘЛӘҮ

**▶ ҺОРАУ: "Эҙләгән - таба, тиҙәр. Был ысынлап та шулайҙыр. Һүҙем - бөгөн бер кешеләрҙең башҡаларҙа хөсөтлөк эҙләү сифаты тураһында. Нимә генә әйтһәң дә, үҙенә кәрәкте генә ишетергә һәләтлеләр тураһында. Һин уға бер нәмәне тылҡыйһың, ә ул үҙенсә аңлай. Аңлай ҙа, турһайып йөрөй. Ярай ул этлекте бер һиндә генә тапһа. Аҙым һайын, минут һайын, һүҙ һайын төҙҙө ҡыйышҡа бороп, итәгенә ут ҡапҡандай ялпылдап атлап киткән кешеләр бар бит..."**

***Резеда ХУРАМШИНА, валеолог:*** Бар нәмәлә лә хөсөтлөк эҙләү - ул үҙ-үҙеңде түбән баһалау бәләһе. Әгәр ҙә һин үҙең тураһында объектив фекерҙә булһаң, башҡаларҙың һүҙенә буйһоноп бармаҫ инең. Һине маҡтайҙар икән - һин һәйбәт, биш минуттан һине яманлаһалар - һин насар. Ысынында иһә, кешегә үҙенә ҡарата мөнәсәбәтен генә үҙгәртеү шарт. Үҙеңдең күңелеңдә үҫтерергә, кәрәк саҡта үҙеңә объектив ҡарашлы булырға, хаталарыңды танып, уларҙы юҡ итеү өҫтөндә эшләргә кәрәк. Ғөмүмән, әгәр ҙә был проблема социумда тулы ҡанлы йәшәргә ҡамасаулаһа, белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Тешегеҙ һыҙлаһа йәки киҫкен рәүештә операция кәрәк булғанда бит һеҙ әхирәтегеҙгә бармайһығыҙ. Бөтөн нәмәлә лә кер эҙләү, ямանлыҡ күреү, үҙеңде ҡорбан позицияһына ҡуйыу кешене психосоматик яҡтан хәлһеҙләндерә. Кешегә шуны аңлау шарт: ул донъяға кәкре күҙгә аша ҡарай һәм был картина ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Психологик проблемаларҙы ла белгестәр ярҙамында хәл итеү кәрәк.

# УЛ ҠЫҘ ҮКЕНЕРЛЕК БУЛҺЫН!

**▶ ҺОРАУ: "Бәләкәй сағымда атайымды ҡот осҡос енәйәт арҡаһында төрмәгә ултырттылар. Әсәйем мине һәм һеңлемде кешенән кешегә, ҡаланан ҡалаға эйәртеп йөрөттө лә, инәй тейешле кешеһенә "ваҡытлыса" тип ҡалдырып китте һәм юҡ булды. Инәй беҙҙе ҡараны, ашатты-эсерҙе, хатта опекунлыҡҡа алды, тик ғүмеренең аҙағынаса атайымды һәм әсәйемде ҡарғап йәшәне. Кем генә инһә лә, уларға беҙҙе әрләп һөйләне, нишаналар, ултыралар шунда минең елкәмде кимереп, тип илауланы. Уйнарға сыҡҡанда берәй хәл килеп тыуһа, балалар беҙҙе ҡыуып, туҡмап ҡайтарып ебәрә ине.**
**Үҫә төшкәс, атай йортона ҡайттым, гаражында автомастерской астым, тамағымды ҡарарға һәм өҫтөмдө бөтәйтергә аҡсам етерлек. Һеңлем ун һигеҙ йәшенән кейәүгә сыкты ла, ҡайҙалыр олаҡты, күрешкәнем, аралашҡаным юҡ. Ауылда минең ҡайтыуымды өнәп еткермәнеләр, миңә ҡурҡып, һынап ҡараған кеүектәр. Атайымдың ауыр енәйәте булышлыҡ иттеме быға, әсәйемдең еңел-елпе холҡомо - белмәйем. Шуны аңламайым: мин нимәлә гәйепле һуң? Бер ҡыҙ менән дуҫлашып йөрөгәйнек, ата-әсәһе беҙҙең аралашыуға ҡаршы төштө, хатта ҡыҙҙы минән биҙҙерер өсөн әллә нәмә һөйләп бөттөләр. Ҡыҙ үҙе лә ата-әсәһенең һүҙенән сыҡмағас, артыҡ ныҡышманым. Тик шуныһы: башҡа бер кем менән аралаша алмайым, хатта күтәрелеп ҡарауы ауыр. Барыһы ла көлә, мыҫҡыл итә кеүек, хатта ауылдаштар мине атайым кеүек кеше ғүмерен ҡыйырлыҡ әҙәм итеп күрәләр, ахыры.**
**Автомастерскойға килгән ир-ат менән генә аралашам. Үҙем эсмәйем, тартмайым, тәртип боҙмайым. Башым һуҡкан яҡҡа сығып китәйемме икән әллә, тип уйлап та ҡуям. Һуңғы арала апатия солған алды, гел кәйефем юҡ, кешенән яман һүҙ, ҡырын ҡараш көтәүелләп йөрөүе арытты... Илшат. "**

***Резеда ХУРАМШИНА, валеолог:*** Илшаттан башы өҫтөндәге болоттарҙы ҡуйыртмауын үтенер инем. Миненсә, егет ауылдаштарынан үҙе тартына, ата-әсәһе өсөн ояла. Шуны иҫтә тоторға кәрәк: һеҙ атай-әсәйегеҙҙең хаталары өсөн яуаплы түгел. Үҙ-үҙегеҙҙе яуапҡа тарттырмағыҙ, зинһар, ауылдаштарығыҙға ла ҡара яҡмағыҙ.

Ата-әсәһе баҫымы арҡаһында һеҙҙең менән ташлашырға мәжбүр ҡыҙға килгәндә, беренсенән, берәү ҙә мөхәббәттән төңөлөү тойғоһонан азат түгел. Был бәлә һеҙҙе лә урап үтмәгән. Икенсенән, һуныһан был ҡыҙҙың, их, ниндәй егеттән ҡолаҡ ҡаҡтым бит, тип үкенеп йәшәү мөмкинлеге һеҙҙең ҡулда. Матур итеп эшләгеҙ, законды боҙмағыҙ, йәш саҡта сәйәхәт итегеҙ, белем алығыҙ, ял итегеҙ, ҡыҙыҡлы кешеләр менән аралашығыҙ: һеҙҙең алдығыҙҙа мең юл шар асыҡ! Тик аҡты - ҡара, ҡараны аҡ итеп кенә күрмәгеҙ...

Һеҙ баш һуҡҡан яҡҡа сығайым да китәйемме әллә, тип һорайһығыҙ. Ҡайҙа ғына барһағыҙ ҙа, һеҙ үҙегеҙҙе алып йөрөтәсәкһегеҙ. Һеҙгә йәшәү урынын түгел, ә булмышығыҙҙы, үҙегеҙгә булған мөнәсәбәтте үҙгәртергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Кеше тик социумда ғына шәхес булараҡ сығыш яһай ала. Башҡа кешеләр күҙгә ише - кемдер дөрөҫ сағылдыра кешене, кемдер юҡ. Иң мөһиме - үҙеңдең күңел көҙгөң һине төҙөк килеш күрһәтһен, ҡурҡыу, икеләнеү, ышанмау һәм бар нәмәнән дә хөсөтлөк эҙләү күләгәһе ятмаһын.**

**Айһылыу ҒӘЛЛӘМОВА**
**әҙерләне.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# КЕЙӘҮ БУЛЫУЫ ЕҢЕЛ,

## ир булыуы ғына ауыр...

**Гәзиттең быйылғы 8-се һанында "Ирҙәребеҙҙе ниңә яҡларға һәм йәлләргә?" тигән мәҡәләһендә Әлиә Исмәғилева бик урынлы мәсьәлә күтәрә. "Ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" тигән көслө затты кәмһеткән, түбәнәйткән лозунгылар күтәреүҙе туктатып, "Ир-егеттең дәрәжәһен һанлайыҡ!" тигәнде алға һөрәйек. Ир-егеткә - ир-егет, көслө зат итеп ҡараһаҡ, улар, әлбиттә, үҙҙәренең төп вазифаһында - көсһөҙ зат, балалары, ғаиләһе һағында булыр", тип тамамлай автор мәҡәләһен һәм гәзит уҡыусыларҙы бәхәс ҡорона саҡыра. Ошо темаға ҡағылышлы фекерҙәремде әйтәйем әле мин дә, тинем.**

Һәр кем үҙ бәхете менән тыуа йәки кеше тыуғанда уҡ яҙмышы маңлайына яҙыла, тиҙәр. Әммә быны менән тулыһынса килешмәҫкә лә мөмкин. Һәр кем үҙ яҙмышын үҙе яҙа һымаҡ ул. Кешенең бәхете үҙенең холҡо, тормошҡа ҡарашы һәм шулай уҡ үҙен уратып алған яҡындарының яҙмышы менән дә туранан-тура бәйләнгән. Тормош шуға ҡоролған да: атай менән әсәй - балаһы, балаһы - атай-әсәһен, ир менән ҡатын - бер-береһен бәхетле итергә бурыслы. Улар бер-береһенең яҙмышы, киләсәге өсөн яуаплы, ҡаршылыҡтарҙы бергә-бергә еңеп, үҙ-ара ярҙамлаша-ярҙамлаша тормош юлынан барырға тейеш.

Күптән түгел Рәсәй телеканалдарының береһендәге тапшырыуҙа бәхет төшөнсәһе, дөрөҫөрәге, ғаиләлә бәхетле булыу серҙәре тураһында тема күтәрелде. Ғәҙәттәгесә, сәхнә түрендә тапшырыу геройҙары урын алғайны. Урта йәштәрҙәге ҡатын менән ир тамашасы, психологтар, ғаилә белгестәре алдында үҙ мөнәсәбәттәрен асыҡланы. Унда күп михнәт күргән ҡатын-ҡыҙҙан башҡа бер кем дә "тормошҡа сығыу" һүҙбәйләнеше мәғәнәһен аңлата алманы. Алып барыусы ток-шоуҙа ҡатнашҡандарҙың бик күптәренә ошо һорауҙы бирҙе, уға төрлө яуаптар булды. Әммә миңә төп геройҙың яуабы ғына оҡшаны: "Тормошҡа сығыу - ул тереүле, таянысլы булыу, тормош ауырлыҡтарын үтеүҙә иптәшле булыу", - тине ҡатын. Һөйләүенсә, уның яҙмышында бөтәһе лә киреһенсә булған. Юғары белемле, һыңғай холоҡло, изге күңелле булһа ла, уның ире тормошҡа әҙер булмай сыға. Ул хатта үҙ аллы сәй ҡайнатып, әҙер ашты ла йылытып ашай алмай. Ҡатынға ике улы менән бергә ирен дә тәрбиәләргә, ғаиләлеге бөтә ауырлыҡты, йөктө үҙенә тартырға тура килә. Физик йонсоу, нервылар көсөргәнеше уны тиҙҙән ҡаты ауырыуға һабыштыра. Был, әлбиттә, алдан әҙерләнгән махсус сценарийҙағы дөйөмләштерелгән образдар ғыналыр, мөғайын. Әммә бындай миҫал беҙҙең көнитмешебеҙҙә лә йыш осрап тора бит.

Йәшерен-батырыны юҡ, бөгөн күп ғаиләләрҙең башында - ҡатын-ҡыҙ үҙе. Бөтә йорт-хужалыҡ эштәрен алып барыуҙан, бала тәрбиәләүҙән алып, аҡса табыуға тиклем. Ир-егеттәргә ни, шул ғына кәрәк, үҙенә бер ниндәй яуаплылыҡ алмай, ғаилә дилбегәһен бөтөнләйе менән ҡатынына тотторорға ғына тора. Йортҡа йәки фатирға ремонт эшләү, яңы йыһаз һатып алыу, коммуналь хеҙмәткә түләү, атай-әсәйҙәр йыйылышына барыу - былар бөтәһе лә ҡатын-ҡыҙ иңенә төшә.

Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса республикала ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙән күберәк. Балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә ҡыҙҙар һаны өҫтөнлөк итә. Класс лидерҙары ла, гәҙиттә, ҡыҙҙар. Билдәле булыуынса, уҡытыусыларҙың да күбеһе гүзәл заттар тәшкил итә. Мәктәптә класташ ҡыҙҙарының һәм уҡытыусыларының, ә өйҙә әсәйҙәренең күҙенә ҡарап үҫкән уландар, һөҙөмтәлә, үҙ-ара бер нәмә лә хәл итергә өйрәнә алмай. Әсәһенең, өйләнгәс, ҡатынының күрһәтмәләрен көтөп торған ир йоратыла әйләнә. Ундайҙарға бигерәк тә хәрби хеҙмәттә ауырға тура киләлер, тип уйлайым. Армиянан рухтары һынып, алдағы көнгә, үҙҙәренә ышанысын юғалтып ҡайтҡандарҙың күбеһе әсәй тәрбиәһенән генә күргән егеттәрҙер, мөғайын.

✔ Тау һыртында боронғо мәғдән ҡаҙыу урыны бар. Бына ошо осраҡлыҡ беҙгә кварцты ентекләберәк ҡарап, бөтөн Уралды хасил иткән кварцты тикшереүҙә бер генә осраҡты ла торғоҙоп ҡалдырмаҫ өсөн сәбәп булды.



ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!



**Халҡыбыҙҙың исеме быуаттар аша ла ҡалҡып сығып милләт данын күтәргән уландары бар. Шуларҙың береһе - Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. Беҙ уның мәғрифәтсе, әҙип, ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре булыуы хаҡында мәктәп йылдарынан белеп үҫтек. Ләкин былар барыһы ла айсбергтың өҫкө өлөшө генә. Хатта бөгөнгө көн ғалимдарыбыҙ тарафынан өйрәнелеп, баҫмаға сығарылған мираҫ та М. Өмөтбаев эшмәкәрлеген тулыһынса асып һала алмай әле. Белгестәр әйтеүенсә, архивтарҙа арҙаҡлы шәхесебеҙҙең уҡылмаған йәки тәржемә ителмәгән бихисап ҡулъяҙмалары һаҡлана. Был хаҡта Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге ғалимы, филология фәндәре докторы Миңлеғәле Хөсәйен улы НӘҘЕРҒОЛОВ менән һөйләштек.**

# ӨЙРӘНЕЛМӘГӘН ХЕҘМӘТТӘРЕНДӘ ЛӘ...

## әллә күпме сер, мәғлүмәт барҙыр

**➔ Ә ғаилә хәлдәре, яҡындары йәки ғалимдың күңел донъяһын асыҡлаған хаттар һаҡланмағанмы? Ниндәй генә бөйөк булғанда ла, ул да бит кеше...**

- Бар, ундайҙар ҙа бар. Мәҫәлән, ана шул хатлашыуҙар нигеҙендә Өмөтбаевтың атаһының ете балаһы булыуы билдәле. Өлкән улы Фәхретдин, унан Мөхәммәтсәлим, унан Сөләймән, шунан Ғабдулла исемле улдары һәм Суфия, Фатима, Зөһрә исемле ҡыҙҙары булған. Ҡустылары яҙған хаттарҙа һеңлеләре хаҡында ғаиләсә, ябай, иркә һүҙҙәр бар. Яҙмаларында үҙенән йәш туғандарына ағайҙарса кәңәштәр бирә, аҡыл өйрәтеп ебәрә.

Үҙегеҙ әйтмешләй, ул да ер тормошо менән йәшәгән һәм Ҡырымда хеҙмәттә булғанында уға ҡатынынан ҡыҙыҡ ҡына хат килә. Кемдер уның ҡатынына иренең янында икенсе ҡатын барлығын хәбәр итә һәм ҡатыны был хаҡта үҙенең фекерен белдерә. Хатты Бибиғәбиҙә күрше ҡыҙҙан яҙҙырта. Ошо тәңгәлдә мин был хаттың үтә лә мәҙәниәтле, тәрбиәле итеп яҙылғанын, унда бер ниндәй ҙә ярһыулыҡ, ғәйепләү йәки мөнәсәбәт асыҡларға теләү ноталарының тойолмауын һыҙыҡ өҫтөнә алып киткем килә. Эстәлеге былайыраҡ: "Минә шундай-шундай һүҙҙәр килеп етте, әммә нисек кенә булғанда ла һинең тыуған иленде, балаларыңды, хәләл йәмәғәтеңде онотмауыңа, уларға әйләнеп ҡайтырыңа ышанам, беҙ һине һағынып көтәбеҙ", - тип яҙа Бибиғәбиҙә һәм хатта һағышлы ғына шиғыр ҙа өҫтәй. Бына ниндәй аҡыллы, сабыр булған уның Бибиғәбиҙәһе. Һуңғараҡ Мөхәммәсәлим ҡустыһы Сөләймәнгә был тарихты асыҡлап яҙа. Хаттың яртыһы төркисә, яртыһы кириллицала, тимәк, аҫҡы өлөшө тик ҡустыһына ғына тәғәйенләнә. Ул ысынлап Ҡәҙриә исемле ҡатынға йөрәк хистәре булыуы ( "Бер шәһәрҙә гүзәл күрҙем" шиғыры уға арнала), бергә йәшәп алыуҙары, тик ваҡыт үтеү менән был мөнәсәбәттәрҙең тарҡалыуы хаҡында әйтә. Йәғни, балалары һәм ғаиләһен беренсе урынға ҡуйыуын белдерә.

Балалары менән дә хатлаша ул. Баязит, Бибигөлсөм, Шаһисәрүәр, Мөхәммәтзакир тигән исемдәр телгә алына бында. Оло улы Баязит йыш ҡына "Шиһисәрүәр ауырый" тип яҙа. Аңлауыбыҙса, шул улы бала саҡтан ауырыу булып, йәшләй генә үлеп тә ҡала. Бибигөлсөм ҡыҙы ла бик матур хаттар яҙа, тик, үкенескә ҡаршы, был ҡыҙы ла тормошҡа сыҡҡас, иртә вафат була. М. Өмөтбаев балаларына яҙған хаттарында, дин тотоғоҙ, тип өгөтләй. Өлкән улы Баязитҡа яҙған, иртән намаҙға ултыр, "Фәтиха" сүрәһен уҡы, шуның менән башлап ебәр намаҙыңды, тигән һүҙҙәре башҡа хаттарында ла ҡабатлана. Хаттарҙың һәр береһендә шундай йылылыҡ, тәрбиәлелек, бер-береһенә оло хөрмәт тойомлана.

**➔ Һеҙҙең фондта тағы ла М. Өмөтбаевҡа ҡағылышлы, уҡыусыға билдәле булмаған ниндәй яҙмалар һаҡлана?**

- Фондта барлығы 532 документ тупланған. Ҡомартҡыларҙың иң боронғоһо XVII быуат башына, дөрөҫөрәге, 1603 йылға ҡараһа (бәйғәмбәрҙәр һәм мосолман әүлиәләре тураһындағы әҫәр), иң йәше XX быуат башына, 1906-1907 йылдарға мөнәсәбәтле.

Бындағы 21 документ (улар I томға индерелгән) Мөхәммәтсәлимдең атаһы Ишмөхәмәт Ишемғол улы Өмөтбаевҡа ҡағыла. Улар араһында аттестат, таныҡлыҡ, ғариза, хат кеүек яҙмалар күп. Уның башҡорт кантоны булып торған осоронда төҙөгән формуляр исемлеге лә иғтибарға лайыҡ. Унда кантондың тормошо һәм эшмәкәрлеге, ғиләһе һәм хужалығы буйынса мөһим факттар теркәлгән.

Мәғрифәтсенең 13 публицистик мәҡәләһе, 5 фәнни мәҡәләһе, 1 проза һәм 15 шиғри әҫәре, тиҫтәнән ашыу рус һәм фарсы телдәренән тәржемәһе, бер нисә фольклор һәм этнографик яҙмаһы, шәкерт йыйынтыҡтары, фәнни-педагогик яҙмалары, төрлө инстанцияларға ғарызнамәләре, халыҡ медицинаһы һәм һөнәре буйынса яҙмалары, хәтирәләре, һүрәттәре һәм фотографиялары һаҡлана. Бында тағы М. Өмөтбаев төҙөп ҡалдырған һүҙлектәр ҙә бар. Шуларҙың береһе "Фарсы-татар-рус һүҙлеге" (борон "татар" һүҙе төрки тигәнде аңлатҡан) үҙ эсенә 400 һүҙҙе алһа, "Фарсы-рус һүҙлеге" 1 мең тирәһе һүҙән тора. Шулай уҡ ике боронғо башҡорт шәжәрәһенең, бер хажнамәнең, "Сыңғыҙнамә" һәм "Тауарих-әл Болғария" әҫәрҙәре фрагменттарының күсермәләре һаҡлана. Бында тағы ла үҙ замандашы булған, танылған утыҙлап шағирҙың әҫәрҙәре күсереп алып һалынған. Йәғни, М. Өмөтбаев яҙмалары аша улар хаҡында ла күп кенә мәғлүмәт алырға була.

Һүҙемде дөйөмләштереп, М. Өмөтбаевтың хеҙмәттәре әле өйрәнеп бөтөлмәгән, уларҙа әллә күпме асылмаған серҙәр, ҡыҙыҡлы, фәһемле яңылыҡтар барҙыр, тип әйтергә теләйем. Был байлыҡты ентекле тикшереп, тәртипкә һалып, халыҡҡа еткереү - ғалимдарыбыҙҙың алдында торған оло бурыс.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**

**(Аҙағы. Башы 11-се һанда).**

Бер танышымдың улы армияға тиклем бик тыйнаҡ, күркәм холоҡло булды. Әсәһе уны, ҡыҙҙарға алмаштырғыһыҙ, тип маҡтай торғайны. Егет әсәһенең рөхсәтенән тыш урамға ла сыҡманы, секция-фәләнгә йөрөмәне. Ә бына армияға барып, бер-ике ай хеҙмәт иттеме-юҡмы, күңелһеҙ хаттар яҙып, әсәһенең эсен бошорҙо, ниндәй булһа ла сәбәп табып, хәрби хеҙмәттән ҡайтарыуын һораны. Әрме ваҡыты шулай үтеп китте. Әсәнең, улым сынығып, тормошҡа өйрәнеп ҡайтыр, тигән өмөттәре аҡланманы. Өйләнеп тә оҙаҡ йәшәй алманы. Үҙе бешмәгәндең ашы бешмәй тигәндәй, сүкеш тотоп сөй ҙә ҡаҙаҡлай алмаған ир нимәгә кәрәкһен, бер нисә йылдан кәләше бер йәшлек малайы менән әсәләренә ҡайтты ла китте. Әлеге ваҡытта йәш ир әсәһе менән йәшәй. Эшкә урынлашһа ла, оҙаҡ тотҡарлана алмай. Ныҡлы ғына эш урыны булмағас, ҡырын һалырға ла өйрәнеп алды. Әле әсәһенең бәләкәй генә пенсияһына йәшәп ятҡан көндәре. Тәрбиәле, тыйнаҡ үҫмерҙең киләсәктә бер ҡайҙа ла эшләмәгән, өҫтәүенә эсергә ятҡан кеше булыр тип, әсәһе генә түгел бик күптәр күҙ алдына ла килтермәгәндер.

Бындай яҙмышлы йәштәр бихисап. Ир-егеттәрҙең йомшаҡ булыуында, әлбиттә, күберәк беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, ғәйепле. Әгәр ҙә улдарыбыҙҙы, үрҙә атап кителгән әсәй һымаҡ, бөтә нәмәнән ҡурсалап, ятһа-торһа эргәһендә өлтөрәп йөрөмәһәк, өйҙә баш булам тип, хәләл ефеттәребеҙ ҡулынан бөтә эште тартып алмаһаҡ, илде, Ватанды ғына түгел, хатта үҙҙәрен дә яҡлай алмаған ир-егеттәр бөтөнләй булмаҫ ине.

Балаларға бәләкәй саҡта уҡ ғаилә тәрбиәһен, мәктәптә уҡығанда ҡыҙҙарҙы һәм малайҙарҙы айырып, ҡатын-ҡыҙ бурысын, ир намыҫы төшөнсәһен аңлатып, тормош һабағы биргәндә йәштәр өйләнер алдынан бер-береһен бәхетле итергә тейешлеге хаҡында күберәк уйланыр ине. Был иһә, кейәүләп, ҡунаҡ булып йөрөү ваҡыты үтеп, ғаилә тормошонда тәүге ҡаршылыҡты үтеп тә ҡарамай, айырылышыу яғын ҡараған йәштәр һанын күпкә кәметер ине.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Беҙҙең ҡарағастың тағы ла бер өҫтөнлөгө бар: иң ҡарт ағастар тәбенге (камедь) тип аталған ҡуйы һут бирә, быны беренсе булып доктор Валериани әфәнде билдәләгән; дәүләт Медицина коллегияһы күп тәжрибәләр нигеҙендә уны бөтә яҡлап та тиерлек Сенегал тип аталған ғәрәп тәбенгеһенә оҡшаш, тип тапҡан, ә барлыҡ айырма уның ерәнерәк төҫтә булыуынан ғибәрәт. Ул Ырымбурҙа ғәрәп тәбенгеһе ҡулланылырға тейешле барса табиби осраҡтарҙа һөҙөмтәле файҙаланыла ла инде. Бындай тәбенге үҙенән-үҙе йыуан ағас төптәрендә, бигерәк тә ағас ҡабығы һыҙырылған урында йыл һайын биш фунтҡа тиклем йыйыла...

Ҡарағаста үҫеүсе губка унда сайырҙың күп булыуы арҡаһында башҡорттарҙа эс йомшартыу сараһы сифатында ҡулланыла. Уның менән улар малдарын да дауалай: уларҙың тышҡы яраларына губка порошогын һипкәс, яра тиҙ уңалыу менән бергә, был бөжәктәрҙе яраға күкәй һалыуҙан һәм ҡортлауҙан тотҡарлай.

Башҡорт ҡатындары, көнсығыш халыҡтарына эйәреп, ҡарағас сайырын сәйнәй, ә сәйнәп бөткәнен ташлай. Был сара менән улар тештәрен аҡ хәлендә тоторға тырыша...

...Шул уңайҙан Башҡортостандағы заводтарҙың башҡа заводтар алдында файҙа алыу мөмкинлеге ҙурыраҡ булыуы хаҡында ла иҫкә алып китәм. Башҡорттар, йөрөмтәл халыҡ булараҡ та, атлы булыуҙары арҡаһында ла аҙ ғына хаҡҡа мәғдән ташый һәм башҡа завод ижтыяждарын үтәй...

...Йөрөүе ҡыйын булған ерҙәрҙән 25 саҡырым үтеп, кискә табан Бөрйән тип аталған башҡорт олоҫона килеп еттек; бында ул саҡта старшина Таулыҡай етәкселек итә ине. Бөрйән атамаһы беҙҙә 1755 йылда булған Бөрйән болаһы менән бәйле хәүеф уятты: шуның өсөн беҙ бар булған һаҡланыу сараларын күрҙек, бигерәк тә ошо бунттың таш эшкәртеүсе Брагин арҡаһында килеп сығыуын иҫкә алып; беҙҙе лә таш эштәре ҡыҙыҡһындыра ине бит. Әммә хәлдәр торошо беҙҙең хәстәрҙәребеҙҙең юҡҡа ғына булыуын күрһәтте. Бөрйәндәрҙең үҙ йорттарында ла, Ҡырғыҙ урҙаһында ла ҙур еңелеүгә дусар булыуы арҡаһында бөтөнөһөнән дә ярлыраҡ йәшәүен иҫәпләмәгәндә, беҙ уларҙа бер ниндәй ҙә айырымлыҡтар күрмәнек. Әммә таштар бөтә болаға сәбәпсе булғас, беҙ был ерҙә иҫкә алынған Брагиндың төҫлө таштар приискыһында ҡалған эҙҙәрен табырға тырыштыҡ. Таулыҡай ауылынан йөҙ саҡырым тирәһендә Талҡаҫ күле буйында урынлашҡаны уның иң мөһим приискыларынан һаналған.

Шул ерҙәргә тиҙерәк барып етеү өсөн беҙ һыбай ҡуҙғалдыҡ һәм Урал аша сыҡҡас, Һаҡмар янында ҡуна ҡалдыҡ; көслө ямғыр юлыбыҙҙы дауам итеүҙе тотҡарланы. Һаҡмарға 20 саҡырымлап барып етмәҫтән, Ширлы йылғаһы янында һуҙылып сығып торған тау һыртына килеп терәлдек, ул саф кварцтан хасил булып, Ҡортло йылғаһы буйында булғанын яҙғаныбыҙса, ярыҡтары шундай уҡ ҡарағусҡыл матдә менән тулы ине; шул урындан биш саҡырымда башҡорттар исемен әйтә алмаған тау һыртында боронғо мәғдән ҡаҙыу урыны бар, бындағы кварцта баҡыр һәм ҡарағусҡыл алтын билдәләре күренә. Бына ошо осраҡлыҡ беҙгә кварцты ентекләберәк ҡарап, бөтөн Уралды хасил иткән кварцты тикшереүҙә бер генә осраҡты ла торғоҙоп ҡалдырмаҫ өсөн сәбәп булды. Урал - кварцҡа, ә Һаҡмар тауҙары шифер һәм ҡом ташҡа бай, уларға слюда киҫәксәләре күпләп ҡушылған; шуға күрә беҙ бында слюда табасағыбыҙға ныҡ өмөтләнә инек.

**(Дауамы бар).**

*✓ Кеше үҙен-үҙе ҡайғыртмаһа, башҡалар уның өсөн уйлай һәм кешенең үҙенә уйланырға мөмкинлек бирмәй. Мин быңдай йәшәйеште синтетик йәшәүгә тиңләйем.*

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА,

## Интернет аша ла өйрәнеп була

**"Мәғлүмәтле - батша, мәғлүмәтһеҙ - ҡол", тиҙәр. "Мәғлүмәткә эйә булыусы донъяға ла эйә", тип әйтәләр. Яңы технологиялар менән бәйле берлектәге Рәсәй-Америка компанияһында хеҙмәт итеүсе башҡорт егете Илдар КИНЙӘБУЛАТОВ менән әңгәмәбеҙ яңы технологиялар, Интернет, ил, милләт яҙмышы хаҡында бара. Интернет менән эш итеүселәр Илдарҙы яҡшы белә. Ул "Бәйләнештә" сайты интерфейсын башҡорт теленә тәржемә итеүсе, Android һәм MacOS өсөн башҡорт клавиатуралары, "Башҡорт радиоһы"на ҡушымта эшләүсе ирекмән. Хәҙерге ваҡытта ул электрон башҡорт китапханаһын эшләү менән мәшғүл.**

**Беҙ мәғлүмәт даръялай аҡҡан заманда йәшәйбеҙ. Төрлө каналдар аша беҙгә мәғлүмәт шул тиклем күп килә, ҡайһыһына ышанырға белеп булмай. Бигерәк тә тормош тәжрибәһе етерлек кимәлдә булмаған йәштәр өсөн был хәл бик хәүефле, сөнки улар кешенең аңын емерергә йүнәлтелгән сығанаҡтарҙы ысынбарлыҡ итеп ҡабул итеп, юлдан яҙа. Етмәһә, хәҙерге ваҡытта бигерәк тә Интернетта нимә теләйһең, шуны яҙып була, контроль юҡ кимәлендә. Бына һин үҙең ниндәй принциптар буйынса мәғлүмәт һайлап алаһың, ғөмүмән, был осраҡта объективлыҡ нисек билдәләнә тип уйлайһың?**

- Интернет - ул эволюция. Ҡасандыр китап барлыҡҡа килеп, фәндең, әҙәбиәттең, публицистиканың китап аша донъяға таралыуы кешелектең ифрат ҙур ҡаҙанышы һаналған. Хәҙерге йәштәрҙең мәғлүмәтте нисек ҡабул итеүен күҙәтһәң, улар мәғлүмәткә бик үҙенсәлекле ҡарашлы. Йәштәр ҙур-ҙур масса мәғлүмәтте үҙе аша үткәрә һәм, китап уҡыусыларға ҡарағанда, мәғлүмәткә еңелерәк ҡарай. Һәр бер мәғлүмәткә етди ҡарап өйрәнгән кешеләргә был осраҡта ҡыйыныраҡ, сөнки улар ҙур-ҙур массаларҙы эшкәртә алмай. Йәштәр мәғлүмәтте һауа һымаҡ һулай, ә өлкәндәр өсөн ул - идеология. Йәштәр бәләкәй саҡтан уҡ ҙур-ҙур массалар менән эш иткәс, уларҙың араһынан үҙенә кәрәклеһен һәм дөрөҫөн табырға өйрәнә. Миндә лә шундай уҡ эволюция булды. Әле ун йыл компьютерҙар менән эшләйем, шуға күрә лә күп мәғлүмәтте үҙем аша үткәреү миңә ҡыйын түгел. Хәҙерге йәштәрҙең мейеһе каталог һымаҡ эшләй, йәғни ҙур-ҙур массив араһынан кәрәкле мәғлүмәтте йәһәт кенә табып алыуға һәләтле. Ғөмүмән, кемдәр көнө-төнө компьютер менән аралаша, уларҙың башы бөтөнләй икенсе төрлө эшләй.

**Мәҫәлән, һин "Яндекс"ҡа индең дә, уға ниндәйҙер тема буйынса задание бирҙең икән, ти. Шунан һуң һиңә был программа тема буйынса әллә күпме төрлө мәғлүмәт табып бирә. Минеңсә, шул табылған мәғлүмәт араһынан иң дөрөҫөн, объективын билдәләү шулай уҡ еңел түгел. Сөнки Интернет объективлыҡ өсөн яуап бирә алмай, ул мәғлүмәтте һүҙҙәр буйынса эҙләй...**

- Эйе. Әлеге Интернетта мәғлүмәт еткереү каналдары ныҡ күп. Физик донъяла улар әҙерәк. Интернетта көн һайын тиерлек яңы каналдар барлыҡҡа килә, социаль селтәрҙәргә яңынан-яңы кешеләр теркәлә һәм улар менән яңы мәғлүмәт тә инеп тора. Әлегә дөрөҫ мәғлүмәт еткерә торған ниндәйҙер универсаль модель юҡ. Шуға күрә мәғлүмәтте ҡабул итеүсе дөрөҫтө ялғандан айырыр өсөн үҙенең тәжрибәһенә, үҙенең һәм башҡаларҙың хаталарына таянып эш итә.

**Етмәһә, мәғлүмәттең дөрөҫ йә дөрөҫ булмауы сәйәси мәсьәләгә лә барып ялғана. Хәҙерге сәйәси донъяның полярлығы бер үк мәғлүмәткә ике-өс-дүрт төрлө күҙлектән ҡарарға ла мәжбүр итә. Быны сәйәсмәндәр "беренсел" йә "икенсел" стандарт тигән термин менән аңлата.**

- Интернет - сәйәси уйындар өсөн яңы һуғыш майҙаны. Әммә унан ҡурҡырға ярамай, ракеталар, атом бомбалары менән һуғышыуҙың ниндәй эҙемтәләргә алып килгәнен иҫәпкә алғанда, фекер алышы, бәхәс майҙаны күпкә отошлораҡ. Икенсенән, кем ил башында тора, шул үҙенең фекерен дөйөм илдеке итер өсөн дә Интернетты файҙалана. Уны ла аңларға кәрәк.

**"Оптимизм юҡ ул, бары тик мәғлүмәттең етешмәүе генә бар", тигән фекерҙе кем әйткәндер, әммә ул фекерҙә ниндәйҙер дөрөҫлөк тә бар һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, фәҡәт объектив һәм дөрөҫ булмаған мәғлүмәткә эйә булған кеше үҙе ҡорған иллюзиялар донъяһында үҙен бәхетле итеп тойоп та йәшәп ята бит. Миҫал эҙләп алыҫ китергә түгел, беҙ совет осороноң "тимер ҡоршауы" эсендә йәшәгән саҡта тап шундай оптимистар инек. Шулай түгелме?**

- Мин үҙемде һәр ваҡыт оптимисмын, тип әйтә алмайым. Әммә мин күп кенә нәмәләргә оптимистик күҙлектән ҡарайым. Һин ҡуйған маҡсаттарыңа, ҡорған хыялдарыңа етереңә ышанһаң, киләсәгеңде яҡты төҫтә күрһәң, оптимисһың. Бәлки, элек мәғлүмәт әҙерәк булған саҡта кешенең үҙ уйына бирелергә, хыялланырға ваҡыты күберәк булғандыр. Хәҙер кешенең ваҡыты әҙерәк, сөнки уның аша үтә торған мәғлүмәттең баҫымы күберәк. Әгәр ҙә кеше шул мәғлүмәтте эшкәртергә өйрәнмәһә, унын үҙе тураһында уйланырға ваҡыты ҡалмай. Әгәр ҙә һинең яҡты уй-хыялдарың, изге пландарың юҡ икән, ошоларҙың барыһын да донъя алмаштыра. Нимәгә алмаштыра? Әйтәйек, ҡулланыусылар йәмғиәттәре, селтәрҙәр, пирамидалар, маркетинг хеҙмәттәре үҙҙәренең концепцияларын һинең шул изге төшөнсәләрең урынына килтереп ҡуя. Әгәр ҙә һин үҙең, яҡындарың, ғаиләң тураһында үҙең уйламаһаң, ҡайғыртмаһаң, ситтәр был бушлыҡты тултырған булып, һине файҙалана башлай. Үкенескә күрә, хөкүмәт тә шундай уҡ ролде башҡара. Улар ышандырыу, реклама, идеология аша һиңә оптимизм тойғоһо уятырға тырыша. Әммә ул оптимизм, идеология кеүек үк, ваҡытлыса, дөрөҫ булмай. Ҡыҫҡаһы, кеше үҙен-үҙе ҡайғыртмаһа, башҡалар уның өсөн уйлай һәм кешенең үҙенә уйланырға мөмкинлек бирмәй. Мин быңдай йәшәйеште синтетик йәшәүгә тиңләйем. Әгәр ҙә һин рухлы, үҙеңә үҙең ышаныслы кеше түгелһең икән, үҙеңдең ысын уй-теләктәреңде, теләк-маҡсаттарыңды белмәйенсә ғүмер үткәрәһең булып сыға. Әгәр ҙә һин донъялағы үҙеңдең урыныңды аңлайһың, үҙеңде үҙең ҡайғыртып йәшәйһең икән, ниндәй генә баҫым яһалмаһын, һиндә оптимистик рух көслө буласаҡ. Оптимизмы булмаған кеше ғүмере буйына бер урында тапаныусы ғына. Тағы ла мәғлүмәт гигиенаһы ла бар. Ситтән килгән фекерҙәр менән эш итә белгән, үҙенә кәрәге булмаған фекерҙәрҙе аң төбөнә үткәрмәгән кеше - оптимист. Әгәр ҙә барлыҡ мәғлүмәтте йөрәгең аша үткәрә башлаһаң, мәғлүмәт асылыңды йыуып сығара һәм үҙеңдән бер нәмә лә тороп ҡалмай.

**Хәҙерге замандың хәрби индустрияһы шундай ҡоралдар барлыҡҡа килтерҙе, улар ярҙамында цифр рәүешендә һаҡланған барлыҡ электрон тупланмаларҙы юҡҡа сығарып була. Шундай саҡта беҙ барлыҡ мәғлүмәтте, әҙәби китаптарҙы, эш ҡағыҙҙарын, архивтарҙы цифрға күсереп бөтһәк, бер көн килеп әҙәбиәтһеҙ, мәҙәниәтһеҙ, архивһыҙ, эш ҡағыҙҙарһыҙ тороп ҡалмаҫбыҙмы? Эш ҡағыҙҙарындағы мәғлүмәт юйыла ҡалһа, илде тәьмин итеүсе барлыҡ етештереү һәм хеҙмәтләндереү объекттары туҡталып ҡаласаҡ бит...**

-Дөрөҫөн әйткәндә, мин ундай хәүефте күрмәйем. Сөнки электрон мәғлүмәт донъяһында "артыҡлыҡ принцибы" бар, йәғни бер мәғлүмәт бер урында ғына һаҡланмай. Әйтәйек, "Гугл"да бер документ эшләһәң, ул ҡырҡ урында һаҡлана. Хәҙерге ваҡытта горизонталь йышлыҡҡа йәйелеп эшләү принцибы өҫтөнлөк ала бара. 1989 йылда Рәсәй Фәндәр академияһының китапханаһы янды. Унда 200 мең дана китап юҡҡа сыҡты. Унда төрки, ғәрәп телендә Башҡортостанда, Татарстанда табылған китаптар күп ине. Ул китаптарҙы бер нисек тә ҡайтарып, аяҡҡа баҫтырып булмай. Әгәр ҙә уларҙың электрон варианттары булһа, китапхана янған хәлдә лә, китаптар һаҡланыр ине.

**Интернет, компьютер мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, бәләкәй балалар өсөн уйынсыҡ та. Башҡорт балаһы компьютер артында ултырғанда, компьютерын тартып алып, ҡулына башҡортса китап тоттороу ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Был осраҡта ул балала үҙ телендәге китапҡа ҡарата кире ҡараш барлыҡҡа киләсәк. Шулай түгелме?**

- Мин киреһенсә уйлайым. Элек-электән башҡорттар донъяһында вертикаль йолаҡағиҙәләр булмаған. Халҡыбыҙҙың ырыу-ҡәбиләләрҙән, уларҙың эсендәге араларҙан, заттарҙан тороуы хәҙерге селтәр моделен хәтерләткән. Улар шул ваҡытта уҡ дөйөм ҡарар ҡабул итеүҙең хәҙерге Интернет системаһына оҡшаған системаһын уйлап тапҡан. Был система әлегә ҡарағанда яҡшыраҡ эшләгән. Беҙҙә хәҙер ундай демократия юҡ. Бөтөн мәсьәләләр Үҙәк тарафынан халыҡтың ихтыяжын һанға һуҡмайынса хәл ителә. Үҙәктә ҡарар ҡабул итәләр ҙә, шуны ғына тараталар. Беҙ, мәҫәлән, андроид өсөн башҡорт хәрефтәрен эшләнек. Ни өсөн, әйтәйек, башҡорттар социаль селтәр, смс аша башҡортса һөйләшә алманы? Сөнки уларҙың быңдай мөмкинселегә булманы. Әммә мөмкинселек булмауы теләк булмауҙы аңлатмай бит. Әле Интернет китапхана эшләү өҫтөндәбеҙ. Беҙ бында кешегә мөмкинлек биреү яғындабыҙ.

"Бәйләнештә" сайтының башҡорт телен барлыҡҡа килтереү мәсьәләһе килеп тыуғас, күптәр быны кәрәк түгел тип иҫәпләй ине, хәҙер сайт башҡорт телендә лә һөйләшә. Мин бер нисә йыл элек башҡортса һөйләшмәй инем. Әле һөйләшһәм дә, һүҙлегемде байытыу ихтыяжын тоям. Беҙҙең "Башҡорт китапханаһы" проекты минең кеүек башҡорттар өсөн дә эшләнә, уның ярҙамында һәр кеше үҙенең телмәрен байыта аласаҡ. Ябай аралашҡанда һин ниндәйҙер кимәлгә етәһең дә, артабан китеүе ҡыйынлаша. Китапхана тап шул саҡта кәрәк.

**Һин башҡортса фекерләйһеңме?**

- Башҡортса һөйләшкәндә яртылаш башҡортса, яртылаш урыҫса фекерләйем.

**Телгә өйрәнер өсөн иң кәрәкле шарт - тел мөхите. Һин нисек уйлайһың?**

- Дөрөҫ. Интернет тап шул мөхитте барлыҡҡа килтерергә булышлыҡ итә лә инде. Һин кешегә мәғлүмәт рәүешендә ябай ғына мөмкинлек бирәһең дә, улар үҙҙәренән үҙҙәре һинең менән аралаша башлай. Һөҙөмтәлә дөйөм һөйләшеү килеп сыға.

**Элек халҡыбыҙ ырыуҙар берәмектәренең халыҡ, милләт берләшмәһендә йәшәһә, хәҙерге Интернет берләшмәләре шуларға оҡшаған, тинек. Әйтәйек, минең "Бәйләнештәр"ҙә 5 мең дуҫым бар икән, ти. Шунан мин диуарыма бер хәбәр яҙһам, шул секундында уҡ был мәғлүмәт 5 мең кешегә барып етә. Улар ҙа, үҙ нәүбәтендә, репост эшләһә, шул минутта уҡ йөҙәр мең, миллионлаған кеше минең яҙған мәғлүмәткә эйә була. Был бит мәғлүмәт еткереүҙең баһалап бөткөһөҙ мөмкинлеге тигән һүҙ. Әйтәйек, айырым милләттәр тағы ла нисек итеп Интернетты файҙалана ала?**

- Был мөмкинлектәр беҙҙә әлегә аралашыу, танышыу кимәлендә ғәмәлгә аша. Файҙаға килгәндә, минеңсә, ул иң тәүҙә мәғариф өлкәһенә ҡағылырға тейешле. Әйтәйек, башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһе. Туған телебеҙҙе өйрәнеү процесын еңелләштереү фарыз. Тел өйрәнеү тик балалар баҡсаһына һәм мәктәпкә генә ҡағылмай, телде был кимәлдә өйрәнеү генә заманы үтте. Мәҫәлән, бөгөн инглиз телен берәү ҙә мәктәптә йүнләп өйрәнмәй. Хәҙер уны өйрәнеүҙең бихисап юлдары һәм ысулдары бар. Улар ябайҙан да ябай. Әле бына егерме йылдан ашыу башҡорт телен мәктәптә уҡытырғамы-юҡмы, тигән мәсьәлә буйынса фекер алышыуҙар, бәхәс-талаштар бара. Әгәр ҙә бер ун йыл элек кемдер берәү Интернет программалар төҙөп, башҡорт телен еңел алымдар менән өйрәнеү эшен башлаған булһа, бөгөн быңдай ҡаршылыҡтар булмаҫ ине. Ваҡыт - иң ҡиммәтле ресурс, беҙгә артабан ваҡытты юғалтырға ярамай. Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә башҡорт теленә, башҡорт мәҙәниәтенә антипатия бар. Ә бына Өфөнән ситкә китһәң, Ырымбурҙа, Силәбелә, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта башҡорт мәҙәниәтенә, теленә һоҡланып ҡарайҙар.

***✓ Беҙгә башҡорт йәмғиәтен үҫтерергә, бының өсөн үҙебеҙгә үҙгәрергә кәрәк. Демократия - ул һинең халҡың өсөн яуаплылыҡты иңеңә алырға әҙер булыуыңды аңлата.***

**▸ Минең "Бәйләнештә"рҙә меңдән ашыу дуҫтарым бар. Уларҙың яртыһынан күберәгән мин бөтөнләй күргәнем юҡ. Интернетта барыбер ҙә виртуаллек өҫтөнлөк итә. Был кешене ысынбарлыҡты тойоуҙан ситләштермәйме?**

- Интернет тормошҡа үтеп инеү менән кешеләр араһындағы мөнәсәбәт, терминология үҙгәрә. Элек беҙҙең дуҫтар, яҡын дуҫтар, таныш-белештәр ғүмереңә бер тапҡыр күргән кешеләр булһа, хәҙер икенсе төрлө. Хәҙер иһә Интернет аша мөнәсәбәттәр мозаикаһы барлыҡҡа килде. Әйтәйек, миңә бер егет дуҫлыҡ тәҡдим итә икән, ти. Ә бит баһалай белһәң, был башҡорт өсөн бына тигән инвестиция. Интернет нисек кенә насар булмаһын, ул бер ҡасан да осрашмаҫ һәм танышмаҫ башҡорттарҙы башҡорттар менән таныштыра, уртаҡ фекерле, уй-маҡсатлы итә. Әгәр ҙә ике башҡорт Интернет аша танышып, артабан аралашып, тәжрибә уртаҡлашып торһа, был дөйөм халыҡтың тормошонда сағылыш табасаҡ.

**өҫтөнә бысраҡ өйөргә, уны юҡҡа сығарырға була...**

- Был хәл элек-электән, һәр дәүерҙә лә шулай булған. Әммә бында Интернеттың мөмкинлектәре күберәк. Икенсе яҡтан ҡарағанда, һинең өҫтөңә бысраҡ өйәләр икән, һин ул көстәргә ҡаршы ошо уҡ Интернет аша көрәшә алаһың. Физик донъяла ундай мөмкинлегең юҡ. Әгәр ҙә унда баш күтәрһәң, тотоп алып туҡмап ташлауҙары бар. Ә Интернетта ҡаршы тороу мөмкинлеге бар.

**▸ Шулай ҙа һин бына үҙең Интернеттың насар яҡтарын нимәлә күрәһең?**

- Эйе, әлеге Интернеттың насар яҡтары күп. Иң насар яғы - күләгәләге Интернет. Унда порнография, криминал күп. Уларҙан балаларҙы аралауы ҡыйынығраҡ, хатта мөмкин дә түгел. Әммә был хәл Интернет менән эш итергә ярамай тигәнде аңлатмай. Әгәр ҙә беҙ, бысраҡ, тип, Интернет менән эш итмәһәк, ул үҙенән-үҙе яҡшы яҡҡа үҙгәрмәйәсәк. Унда беҙ изге төшөнсәләр, кешегә кәрәкле, фәһемле мәғлүмәт индерә алабыҙ, йәғни Интернетты үҙебеҙгә нисек кәрәк, шул рәүешкә килтерә алабыҙ. Шулай итеп, ул яйлап-яйлап таҙара башлай.

**▸ Интернетта тотош халыҡтың өҫтөнә бысраҡ өйөүҙәргә нисек яуап бирергә? Был осраҡта яуап бирмәү риза булыуҙы аңлатҡан һымаҡ. Ә инде халҡың хаҡында негатив таратыусыға яуап бирә башлаһаң, унаң бысраҡлығы кимәленә төшөргә тура киләсәк. Был осраҡта һин нимә тәҡдим итәһең?**

- Интернетта башҡорттар хаҡында негатив мәғлүмәт яҙылһа, ҡайһы берәүҙәр, йәндәре көйөп, үҙ-ара һөйләшеп, кемдерҙелер әрләп йөрөй башлай. Миненсә, быға иғтибар итергә түгел, ә үҙеңдең яҡшы ғәмәлдәреңде дауам итеү кәрәк. "Башҡорт проекттары" буйынса эшемде башлағанда "Форум"да башҡа милләт вәкилдәре негатив мәғлүмәт яҙҙы. Таныштарым: "Бына һинең турала Интернетта шулай тип яҙғандар, былай тип әйткәндәр", - тип әйтә килде. Мин иһә быға иғтибар итмәйенсә, үҙ эшемде генә белдем. Бер нисә проектым тормошҡа ашҡас, хәҙер инде минең хаҡта насар итеп яҙыусылар күнгән һымаҡ булды. Башҡорт Интернеты - хәҙер норма, Башҡортостан Республикаһы булған кеүек.

**▸ Тимәк, һине тәнҡитләүселәр һиңә "Башҡорттарҙың үҙ Интернеты бар" тигәнде иҫбат итергә ярҙам ғына иткән булып сыға түгелме? Иң яҡшы реклама - тәнҡит!**

- Интернетта беҙҙең проекттар күберәк булһа, ундай һөйләшеүҙәр бөтөнләй булмаҫ ине.

**▸ Интернетта "Башҡорт китапханаһы"н булдырыу эше нисек бара? Китаптарҙы һайлап ҡуяһығыҙмы?**

- Әлегә шундай схема: кем ниндәй әҫәрен, китабын индерә ала, шуны ҡуябыҙ. "Башҡортостан" нәшриәтенең ябылған китапханаһынан 700 китап һатып алдыҡ. Ул китаптарҙы ирекмәндәр араһында тараттыҡ, улар был китаптарҙы сканлай. Башҡорт әҙәбиәтен яҡшы белгән ике белгесебеҙ төрлө китапханалар, букинистар аша башҡорт китаптарын туплауҙы дауам итә.

нологик өлкәләрҙе, нисектер, яҡын күрә. Нефть бер кемгә лә кәрәк түгел хәҙер, шуны аңлаһаҡ, башҡа йүнәлештә эш итһәк, алға китә алырбыҙ. Ҡыҫҡаһы, башҡорттар был быуатта үҙенең яңы урынын табырға тейеш. Әгәр ҙә Өфө һәм республиканың башҡа ҡалалары технологик үҙәктәр булып китһә, ул, ысынлап та, дөрөҫ йүнәлеш буласаҡ. Беҙгә башҡорт йәмғиәтен үҫтерергә, бының өсөн үҙебеҙгә үҙгәрергә кәрәк. Демократия - ул һинең халҡың өсөн яуаплылыҡты иңеңә алырға әҙер булыуыңды аңлата.

Әсәйем тыуған Ейәнсура районының Өмбәт ауылында бик матур бер йола бар. Унда кешеләр бесәнде өмә ысулы менән эшләй. Иң тәүҙә тотош ауыл бер кешенең бесәнен эшләй, иртәгәһенә икенсеһенекенә тотона. Улар бар эштәрҙе бергәләп башҡара. Әлеге Интернет донъяһы шундай уҡ "өмә" менән эшләү принцибына ҡоролған да инде.

**▸ Тимәк, Интернет моделе әсәйеңдең тыуған ауылында үтәлә инде?**

# МӘКТӘПТӘ ГЕНӘ ТҮГЕЛ...

## туған телде

Мин Мәскәүҙән тороп, күп кенә Өфөләге мәсьәләләремде Интернетта танышҡан дуҫтарым аша хәл итәм. Улар шундуҡ минең йомошто үтәй. Уларға кәрәк булғанда, мин ярҙамға киләм. Был ябай ғына аралашыу түгел, ә иҡтисади аралашыу. Ғөмүмән, ябай ғына аралашыуҙы файҙаға көйләү - ул иҡтисад. Тимәк, ни тиклем дуҫтарың күп булһа, иҡтисади хәлең шул тиклем уңышлыраҡ.

**▸ Әйтәйек, Интернет булғанға тиклем миңә бер мәғлүмәт кәрәк булһа, мин китапханаға барып, бирелгән тема буйынса китаптарға, тәүсығанаҡтарға заказ биреп, үҙемә кәрәкле мәғлүмәтте табыр өсөн тау-тау китап аҡтарырға тейеш инем. Бының өсөн минең ҡайһы саҡта аҙнаға яҡын ваҡытым үтә ине. Хәҙер иһә "Яндекс"ҡа инәм дә, заказ бирәм һәм компьютер бер минут эсендә миңә кәрәкле мәғлүмәтте табып бирә. Интернет ваҡытты, тимәк, ғүмерҙе экономияларға ярҙам итә.**

- Ваҡытты экономиялауҙан тыш, юғарыраҡ сифатҡа ла өлгәшәбеҙ. Элек беҙ мәғлүмәттәрҙе һайлай алмай инек. Ҡулыбыҙға нимә килеп эләгә, шуға таяндыҡ. Хәҙер иһә төрлө сығанаҡтарҙан килгән мәғлүмәттәрҙе бер-береһе менән сағыштырып, иң кәрәклеһен һайлай алабыҙ. Ошоноң менән бергә һинең донъяңдың сифаты ла үҙгәрә.

**▸ Интернеттың тағы ла бер ҡурҡыныс яғы - уның ярҙамында ғәйепһеҙҙе ғәйепләп, уның**

***ИЛДАР КИНЙӘБУЛАТОВ:***

*Әгәр ҙә беҙ, бысраҡ, тип, Интернет менән эш итмәһәк, ул үҙенән-үҙе яҡшы яҡҡа үҙгәрмәйәсәк. Унда беҙ изге төшөнсәләр, кешегә кәрәкле, фәһемле мәғлүмәт индерә алабыҙ, йәғни Интернетты үҙебеҙгә нисек кәрәк, шул рәүешкә килтерә алабыҙ. Шулай итеп, ул яйлап-яйлап таҙара башлай.*




**▸ Мәскәүҙә һинең башҡорт телендә аралашҡан үҙ мөхитең бармы?**

- Мин көнө буйына Интернет аша дуҫтарым менән башҡортса аралашам. Үҙем эшләгән компанияла төрлө милләт вәкилдәренән коллегаларым, дуҫтарым бар. Улар миңә ҡарап, үҙҙәренең милләтенә, тамырҙарына иғтибар итә башланы.

**▸ Әле һеҙ башлаған "Башҡорт проекттары"ның төп маҡсаты нимәгә ҡайтып ҡала?**

- Интернет ярҙамында башҡорт теле, мәҙәниәте мөхите булдырыу, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итеү, милләттәштәребеҙҙең фекер ҡеүәһен, аңын яңы кимәлгә күтәреү.

**▸ XXI быуат башҡортон нисек итеп күҙ алдына килтерәһең?**

- Халҡыбыҙ пассионар, эште ныҡ бирелеп, ҡыҙыу башҡара. Әгәр ҙә дөрөҫ йүнәлеш алһаҡ, киләсәктә ныҒына аласаҡбыҙ. Тағы ла бер нисә мөһим нәмәгә иғтибар биреү мөһим. Әлеге технологик ҡаҙаныштарға, йәғни ер аҫтындағы нефткә генә ҡарап ултырырға ярамай. Әгәр ҙә республикабыҙҙағы башҡа халыҡтар прогресҡа барырға теләмәй икән, тимәк, шуны үҙебеҙ эшләргә бурыслыбыҙ. Улар беҙгә ҡарап өлгө алһын. Хәҙерге башҡорт йәштәре тех-

- Эйе. Тимәк, башҡорттар теләһә ниндәй эште тиҙ генә, аҙ сығым менән башҡара ала. Шул уҡ бесән эшләгән өсөн бер тин аҡса түләү ҙә, хөкүмәт тә кәрәкмәй. Күп кенә илдәрҙең хөкүмәте үҙен бәләкәсәйтергә тырыша. Ни өсөн? Сөнки ул ҙур булһа, илгә үҫергә ҡамасаулай. Мәҫәлән, Сингапур иленең хөкүмәт институттары бәләкәй генә бер бинаға һыя. Һөҙөмтәлә Өфө ҙурлығындай ил тулайым продукт буйынса Рәсәйҙән ҡалышмай. Хөкүмәттең ҙурлығы етәкселектең кешеләргә ышанмауынан килә. Улай алға китеп булмай.

**▸ Интернет бер үк ваҡытта барлыҡ рухи мираҫыбыҙҙы үҙендә туплап, уларҙы киләсәккә алып барып еткерер архив ролен дә үтәй ала бит...**

- Әгәр ҙә беҙ барлыҡ рухи мираҫыбыҙҙы, тарихыбыҙҙы Интернетҡа күсерһәк, был тупланма үҙ нәүбәтендә башҡа институттарыбыҙҙың үҫеүенә булышлыҡ итәсәк. Бер мәғлүмәт тә ҡағыҙҙа ҡалырға тейеш түгел. Ул сағында беҙҙең алда нимәнелер һаҡларға тигән мәсьәлә тормаясаҡ, ул үҙенән-үҙе һаҡланасаҡ. Ул сағында беҙ артҡа ҡарап йәшәү урынына алға ҡарап йәшәй башлаясаҡбыҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"...Шул осраҡта ғына беҙҙең данлы һәм шанлы тарихыбыҙ киләсәккә барырға ярҙам итәсәк. Юғиһә, беҙ тарихта ҡаҙынып, үҙебеҙҙең алтын ваҡытыбыҙҙы әрәм итәбеҙ..." тип, Илдарҙың һүҙен тамамларға ғына ҡала бында. Афарин, Илдар!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Ул саҡтағы ағайымдың аптыраған, меҫкен йөҙө күҙ алдыма баҫты: беҙҙе күргәс, ҡулы менән күҙҙәрен ҡаплап, иҙәнгә сүгеүе, унан йәшен тиҙлегендә урамға атлығыуы... Әле шуларҙың барыһын да яңынан кисереп, ағайымдан ғәфү үтенәм.**






Бала сағымдағылай, бәпкә үләне менән ҡапланған ишек алдынан үттем. Әсәйемдең галоштарын күргәс, оҙаҡ эҙләгән йән дауаһын тапҡандай ҡыуандым. Ниндәй рәхәтлек, ниндәй кинәнес. Шул саҡ миңә ҡаршы сыҡҡан әсәйемдең тауышы ишетелде: "Өн менән төш буталып бөттө, балаҡайым... Ниндәй елдәр ташланы? Ҡайҙа килен, балалар? Көтә, көтә, ни уйларға ла белмәй башланым... Хәҙер инде бер аяғым бында, икенсеһе тегендә, тигәндәй", - тип һөйләнә-һөйләнә, ҡулдарымдан һөйҙө. Уны эйелеп ҡосаҡлап, оҙаҡ торҙом. Шул хәтлем кесерәйгән - шау һөйәк... Ирекһеҙҙән, күңелем йомшарҙы, күҙгә йәштәр эркелде. Күпме борсолоуҙар, хәсрәт-ҡайғылар алып килдем мин һиңә, әсәкәйем. Эй-й, ул ғынамы һуң?..

- Ағайым ҡайҙа?

- Өйҙә.

Тупһаны ашатлап ингәс тә ағайымды еңелсә ҡосаҡлап алдым. Ул миңә һораулы ҡараш ташланы, әммә бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Ни уйлағанын тойҙом шулай ҙа. Күпме йылдар үтһә лә, бер- беребеҙҙе һаман да элеккесә, йән-тән берлеге аша һүҙһеҙ ҙә аңлайбыҙ икән. Күстәнәстәремде өҫтәлгә өйөп һалғас: "Аҡыл ғүмер буйына мыҫҡаллап инә икән ул кешегә", - тигән булдым, тәү сирҡаныс алғандай. Артабан ни әйтергә белмәй:

- Ағайымдың йорт-ҡураһы шәп... Донъяны яңыртҡан,- тигән булдым. Ул һынамсыл ҡарашын йәнә төбәне иҙәнгә. Әллә минең урынға ул уңайһыҙлана - билдәһеҙ... Һүҙҙәр ялғанмағанын һиҙеп, әсәйем: "Миндә сыҡмаған йән генә ҡалған, үлеп-нитеп китһәм, теге донъяла тыныс ята алмам, ахрыһы. Уйыңдан уймаҡ сығарҙығыҙ ҙа... Ике туған ыҙғыша - атҡа менһә яраша, ти торғайны боронғолар. Саҡ менән Суҡ булыр өсөн үҫтермәнем мин һеҙҙе..."

Күренеп тора: йыуанысты эштән тапҡан ағайым. Ғүмер буйы йыйылған ҙур донъя... Ә күңелендә боҙ һалҡыны, ай-һай, хәҙер уны иретеп булыр микән? Беләм, мин ғәйепле: үкенес, үкенес... Ағайым да минең уйҙы уҡыған һымаҡ, бер миңә, бер әсәйгә күҙ һирпеп, ҡарашын тәҙрә аша бушлыҡҡа төбәне. Әсәйем:

- Берегеҙҙе икенсегеҙ алыштырып йөрөй алмаҫ хәҙер. Оҡшашлығығыҙ юҡҡа сыҡҡан инде: берегеҙ миңә, икенсегеҙ атайыңа тартҡан, - тип ҡуйған булды.

Мин ҡапыл бер тында әйтеп һалдым:

- Мин тормошомдағы иң ҙур хатамды танып, тубыҡланып ғәфү һорарға ҡайттым, ағай! - Насарлыҡ уйлай белмәгән ағайым "Хәҙер инде уның кәрәге юҡ" тигән һымаҡ, күңелһеҙ йылмайҙы ғына. Йәнем-тәнем менән тойҙом уның яуабын. Унан күҙҙәремә тура ҡараны:

- Ҡайҙа йөрөнөң һаңһыҙ ғүмерҙәр буйына?

- Әллә нисек килеп сыҡты... Шулай...

- Бурҙар урлашҡан ерен онотмай, әйләнеп килеүсән...

- Улай уҡ ярамаҫ ...

- Яңы өйрәнгән икәнһең айырырға ярамайҙы...

Был һүҙ ҡәһәре ҡылыстай киҫте мине. Аңы-аҡылы тарҡаулана башлаған кешеләй, ни тип яуап бирергә белмәй, аптыранып, әсәйемә ҡараным.

- Йә! Ҡайҙа йөрөнөң? - тине ул да түҙемһеҙләнеп.

- Ах, был ниндәй осрашыу булды әле? Һағынып ҡайтҡайным да мин һеҙҙе...

Ағайым тағы йылмайҙы:

- Мөхәббәте мул кешенең балалары ла ишлелер...

- Бары-юғы бер ул үҫтерҙем. Әсәһенең бер ҡулы майҙа, бер ҡулы балда булһа ла, түҙмәне рәхәт тормошҡа. Бер ҙур бизнесмендың шоферы менән сыуалып, ҡайҙалыр юғалды. Былай... Мин дә...

- Аб-ба... ана бит... ана... Фатихаһыҙ булғас, - тип, бер миңә, бер ағайыма ҡараны әсәйем. Өйҙә йәнә уңайһыҙ һиллек урынлашты.

Ағайым инде йылмаймай:

- Минең малай әсәһе менәнме?

- Нисек, малайың?

- Әйтмәнеме ни?

- Аңламайым...

- Ул балаға уҙған ине...

Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, быға тиклем тойолмаған ысынбарлыҡтың тулҡыны таш ярырлыҡ булһа ла, артыҡ сарғаҡланып һүҙ ҡуйыртманыҡ, шымдыҡ... Кем нимә уйлағандыр...

Ә мин бөртөк кенә улымды уйлап, йөрәгемде ҡуҙғыттым, ҡабындырҙым, зиһенем буталды... Бөтөнләй телһеҙ ҡалдым... Ҡолағым шауланы, күҙем бәйләнде. Әле ишеткән ауыр һүҙҙәр ҡойононда аҙашып, айный алмай, күпме өнһөҙ ултырғанмындыр, әйтеүе ҡыйын. Артабан, аяҙлы-болотло уйҙар дауылынан ҡотолоп, һәр ваҡыттағыса үҙемдән үҙем һораным: был тормош нишләп былай булып сыҡты һуң әле? Яуап эҙләгәндәй, артта ҡалған йылдар һуҡмағына осто күңелем...

Июнь урталарында беҙҙең урамға ҡыҙыл күлдәкле, хатта туфлие лә ҡып-ҡыҙыл, һап-һары сәсле, йәшел күҙле Розалина исемле ҡыҙ килгәйне. Барыбыҙҙың да күҙе ҡунаҡ ҡыҙҙа. Кемдең ҡармағына эләгер? Уйламаҫтан, һары баш артынан иң шәп йүгергәне ағайым (ул минең игеҙәгем ул, саҡ ҡына алдараҡ тыуған) булды ла ҡуйҙы, ә миңә барыбер һымаҡ. Уның бер ҡыҙға ла күҙ һалмауына өйрәнеп тә бөткәйнек ул саҡта. Ә был юлы урамдың иң шәп егетенә әйләнде лә ҡуйҙы. Ә мин телгә оҫта, сосораҡ булһам да, уның янында йөрөгән бер бахыр, шәүлә...

Бер көн тоттом да шаяртырға булдым: "Һинең урынға киноға барайым әле, ирмәк булһын... Беҙҙе ул барыбер айырмай, оҙатайым теге сибәркәйҙе. Бер кем дә һиҙмәҫ..." Ғәҙеллеһеҙлектән изгелек, йәмһеҙлектән матурлыҡ эҙләй торған ғәҙәте бар ағайымдың: өндәшмәне, йәтешле итеп, шым ғына йылмайҙы. Миңә етә ҡалды: шул көндән башлап, ирмәктән ҡыҙыҡ эҙләп, аны-быны уйламайынса, һары баштың артынан бер тотам да ҡалмайынса йүгерә башланым...

Шулай йөрөй торғас, мауыҡтым мин. Кинонан һуң Розалинаны оҙатып ҡуйғас, өй эргәһендәге эскәмйәлә оҙаҡ ултырам, китә алмайым, ҡаҙаҡлап ҡуялармы ни. Ул йоҡлаған өй нигеҙе эргәһендә ултырыу күңелемә рәхәтлек бирә. Урам һилгә ҡалып, аяҡ тауышы тынғас, йәнем тынысланып ҡайтып китәм. Янына ағайым килеп ҡуймағайы, йәнәһе.

Һәр нәмәнең башы булған һымаҡ, яҡын йөрөй аҙағы ла. Шулай, һөйөүем "температураһы" өтөп йығыр мәлгә еткәс, утҡа баҫҡан бесәй кеүек, борғаланып-һырпаланып ҡайтып индем дә: "Мин кәләш алам", - тинем өйҙәгеләргә. Әсәйем: "Аб-ба, үәт эштәр ... икегеҙ бер юлымы?"- ти. Быға тиклем тып-тыныс йөрөгән ағайым:

- Башта - мин! - тимәһенме.

Шул мәл әсәйем дә ҡырт киҫте: "Ағайың алдан".

Мине уттарға һалып, ағайым йортҡа кәләшен алып ҡайтты - Розалинаны...

Күпмелер ваҡыттан һуң былар минең туйҙы ашыҡтыра башланы. Төнө буйы керпек ҡаҡмай сыҡтым. Әсәй ҙә өҙмәй ҙә ҡуймай: "Һөйгән йәр - һөйәгең елеге бит ул. Көттөрҙөк ... Ағайың эшкә китмәҫ элек..."

Һәр ваҡыттағыса, ағайым оҙон аҡса артынан китте Себер яҡтарына. Дин юлында йөрөгән әсәйемде көн дә тип әйтерлек саҡыралар аят аштарына. Ә мин эштән һуң, бер кемгә лә әйләнеп тә, боролоп та ҡарамайынса, туп- тура өйгә йүгерәм. Сөнки бер генә минутҡа ла еңгәм уйымдан сыҡмай, уның йондоҙ булып балҡыған күҙҙәрен күргем килеп тик тора. Элек икмәк киҫеп, сәй яһап эсмәгән мин бөтөн өй эштәрендә еңгәмдең ярҙамсыһымын. Юҡ, юҡ, уның наҙлы ҡарашын да, миңә ҡарата яңылыш ҡына йылмайыуын да өмөт итмәйем, хатта өнәмәйем дә, кәрәкмәй ҙә... Беләм үҙ урынымды. Секунд һайын, ул ағайҙыҡы, ярамай, тигән фекер мейемде сүкей. Һоҡланып та бер һүҙ ысҡындырмайым, яңылыш та ҡағылмайым, хатта тура ҡарамаҫҡа ла тырышам. Үҙе аңғармағанда ғына йоҡо бүлмәһенең ҡыҫыҡ ишеге аша уны күҙәтәм. Аһ! Ниндәй илерткес тамаша. Ҙур көҙгө алдына барып баҫыуы, сәсен тағатыуы, сисенеүе, утты һүндереүен стена аша тоям, хатта уның менән бергә йоҡлап китәм кеүек... Әйтергә түгел, төрлө хистәр ҡайнаша: уның матурлығынан көнләшәм - сәмемә тейә. Күңелемә ят, уҫал, хәсрәтле бер уй оялай башлағанын да һиҙәм, әммә ләкин уға ҡаршы көрәшә алмайым-көсһөҙмен. Еңгәмдең быға тиклем бер кем дә белмәгән тылсымы йәки берәй сихыры бар микән әллә, тип уйлайым. Янам, көйәм... Шулай көн артынан көн уҙҙы. Ағайҙы көтәбеҙ. Тик өсөбөҙҙә өс төрлө хәсрәт. Еңгәм ағайҙы көтһә, минең уйым еңгәмдә. Ә әсәйем әйләнгән һайын бер үк хәбәрҙе тылҡый: "И-и-и, ғәзиз апаҡайым түшәк тартып ята, ҡарар кешеһе юҡ, мин тәрбиәләргә тейеш бит..."

...Ағайым ҡайта. Еңгәм бәхет күгенең етенсе ҡатында. Ашын, бәлешен бешергән, затлы кейемдәрен кейгән, аяғы ергә теймәй, ишек менән тәҙрә араһында ике күҙе. Күп тә үтмәй, телефоны зыңлай. Теге остан: "Тағы бер айға ҡалдырҙылар, төҙөгән комплексты тапшырып өлгөрмәнек". Был яҡтан еңгәм: "Һағындым, артыҡ түҙеп, былай йәшәү мөмкин түгел, һине көтөп көтөк булдым", - тип шым ғына илап ебәрҙе. Бәхет менән тулған йорттоң һауаһын ағыуланылармы ни. Бәхеткәме, бәхетһеҙлеккәме - ул мең ҡат ғазапҡа батып, илап ултырһа ла, мин уны ләззәтләнеп күҙәтеүҙән һис тә тартынманым.

Ә еңгәм түҙемлеген юғалтып, өмөтөнән төңөлгән кешеләй, шарт- шорт баҫып, инде лә бикләнде үҙ бүлмәһенә. Насар башланған кистең төнө лә тынысһыҙ булды: әсәйемдең бер туған һеңлеһе, инәйебеҙ, мәрхүм булып ҡалды. Уны һуңғы юлға оҙатыр өсөн, илап-һыҡтап, ауылға юллanғайны ул кисте әсәйем. Ете төн уртаһында ҡапыл көслө ел сыҡты. Бөтә нәмәне дер һелкетте, хатта күрше йорттоң ҡыйығын алып бырағытты. Ҡайҙалыр нәмәләр ауҙы, бикле торған тәҙрәләр шартылдап асылды. Был ни хәл? Еңгәмдең бүлмәһен йәшен һуҡтымы ни! Бара килеп бүлмәһен асып ебәрһәм, ни күрәм - еңгәмдең иҙәндән түшәмгә тиклем һуҙылған ҙур көҙгөһө селпәрәмә һибелгән, үҙенең ҡото алынған. Йәлләнем. Үҙем дә һиҙмәҫтән, ҡосаҡлап алдым. Шул мәл әллә шайтан ҡотортто, һә тигәнсе, гөрт итеп тоҡандым - әйләндем Иблискә. Эйе, эйе, тап шул минутта тотанаҡһыҙ дәртемдең ялҡыны ялманы икебеҙҙе лә. Ул минең ҡосаҡта башы-тояғы менән әүәләнергә әҙер баллы-татлы шәрбәт ине. Мин унан айырыла алмай ғазапландым. Ах, ул татлы минуттарҙың аҙағы әсе, бик әсе булды. Таң һарыһы менән ағай ҡайтҡанда беҙ һаман да бергә инек әле...

Ул саҡтағы ағайымдың аптыраған, меҫкен йөҙө күҙ алдыма баҫты: беҙҙе күргәс, ике ҡулы менән күҙҙәрен ҡаплап, иҙәнгә сүгеүе, унан йәшен тиҙлегендә урамға атлығыуы... Әле шуларҙың барыһын да яңынан кисереп, ағайымдан ғәфү үтенәм:

- Мин - иҫәр... Ни ҡылғанмын... Ғүмерем буйы күңелем тынғылыҡ тапманы. Һинең ҡарашың эҙәрлекләп тик торҙо. Ағай, хәлеңдән килһә кисер мине...

Ике битем ут булып яна, маңлайымдан атылған бөрсөк-бөрсөк тирҙәр яңаҡтарымды йыуа. Шул саҡ ағайым мине ҡосаҡлап алды:

- Булыры булған, ҡустым, уҙыры уҙған... Ярай, әсәйҙе рәнйетмәйек. Ул һине бик оҙаҡ көттө.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, сәй табыны әҙерләп маташҡан әсәйемдең кәүҙәһе турайып китте:

- Донъя бит ул... Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ... Йә, әйҙәгеҙ, сәйгә...

✓ ***Оператор егет йыуыныу бүлмәһен үҙе асып, ҡорамалдарын күтәреп, эскә үтәм тип бер аяғын күтәрҙе лә, ҡатты ла ҡалды. Аяғын төшөрөргә лә онотто ул - ҡарап тик тора. Йәл, төшөрөп алырға фотоаппаратыбыҙ ғына булманы.***



ИЖАДХАНА

# ҺҮРӘТ ЭСЕНДӘ ЙӘШӘЙБЕҘ...

**Баймаҡ районы Темәс ауылында йәшәүсе рәссам Марат ҒАФАРОВ айырым өлөштәре ҡабарып торған, ә айырым өлөштәре эскә батҡан һымаҡ күренгән һүрәттәр эшләй. Был ғәжәйеп һүрәттәрҙе компьютер телендә, 3D һүрәттәр тип атайҙар. "3D" һүҙе инглизсәнән ингән - "ниндәй ҙә булһа әйберҙең өс үлсәмле булыуы" тип аңлатыла. Ябайлаштырып әйткәндә, 3D һүрәт - алғы, урта һәм артҡы пландары айырым-асыҡ күренгән картина ул. 3D һүрәттәрен нисек ҡағыҙға төшөрөүе тураһында ҡунағыбыҙ үҙе һөйләр.**



## Бала саҡтан һүрәт төшөрәм...

Үҙемде иҫләгәндән - бала саҡтан һүрәт төшөрәм. Атайым да, әсәйем дә Темәс урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләне. Атайым - йыр, рәсем дәрестәренән һабаҡ бирҙе, уны уҡыусылар "йыр ағай", "рәсем ағай", тип йөрөттө. Әсәйем - башланғыс кластар уҡытыусыһы булды. Атай менән әсәй икеһе лә йыр-моңға маһир ине. Бала сағымдан шул иҫемдә ҡалған - әсәйем ҡап-ҡап дәфтәр тикшергән саҡта мине алдына ултыртып, ҡағыҙ, ҡәләм биреп ҡуя. Мин һүрәттәр төшөрәм. Һүрәт төшөрөү менән ҡыҙыҡһыныуым да шул ваҡытта башланғандыр, моғайын. Әммә тормош был мауыҡыуыма мине тиҙ бәйләп ҡуйҙы. Атай менән әсәйем айырылышҡанда миңә туғыҙ йәш булғандыр. Айырылышыуҙы әсәйем бик ауыр кисерҙе, беҙҙән йәшереп кенә илай торғайны. Бер нисә йыл үткәс, йөрәк сиренән ҡапыл ғына вафат булып ҡалды. Ғаиләлә беҙ өс бала етем тороп ҡалдыҡ, һуҡыр ҡартәсәйемә рәхмәт - ул ситтән тороп булһа ла беҙгә кәңәштәрен биреп, хәленән килгәнсә ярҙам итеп торҙо. Миңә ун алты йәш тулғас, Темәс леспромхозына рәссам ярҙамсыһы итеп эшкә алдылар һәм бер йылдан һуң ул ваҡыттағы директор Кантюков мине саҡыртып алды һәм: "Марат, һин бит беҙҙең рәссамға ҡарағанда ла яҡшы төшөрәһең һүрәтте", - тине лә, мине леспромхоз рәссамы итеп тәғәйенләп тә ҡуйҙы. Шулай ун һигеҙ йәшем тулып, әрмегә киткәнсе, ошо леспромхозда эшләнем, бәләкәс һеңлем менән ҡустымды ҡараным.

## Барыһы ла хыялдан башланды

3D һүрәте эшләп ҡарау хыялы миндә бик күптән ялҡынлағайны. Ҡасан икәнлеген хәҙер аныҡ ҡына әйтеүе лә ауыр. Һүрәтте ҡабарып торған һымаҡ итеп эшләге килә, малай, шунлыҡтан, төрлөсә эшләп тә ҡарайым, майҙарҙың, буяуҙарҙың да төрлө-төрлөһөн ҡулланам - ижади эҙләнеүҙәрем ләззәт тә бирә, эстән яндыра ла. "Килтереп сығармайынса, туҡталмам", тип, артабан эшләйем... Мольбертыма һыҙып-һыҙып, ситкәрәк китеп ҡарап алам, төшөрөргә теләгән күренешкә лә бөтөнләй икенсе ерҙән ҡараш ташлап алам, хатта күҙҙе ҡыҫа биреберәк бағам... 3D-ға оҡшаш нимәләр килеп сыға башлағас, ҡыҙыҡһыныуым тағы артты. Тырышлығымдың һөҙөмтә бирә башлауын күреүҙән дә көслөрәк илһам сығанағы юҡтыр ул. Ә нимә ул 3D? Уны беҙ киноларҙа ла күрәбеҙ. Әммә унда һүрәттәр ҡыбырлап йөрөй, улар йәнле. 3D һүрәттә иһә ҡатып ҡалған күренеш сағылдырыла. Беҙ бөгөн ҡараған форматтағы һүрәттәрҙе төшөрөү өсөн ысынбарлыҡтағы күренештәрҙе перспективала күрә белергә кәрәк. Ә быны күптәр күрә белмәй. Миңә Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, хатта сит илдәрҙән рәссамдар 3D-ны күрергә өйрәтеүемде һорай, хатта, аҡса тәкдим итеүселәр ҙә булды. Әммә был алымды тота килеп кешегә нисек өйрәтәһең? Кешене музыканы, ритмды, төҫтәрҙе, еҫтәрҙе, матурлыҡты тойорға, шиғыр яҙырға, матурлыҡты ҡағыҙға төшөрөргә өйрәтеү мөмкинме? Кешене, геометрия теле менән әйткәндә, X менән У күсәренә Z күсәрен ҡушып һүрәт эшләүгә лә өйрәтеп булмай. Бәлки, өйрәтер ҙә инем мин, ләкин һөнәрем буйынса мин авиация механигы. Әйткәндәй, "Комсомольская правда" гәзитенән бер журналист килеп, минән интервью алып китте лә, мине "гүмере буйы водитель булып эшләгән дә, бер көн тотҡан да 3D һүрәт төшөрә башлаған", тип яҙҙы. Әлбиттә, был мәғлүмәт дөрөҫлөккә тап килмәй. Өс ысылыҡтағы һүрәттәргә тотоноу алдынан йөҙәрләгән башҡа картиналар, эскиздар эшләнелде. Унан бигерәк, водитель таныҡлығым бар, тип кенә әйтеүемде хәбәрсе дөрөҫ аңламаған булып сыҡты. Шулай итеп, матбуғатта минең ҡапыл ғына 3D төшөрөүсе булып китеүем тураһында хәбәр таралды.

## Тәүге эштәрем...

Беренсе 3D һүрәтте заказ буйынса күрше Бетерә ауылында йәшәүсе бер ғаиләнең йортоноң иҙәненә эшләнем. Эш барышында Бөрйәндән Азат исемле бер егет килеп, фотоға төшөрөп киткәйне. Төшөргән дә, интернетҡа һалған. Фото тиҙ арала таралып та өлгөргән. Бер мәл ауылдаштар: "Марат, 3D һүрәт эшләгәс, эрәләнеп киттеңме әллә?" - тип төрттөрә. Һүрәтемдең интернетты "шартлатыуы" тураһында иң һуңынан мин белгәнмендер. Бәктиһән, бер төн эсендә билдәле кешегә әйләнгәнмен. Баяғы фотоны бер төн эсендә 25 мең кеше ҡарап өлгөргән! Социаль селтәрҙәге битемә инһәм, хаттарҙы уҡып бөтөрлөк түгел. Рәсәйҙән, Германиянан, Бразилиянан яҙалар. Был һүрәт шаңдауы бер миңә генә ҡағылмаған икән - Бетерәләге баяғы ғаиләгә - һүрәтле йорт хужаларына ла туранан-тура ҡағылған да ҡуйған. Шүлгән мәмерйәһенә тип Бөрйәнгә юлланыусы кешеләр юл ыңғайында тегеге картинаны эҙләп килә, уны ҡарап сығырға һорай ҙа, һорай икән. Хужалар тәүҙә риза булалар, тик аҙаҡ: "Һинә генә эшләттек?" - тиғән көнгә ҡалған.

**Камера тотҡан хәбәрселәрҙән дә тынғы юҡ. Бер мәл Мәскәүҙән Беренсе каналдан килеп төштөләр. Әлеге лә баяғы, Бетерәләге һүрәтте күргеләре, кино-таҫмаға төшөрөп алғылары килә. Бетерәгә шылтыраттым. Ләкин хужабикә риза булманы. "Беҙҙең шәхси тормошобоҙ булырға тейештер бит, Марат ағай. Атыу инәләр ҙә сығалар, инәләр ҙә сығалар - өйөбөҙ музей һымаҡ", - тине. Уларҙы аңларға була, әлбиттә. Бер мәл шул тиклем ялҡыуҙан: "Һүрәтле иҙәнде буяйбыҙ ҙа ҡуйбыҙ", - тип уфтаналар...**

Бетерәләге һүрәтте ҡарай алмағастар, ҡунаҡтарҙы Баймаҡ ҡалаһындағы бер фатирҙың йыуыныу бүлмәһе иҙәненә эшләгән тағы бер 3D һүрәтемде күрһәтергә алып киттем. Әйткәндәй, Баймаҡта минең тағы бер һүрәтем бар - бер ҡапҡаға эшләнгән аттар һүрәте. Ул Гиннестың рекордтар китабына ла индерелде... Алдан иҫкәртергә онотҡанғамы, оператор егет йыуыныу бүлмәһен үҙе асып, ҡорамалдарын күтәреп, эскә үтәм тип бер аяғын күтәрҙе лә, ҡатты ла ҡалды. Аяғын төшөрөргә лә онотто ул - ҡарап тик тора. Йәл, төшөрөп алырға фотоаппаратыбыҙ ғына булманы. Шундай ҡыҙыҡ кадр булыр ине. Егет иҙәндә сайпылып ятҡан төпһөҙ зәңгәр һыуҙы, һыуҙан ырғып сығырға торған дельфинды күреп аптыраны. Аҙаҡ: "Һин быны нисек эшләнең", - тип һорай ҙа һорай... "Был һүрәт ишектән килеп инеүсегә күләмле булып күренһен өсөн махсус көйләп эшләнгән. Икенсе яҡтан ҡараһаң, һөҙөмтә улай уҡ булмаҫ ине", - тип аңлаттым.

## Электән килгән ысулдыр...

Моғайын, 3D-ны төшөрөү юлдарын эҙмә-эҙлекле тасуирлаған китаптар ҙа юҡ түгелдер. Әммә мин уны үҙемдең тойғоларыма таянып эшләйем. Ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе лә иҫтән сығармайым, әлбиттә. Әйтәйек, 3D һүрәтте бер нөктәнән ҡарағанда ғына иң дөрөҫ күренерлек итеп эшләргә кәрәк. Саҡ ҡына ситтән ҡараһаң, һүрәт бөтөнләй беҙ теләгәнсә күренмәйәсәк. Ошоно иҫтән сығарырға ярамай. Икенсенән, һыҙыҡтарҙың төҙ һәм дөрөҫ һыҙылыуына иғтибар итеү талап ителә. Бер һыҙыҡтың дөрөҫ һыҙылманыуы - бөтөн эшең юҡҡа сыҡты, тигән һүҙ. Төҫтәргә, яртылаш төҫтәргә лә шундай уҡ иғтибар биреү зарур. Өс үлсәмле һүрәт һөҙөмтәһен арттыра биреү өсөн тағы ла тауыш ҡулланырға була. Был ысулды беҙ фильмдарҙа яҡшы күрәбеҙ. Тауыш менән көсәйтелгән күләмле һүрәт тамашасыны үҙенә нығыраҡ йәлеп итә.

## Һүрәттәрҙәге ваҡиғалар эсендә ҡатнашыу...

Бәләкәй саҡта өләсәйҙәр беҙгә йоҡлар алдынан шәм яҡтыһында әкиәт һөйләй торғайны. Һәм беҙ улар һөйләгән әкиәт эсенә инеп китә ала инек. Бында беҙ һүрәттең эсенә инеп китә алабыҙ...

Тимәк, кеше үҙен сәнғәт әйберенең эсендә, һүрәттәр араһында йөрөп ятҡан һымаҡ итеп тоя. Беҙҙең бит сәнғәт - хореография, орнаменттар бик көслө. Беҙҙең сәнғәт төрөн ҡарағанда, ысынлап та, кеше үҙен ошо нәмәнең бер өлөшө итеп тоя. Тимәк, ошо сәнғәтте тулыландырған халыҡтың бер вәкиле итеп тоя. Ҡурайҙы тыңлаһаҡ, "Байыҡ" бейеүен ҡараһаҡ, бейеүсе һыңҡылдата баҫып бейеһә, рух күтәрелә һәм беҙ тарихҡа инеп китәбеҙ. Беҙ - ҡатнашыусы.

Мәскәүҙәге Изге Василий сиркәүендә булғанымда көмбәҙгә ҡарап ебәрһәм, болоттар араһынан Ғайса бәйғәмбәр - Иисус ҡарап тора. Тәндәр әллә нимә эшләп китте. Ошо һүрәтте эшләгән саҡта ул замандағы рәссамдар 3D тип атамағандыр инде, әммә өс ясылыҡты бер ясылыҡта сағылдырыуға ирешкәндәр. 3D юҡтан бар булмағандыр. Бөгөн кешелек уға ябырылды икән, тимәк, 3D кешелек хәтерендә ҡасандыр булған. Шуға ла икенсе формаға әйләндереп килтереп сығарылған. Беҙҙең милли орнаменттар шул тиклем бай, 3D серен, бәлки, шунан эҙләп ҡарарға кәрәктер. Икенсе яҡтан, 3D-ла бит тарих, бөгөнгө көн, киләсәк берлеге сағыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғәжәп оҫта йән дә инде ул - Кеше! Ул энә осона ғына һыйырлыҡ радио-электрон элементтар ҙа эшләй, диңгеҙҙәр өҫтөнә ясы-ясы күперҙәр ҙә төҙөй, ҡәҙимге һүҙҙәрҙән һүҙ пирамидалары - шиғырҙар ҙа яҙып ҡуя, ысындан бер ҙә айырып булмаҫлыҡ һүрәттәр ҙә төшөрә. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Марат ағай Ғафаров беҙгә 3D һүрәт фәлсәфәһе шаршауын аса биреп ҡуйҙы.**

Байым РӘХИМЙӘНОВ
яҙып алды.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠЫҪҠА ЭШ КӨНӨ... файҙалы

■ Американың ғаилә һәм хеҙмәт институтында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡыҫҡа эш көнө хеҙмәткәрҙәр өсөн дә, ойошма өсөн дә файҙалы. Аныҡлап әйткәндә, медицина күҙлегенән сығып ҡарағанда, офиста оҙаҡ ултырыу йөрәккә насар тәьҫир итә. Аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүсе кешеләә аҙнаһына 40 сәғәт эшләүселәргә ҡарағанда инсульт хәүефе 33 процентка юғарыраҡ. Бынан тыш, тик эш менән генә шөғөлләнеүселәр насар йоҡлай, шуға ла тиҙерәк арый. Иң мөһиме, ти ғалимдар, кем оҙағыраҡ ял итә, улар һөҙөмтәлерәк эшләй.

■ Йоҡоһоҙлоҡ - организм һәм психика өсөн етди һынау. Йоҡоноң сифатына күп факторҙар, мәҫәлән, стрестан башлап генетик ауырыуҙарға тиклем тәьҫир итә, әммә нисек туклаyыуға ла иғтибар итергә кәрәк, ти ғалимдар. Йоҡоһоҙлоҡ менән интегеүселәрҙең рационына банан индерергә кәрәк. Уның составында калий менән магний бар. Триптофан тигән аминокислота серотонин синтезында ҡатнаша. Серотонин иһә "йоҡо гормоны" мелатонинға әйләнә. Шуға ла йоҡларға ятыр алдынан банан ашағыҙ. Шулай уҡ аҡһымға бай йомортҡа, эремсек, тауыҡ ите йоҡлап китергә ярҙам итер. Бер стакан йылы һөт тә тик файҙаға буласаҡ.

■ Индиана штаты университеты ғалимдары кешенең сәсендә һәм тырнаҡтарында сәләмәтлек өсөн зыянлы матдәләр тапҡан. Улар кешелә эндокрин һәм нейрон тайпылыштарына, һимеҙлеккә килтерә, кешенең репродуктив функцияһына ағыулы тәьҫир яһай ала. Ғалимдар билдәләүенсә, пластик, ағас материалдар, туҡымаға өҫтәлгән антипирендар биосферала һәм тере организм туҡымаларында туплана ала. Был матдәләр кешенең сәсендә һәм тырнаҡтарында күберәк булып сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта, ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙа антипирендар күләме ҙурыраҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, был тырнаҡ өсөн лак ҡулланыуҙан булыуы ихтимал, сөнки антипирендар лактың составында ла бар.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, артыҡ таҙалыҡҡа ынтылыу иммунитет түбәнәйеүенең һәм аллергия барлыҡҡа килеүенең бер сәбәбе булып тора. Был фекер 1989 йылда уҡ Лондондың Изге Георгий госпитале эпидемиологы Стрэхан тарафынан әйтелә. Профессор таҙа һыу ҙа булмаған төбәктәрҙә йәшәгән балаларҙың ауырыуҙарға бирешмәүен, ә йәшәү шарттары яҡшы булғандарҙың аллергиянан яфаланыуын күрә. Күп балалы ғаиләләрҙә лә балалар ауырып бармай. 2014 йылда үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бәләкәй сағынан уҡ тәбиғәткә сығып, тупраҡ-таш менән уйнаған бала аллергия һәм астма менән һирәгерәк ауырый. Хатта аш бүлмәләрендә тараҡан, сысҡандар, фатирҙарында йорт хайуандары булған балаларҙың сәләмәтлеге стериль торлаҡта көн итеүселәргә ҡарағанда ныҡыраҡ булып сыҡҡан.

■ Италияның Пиза университеты ғалимдары ҡыҙыҡлы һынауҙар үткәргән. Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда йышыраҡ иҫнәй, ти улар. 100 кеше эштә, төшкө аш мәлендә, дуҫтар менән аралашҡандағы ҡылыҡтарын күҙәткән. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар башҡаларҙың иҫнәүен күреп, уларға эйәрә икән. Бының сәбәбе шунда - ғүзәл зат башҡаларҙы яҡшыраҡ аңлай, уларға йәлләү, ваҡиғаларға ярәклаша белеү сифаттары хас. Был осраҡта ла ҡатын-ҡыҙҙың ҡылығы ошо холҡона бәйле.

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ



# ЗАМАНА БЕҘГӘ БӘЙЛЕМЕ,

## әллә беҙ - заманағамы?

**"Заман - бик мөһим нәмә. Уны бушҡа үткәрергә ярамай. Әҙәм балалары, был ниндәй заман, тип Мине ҡыйырһыта. Һеҙҙең берегеҙ ҙә, заман боҙолдо, тимәһен, сөнки Заман - Мин Үҙем. Көнөн дә, төнөн дә Үҙем әйләндерәм, теләйем икән - туктата ла алам" - оло ҡөҙрәт эйәһе Аллаһы Тәғәләнең был һүҙҙәренә өҫтәп әйтер һүҙ юҡ. Уның әйткәндәрен иҫкәртеү, ер йөҙөндәгеләргә һабаҡ тип ҡабул ҡылыу - беҙҙең бурыс.**

Үкенескә ҡаршы, һуңғы быуат ҡәүеме заманаһы үҙ нәфсеһенә буйһондороу, бар һынауҙарҙы заман ауырлығына һылтау менән мәшғүл булып, үҙенәүҙе золом итеүҙән ары китә алмай. Ҡайҙа ҡарама, фажиғә: йә һыу баҫа, йә булмаһа ҡоролоҡ көйҙөрә, авиа-автоһәләкәттәр, шартлауҙар, янғындар, ер тетрәүҙәре, һис юғында, ерҙең теге йә был мөйөшөндә һуғыш суҡмарҙары баш ҡалҡыта. Кешеләр берәрләп түгел, ҡала-ауылдары менән ер йөҙөнән юҡ була. Шартлап, батып, янып, ер аҫтында ҡалып, тапалып, спайс-наркотик ҡулланып, ҡолап, үҙ-үҙенә ҡул һалып... Бындай бәлә-ҡазаның кем ишеген килеп ҡағыуын донъяла бер Ул ғына белә. Аллаһы Тәғәләнең ҡануундары ҡәтғи: ҡылған гонаһтар өсөн шулай иҫкәртә, һынай, язаһын бирә. Беҙҙә, кешеләрҙә, уның ҡөҙрәтенә ҡаршы торорлоҡ көс юҡ. Ауыр болоттарҙы таратырға өйрәнгәнбеҙ, ә болот йыйып, ямғыр менән ҡыуандырырға хәлебеҙҙән килмәй, ҡоролоҡтан интегәбеҙ. "Кешеләрҙең ҡылған фәхеш, харам эштәре сәбәпле ер өҫтө үә диңгеҙҙәр өҫтө боҙолдо, Аллаһынан яза йөҙөнән ҡаты аслыҡ, йоғошло ҡаты сирҙәр заһир булды, ҡылған боҙоҡ эштәренең бәғзе гонаһтарына донъяла уҡ ғазапты татытмаҡлығыбыҙ өсөн, шәйәт боҙоҡлоҡтан яҡшылыҡҡа ҡайтырҙар, иман килтереп һәм тәүбә итеп төҙәлеп мосолман булырҙар" ("Әр-Рум" сүрәһе, 41-се аят). Изге Китапта бирелгән был аятҡа өҫтәп әйтерлек һүҙем юҡ, бары тик үҙемдең гонаһтарым өсөн генә түгел, ә Ер шарында ҡылынған гонаһтар өсөн әрнеү генә күңелде ҡырыуҙан туҡтамай.

"Кешеләрҙе Беҙ һынайбыҙ, - ти Ҡөрьән. - Хәүеф-хәтәрҙәр, ҡурҡыныстар килтереп, аслыҡ биреп, малдарын, яҡындарын, баҡса емештәрен кәметеп һынайбыҙ. Сабыр була белгән бәндәләргә ҡыуаныс бир. Улар отолоуҙа булмаҫ" ("Әл-Баҡара" сүрәһе, 155-се аят). Тимәк, бөтә бәлә лә шунда - сабырлыҡ етешмәй, булғанына шөкөрана ҡылып, нәфсендә ауыҙлыҡлай белеү хас түгел беҙҙең заман кешеһенә. АллаһыТәғәлә ебәргән бәләкәс кенә һынауҙы ла оло ҡайғы урынына күреп ҡабул итергә күнеккәнбеҙ. Һуңғы йылдарҙа Ҡөрьән Кәримде уҡып, уның йөкмәткеһен тәрәндән өйрәнеүҙе маҡсат итеп алғас, күпте аңланым. Ошо изге Китап ҡушҡандарҙы үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәһәк, илебеҙҙә полиция-милиция, контроль-прокуратураның кәрәге лә ҡалмаҫ ине, тип уйланырға ла нигеҙ булды был. Бигерәк тә беҙҙең заманда, юғары технологияларҙың үҫешкән заманында, глобалләшеү заманында Кешелеккә ебәрелгән Төп Конституцияны өйрәнмәй, уны белмәй тороп, ер йөҙөндә халыҡ менән идара итергә бер кемдең дә хаҡы юҡ, минеңсә.

**Ошо урында ике тапҡыр һуғыш кисергән чечен халҡын миҫалға килтермәй сарам юҡ. Телевизион тапшырыуҙарҙың береһендә республика башлығы Рамзан Ҡадиров чечен ерендә фәхишәлек, наркотик ҡулланыу кеүек проблемаларҙың бөтөнләй булмауы һәр чечен ғаиләһендә балаларға дини тәрбиә биреләүе тураһында ғорурланып һөйләгәйне. Күпселеге мосолман халҡы йәшәгән республикабыҙҙа бындай күрһәткестәр менән ҡыуанырға әлегә хәлебеҙҙән килмәй.**

Беҙҙең быуын кешеләренә ҡарағанда йәштәр күпкә отҡорораҡ, етеҙерәк, белемлерәк булһа ла, хафаға һалырлыҡ эштәр ҙә байтаҡ. Сүп-сар бактарында табылған сабыйҙар, эскелек, яңыраҡ булып үткән спайс ваҡиғалары иҫкә төшкән һайын, был аяныс күренештәрҙе халҡыбыҙҙың иң ҡиммәтле хазинаһы - дини тәрбиәгә битарафлыҡ касафаты тип ҡабул итәм. Ғөмүмән, Рәсәйҙә мәктәптәргә дини дәрестәр индереү яй барыу ғына түгел, хатта туктатылыу кимәлендә тора кеүек, юғиһә, был фән нисә йыл буйына 4-се кластарҙа ғына уҡытылмаҫ ине, моғайын. Изге Китаптың "Әл-Хижер" сүрәһе, 94-се аятында-

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# АЙЫУ ТАМҒАЛАРЫ



**Беҙҙең Көньяҡ Урал ҡурсаулығының икһеҙ-сикһеҙ һәм үтеп сыҡҡыһыҙ ҡара урмандарын төйәк иткән йәнлек-кейектәр үҙ донъяһы, үҙ ғәҙәттәре, үҙ законы менән йәшәй. Бында улар үҙҙәрен иркен тоя һәм ҡурсалауға мохтаж икәнен дә аңлай. Һәр кейектең йәшәү һәм һунар итеү өсөн билдәле территорияһы бар.**

Беҙҙең ҡурсаулыҡта йәшәгән урман батшаһы - һоро айыуҙың көнкүрешен күҙәтеүҙәр 1981 йылдан алып барыла. Был енел булмаған эшмәкәрлеккә ҡурсаулыҡтың фәнни-тикшеренеү бүлеге хеҙмәткәрҙәре күп көс һала. Улар бар тикшеренеү һөҙөмтәләрен иҫәп журналдарына теркәп ҡуя, абрис-схемаларҙа күрһәтә.

Һоро айыу Көньяҡ Уралдың таулы-урманлы зоналарында йыш осрап тора. Әммә һаҡланыу йәһәтенән ул күберәген ҡуйы ылыҫлы, мәҫәлән, шыршы урмандарына һыйына, ә ҡатнаш урмандарҙа тайыш табандар бик һирәк күренә. Был кеше факторҙарына һәм ағас ҡырҡыуҙарға ҡайтып ҡала. Туҡланыу рәүеше лә айыуҙарҙың бер урындан икенсе урынға күсеүенә килтерә. Әйтәйек, был урында емеш-еләк, төрлө һутлы һәм файҙалы үләндәр аҙ булһа, был инде уларға оло сәйәхәткә сығыу тураһында иҫкәртә. Аҙыҡ эҙләү аралығы 50-60 саҡрымға тиклем дауам итә. Юлдарында осраған ҡабан, ҡоралайҙарҙан тыш, айыуҙар йорт хайуандарына ла һөжүм итеүе мөмкин. Сөнки аслыҡ һәр саҡ үҙенең "ҡара эшен" ҡылдыра.

Кемдер айыуҙы "үҫал йыртҡыс" тип күҙ алдына килтерһә лә, ул тыныс һәм үҙенсәлекле хайуан. Башҡа кейектәр шикелле, ул үҙенең территорияһын даими контролдә тота. Күҙәтеүҙәр буйынса, айыуҙар йыш ҡына үҙ биләмәләрендә 20-30 см диаметрындағы ағастарҙы тамғалап сыға. Беҙҙең ҡурсаулыҡта тамға ағастары ролен ҡарағай, ҡара һәм ҡыҙыл шыршы үтәй. Шулай ҙа Бәләкәй Ямантау, Нәре, Машаҡ һырттарында һирәк булһа ла муйыл һәм миләш ағастарында тайыш табандың билдәһен күрергә була.

Айыуҙың яңы тамғаланған ағасы эргәһендә шундай күренешкә тап булаһың: ағас төбөндәге үлән уралтып тапала, урыны менән ер ҡаҙыла, ағас олоно тырнаҡ эҙҙәре менән һыҙғылана, ә ҡабығы айырылған ағастың сайырында урман хужаһының йөндәре йәбешеп ҡала. Ҡайһы бер дәүләт инспекторҙары һөйләүе буйынса, йыртҡыс ағасҡа тамға һалыр алдынан бала-саға кеүек ҡылана. Шай-шой килеп ергә ауынай, бер нисә тапҡыр йөҙтүбән әйләнеп ала. Мығыр-мығыр килеп, йәшел сиҙемдә аҙ ғына аяҡ-ҡулдарын уйнатып ята биргәс, һикереп тора һалып, һайланған ағасын ҡосаҡлап өйрәлә башлай. Һуңынан берсә түше, берсә һырты менән ышҡыла, ауыҙын аса биреп, башын йә алға, йә артҡа һалып уйната. Ситтән ҡарап торһаң, үҙенсәлекле күнекмәләр эшләй һымаҡ. Аҙаҡтан ағасты бер нисә тапҡыр тешләп алғас, йәлап ҡына тырнаҡтарын батырып, һыҙғыларға тотона. Эшен ағасҡа һейҙеген һирпеү менән тамамлай. Ҡасыу (брачный период) осоронда иһә ата айыуҙар үҙ биләмәләрен ныҡыраҡ тамғалай.

Ғөмүмән, ағас ҡырҡыу менән шөғөлләнгән урман хужалыҡтарына "айыу ағастарын" ҡырҡмаҫҡа тәҡдим итер инек. Сөнки был, бер яҡтан, тәбиғәткә лә зыян, икенсенән, айыу тамға һуҡҡан ағасын тапмаһа, тамғаларын ҡыҫҡа сауҡалыҡтарға һуғырға мөмкин. Улары инде оҙон үлән араһында күренмәйәсәк. Был киләсәктә алып барылған күҙәтеүҙәргә ныҡ ҡамасаулаясаҡ.

**Марат БӘХТИЙӘРОВ,**
**Көньяҡ Урал ҡурсаулығы методисы.**

*✓ Иман зәғифлегенең төп сифаттарының береһе сабырһыҙлыҡ, холоҡ тотороҡһоҙлоғо, йәғни, тиҙ генә төшөнкөлөккә, өмөтһөҙлөккә, депрессияға бирелеү йә булмаһа, киреһенсә, агрессивлыҡ, тәкәбберлек.*

ғы "Инде Ислам динен изһар ҡыл! Кешеләрҙе иманға үә Ҡөрьән менән ғәмәл ҡылырға асыҡтан-асыҡ өндә! Һис кемдән ҡурҡма! Үә мөшриҡтәрҙән киҫел, улар менән булышып, ваҡытыңды әрәм итмә!" тигән һүҙҙәр замандың мөһимлеге һәм уны бушҡа үткәрергә ярамағанлығына ишара.

Ҡөрьән ҡушҡандарҙы үтәп йәшәргә тырышҡан, дин тотҡан кешегә ҡайһы берәүҙәр һаман булһа ла иҫкелек ҡалдығына ҡараған кеүек ҡарай. "Миңә нимәгә мәсеткә йөрөргә? Минең гонаһтарым юҡ, ана, гонаһлылар йөрөһөн, исмаһам, гонаһтарын кәметерҙәр!" тип тәкәббер генә һүҙ ҡуша бер әңгәмәсем. Ярым шәрә торған был оло йәштәге ҡатынға тәү тапҡыр күргәндәй ҡараш ташлап, телһеҙ ҡалам. Гонаһтың нимә икәнен бөтөнләй аңламаған кеше менән нимә генә һөйләшәһең, һүҙебеҙ берекмәҫлеген аңлап, юлымды дауам итеүҙе хуп күрәм. Күп тә үтмәй, алдыма һуҡмыш ҡатын килеп сыға ла, улының был донъянан үҙ теләге менән китеүен һөйләп, эсеүенең "сәбәбен" аңлата башлай. Халыҡтың иманһыҙланыуын заманалар үҙгәреүенә юрап, арыу уҡ эйәреп килгән юлдашым менән дә әңгәмә ыңғайламай. Юлдашым айыҡ булһа, Изге Китаптың "Әр-Рум" сүрәһенең 30-сы аятында әйтелгәнсә, "Эй Мөхәммәт! Ихласлыҡ менән ҡарашыңды дингә йүнәлт. Кешеләрҙе Аллаһ ошо дин өсөн яраҡлы итеп яралтты. Кешенең ысын кеше булыуы Ислам дине менән. Аллаһ яралтып бар иткәндәрҙә үҙгәртеүҙәр булмаҫ. Был - хаҡ дин, иң көслө, иң дөрөҫ дин. Әммә күп кешеләр быны аңлап етмәй. Кешелек сифаттарығыҙ юғалһа, уны Исламдан табып алығыҙ. Эй кешеләр! Исламдан һуҡыр булып, кешелекһеҙ булып тәрбиәләнмәгеҙ!" - тип, иманға өндәргә булыр ине лә...

Миңә ҡалһа, эскелек, наркоманлыҡ, фәхишәлек, суицидты бер-береһенән айырып ҡарау, һәр береһенең сәбәптәрен айырым эҙләп, уларҙан ҡотолоу сараларын табырға маташыуҙан бер фәтүә лә сыҡмаясаҡ, сөнки былар барыһы ла иман зәғифлегенән килгән ауырыуҙар. Иман зәғифлегенең төп сифаттарының береһе сабырһыҙлыҡ, холоҡ тотороҡһоҙлоғо, йәғни, тиҙ генә төшөнкөлөккә, өмөтһөҙлөккә, депрессияға бирелеү йә булмаһа, киреһенсә, агрессивлыҡ, тәкәбберлек. Минеңсә, юғарыла иҫкә алынғандар барыһы ла йән ауырыуынан. Тән ауырығанда табиптарға мөрәжәғәт итһәк тә, йән ауырыуынан һауыҡтырыусы табип әлегә Ер йөҙөндә юҡ. Йән дауаһы бирәү генә - заманаға һыҙтанмай, үҙ динеңде ихтирам итеү, өйрәнеү.

**Ниндәй генә заманда йәшәһәң дә эмоциялар менән түгел, ә айыҡ аҡыл, зирәк зиһен менән йәшәү өсөн үҙ-үҙеңә хеҙмәт итеү. Был донъяла иң ауыр хеҙмәт - ул үҙеңдең нәфсеңә ҡаршы көрәшеү. Һәр төрлө бысраҡлыҡҡа әүрәтеп кенә торған нәфсеңде еңә белеү өсөн, һис шикһеҙ, иманлы булыу фарыз. Халыҡ телендә әйткәндә, иманлы булыу - ояла белеү, ҡылған гонаһтарың өсөн яуап тотоуҙан ҡурҡа белеү.**

Иншалла, һуңғы йылдарҙа республикабыҙ ауылдарында иман йорттары күпләп асыла. Мәсет - ул Иман йорто. Мәсеткә йөрөргә бер кем дә бер кемде лә мәжбүр итмәй. Иманлы, тәүфиҡлы, бәхетле булырға теләгән кешенең генә көсө етә унда йөрөргә. Тик ҡайһы бер ауылдарҙа мәсеттәрҙең буш тороуы - төҙөлгән мәктәптәрҙең буш тороуына бәрәбәр. Белемгә, ғилемгә эйәртеүсе, уға ынтылыусы булмағанда, тормошобоҙҙоң ыңғайлана барасағын шик аҫтына ҡуйырға ғына ҡала. Ошо урында түбәндәге риүәйәтте миҫал итеп килтергем килә. Аллаһы Тәғәлә бер ауылдағы иманһыҙҙарҙы Ер йөҙөнән юҡ итергә ҡушҡан, ти. Фәрештәләр Уға иманһыҙҙар араһында намаҙ уҡып ултырыусы бер генә иманлы кешенең булыуы һәм уның да һәләк булыу ихтималлығы тураһында хәбәр итә. "Ана шул кешенән башлағыҙ юҡ итеүҙе!" тип бойора Аллаһы Тәғәлә... Тимәк, мәсеттәр һалына икән, ул халыҡтың ғилемен күтәреүҙә үҙ вазифаһын теүәл башҡарырға бурыслы. Киреһенсә булғанда, имандары зәғифләнгән быуынға ҡарап, үҙебеҙгә уфтанырға ғына ҡалыр. Аллаға шөкөр, хәҙер ололар ғына түгел, йәштәр ҙә бик ихлас йөрөй иман йорттарына. Ә инде ауылдарҙа иман нуры таратыусы йорттар буш тора икән, тимәк, йәшәйешебеҙ ҙә нурһыҙ булып, үҙебеҙ рухи ярлылыҡтан ҡотола алмай, тормошобоҙ тик әхлаҡһыҙлыҡтан ғына торған хайуани тормошҡа әйләнәсәк. Халыҡҡа эш булдырып, йәшәйеште яҡшыртып, киләсәккә өмөт уятҡан хәлдә лә Аллаһы Тәғәлә ҡуйған бәләкәй генә һынауҙан да һынған, иманһыҙлыҡҡа ауышырға әҙер торған халыҡты ҡотҡарыусы - ул ғаиләлә традицион ислам тәрбиәһе биреү.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: дин тотоуҙы күптәр мөйөштә генә ултырып, көндәр буйы ҡуҙғалмай Ҡөрьән, намаҙ уҡып, көлмәй, шаярмай йәшәргә ҡушылған, тип күҙ алдына килтерә. Динебеҙ тураһында, бигерәк тә ғаиләлә дини тәрбиә биреү тураһында ябай ҙа, фәһемле лә яҙылған китаптар кәрәк беҙгә. Бала аяғында ныҡ баҫып торһон, үҫкәс, һәр төрлө ағымға кереп китеп юғалмаһын, замана афәтенән йыраҡ торһон өсөн, минеңсә, дини тәрбиә көслө булырға тейеш. Был йәһәттән бөтә йәмғиәт, һис юғында, үҙебеҙ, мосолмандар, бер сәпкә тейҙерерлек фекер йөрөтөп эш итергә бурыслыбыҙ, сөнки замана ниндәй генә һынауҙар ебәрмәһен, иманы ҡеүәтле кеше фетнәгә бирешмәй, үҙ аҡылында була, үҙ аҡылы менән эш итә, йәшәй. Буй-һынбыҙ Хоҙай Тәғәлә тарафынан бирелгән булһа ла, аҡыл кимәлен үҫтереү, камиллашыу үҙебеҙгә йөкмәтелгән. Киләсәктә лә гәзитебеҙ халҡыбыҙҙы иман юлында тәрбиәләү мәсьәләһенә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе күтәрә торһон, ә беҙ, уның даими уҡыусылары, динебеҙгә, гәзитебеҙгә, милләт яҙмышына битараф булыуҙан һаҡ була ғына күрәйек, иманлы булайыҡ. Замана нәфсеһен ауыҙлыҡлай беләйек. Амин.

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Сибай ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер: ғәҙәт йоғонтоһо

Ғәҙәттәрегеҙ һеҙҙе нисек барһығыҙ, шундай яһай. Уларҙың емергес йоғонтоһонан ҡотолмай тороп, тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртеү мөмкин түгел. Әгәр бәхетле, сәләмәт, тыныс, үҙлекле, уңышлы түгелһегеҙ икән, кире ғәҙәттәрегеҙҙән арыныу маҡсаты тәү сиратта торорға тейеш.

Күптәребеҙ хатта тормошобоҙҙоң насар ғәҙәттәргә ныҡлап бәйләнгәнлеген белмәй ҙә. Беҙ аңыбыҙҙа ялған яуаптар программалағанбыҙ. Был кисерештәребеҙ йәки ғәмәлдәребеҙ ниндәй генә ялған, емергес, боҙолған йәки кире булмаһын, үҙебеҙҙе нисек өйрәткәнбеҙ, шундай ғәмәл ҡылырға мәжбүр итә. Әлбиттә, кире емергес ғәҙәттәрҙе үҙгәртеү өсөн "ҡайтанан программаланырға" тейешбеҙ.

Үҙегеҙ һәйбәт тип һанаған нәмәнән баш тарта алмайһығыҙ. Әгәр элекке ғәҙәттәрегеҙҙән үҙегеҙ баш тартырға теләмәйһегеҙ икән, бер ниндәй ихтыяр көсө лә ярҙам итмәйәсәк. Күпселек осраҡта беҙ ауыр эҙемтәләрҙән арынырға тырышабыҙ, әммә ғәҙәттәрҙән баш тартырға әҙер түгелбеҙ. Бик йыш кешеләр диетаға ултыра, әммә күпмелер ваҡыттан һуң, үҙҙәрен нимәнәндер мәхрүм тойоп, ташлайҙар. Улар ябығырға, матур күренергә һәм яҡшы физик формала булырға тырыша, ләкин күп ашауҙан тыйылырға ғына теләмәй. Ахырҙа, уйҙары тик ризыҡ тирәһендә өйөрөлә. Ни тиклем аҙыҡ тураһында йышыраҡ уйлайҙар, был уларҙың аңында шул тиклем ҙур урын ала һәм ашау теләге ихтыяр көсөн еңеп ҡуя.

Һеҙгә үҙегеҙҙе, үҙ тормошобоҙҙо бары тик үҙтәртип менән генә, кәрәкле үҙгәреш яһарға мәжбүр итеүгә ышанып, үҙгәртә алабыҙ тип алдарға кәрәкмәй. Әгәр кеше ысынлап та ауырлығын кәметергә теләһә, уға көсөргәнештән һәм ҡәнәғәтләндерелмәгән ихтыяжды компенсациялаған артыҡ ашауҙан арыныу өсөн үҙ-үҙен инандырырға кәрәк буласаҡ. Уның ҡасан да булһа туҡтауы икеле, сөнки ул, ашарға тейешмен, тип уйлай. Ә был ғәйеп, күңел ҡайтыу, ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһон тыуҙыра һәм үҙгәрештәргә ҡаршылаша.

Ғәҙәтегеҙҙе үҙгәртергә тырышырҙан алда, тәү сиратта, уның барлығын танырға һәм ҡабул итергә кәрәк. Етешһеҙлектәрегеҙҙе ҡабул итә белмәүегеҙ уларҙан ҡотола алмауығыҙ сәбәбе булып тора. Насар ғәҙәттәрегеҙҙе һәм үҙ-үҙегеҙҙе һүҙ менән генә инҡар итеү уларҙың власын нығыта, ә ғәйеп тойғоһо, киреһенсә, йоғонтоһон көсәйтә. Альфред Адлер был хаҡта: "Йә хаталанығыҙ, йә ғәйеп тойғоһо кисерегеҙ. Әммә бер ваҡытта ла икеһен бер юлы эшләмәгеҙ. Бик ауыр шөғөл", - тигән. Яҡшы кәңәш!

Яңы ыңғай ғәҙәттәрҙе элекке кире ғәҙәттәрҙе лайыҡлы ыңғай фекерҙәр һәм ғәмәлдәр менән алмаштырыу аша булдырығыҙ. Әгәр бала саҡта ата-әсәгеҙ һеҙҙән нимәлер алғанда, алмашҡа икенсе нәмә бирә торған булғандыр. Был юғалтыу хаҡында оноторға ярҙам итә. Беҙ еңел һәм бер ҡыйынлыҡһыҙ баш тарта алған нәмәләр бар. Сөнки улар тормошобоҙға емергес йоғонто яһай. Беҙҙең өсөн нимәлер мөһимерәк икән, ошо йүнәлештә шул тиклем теләп һәм әүҙемерәк аҙымдар яһайбыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## ЙӨРӘК

2. Бөтә кешелә лә йөрәк юҡ. Барлыҡ тере йәндәр араһында тик кешеләрҙә генә рухи йөрәк була. Тик кешеләрҙең дә бик аҙҙары ғына рухи йөрәк кимәленә күтәрелә ала. Уларҙы "Йөрәкле кешеләр" тип атайҙар.

3. Тере йөрәк һәм үле йөрәк. Йөрәк - рухи ғәскәр менән нәфсе ғәскәре араһындағы көрәш яланы. Был яуҙа нәфсе еңһә - йөрәк һәләк була, рух еңһә - терелә. Кешеләр араһында тере һәм үле йөрәк уртаһында тороусылар ҙа осрай.

4. Йөрәкте нәфсе менән бутама. Күп кешеләр нәфсеһе менән йөрәген бутай. Кемдер "Мин бөтә йөрәгем менән һиңә теләйем...", тип әйтә икән, был телмәрҙәге "теләйем" һүҙе нәфсене аңлата. Шул уҡ ваҡытта кемдер "Ул минең йөрәгемә яҡын...", ти икән, бында ла "яҡын" һүҙен нәфсе өндәшә. Суфыйҙың йөрәге һәр төрлө "теләктәрҙән" азат. "Йөрәгең нимә теләй?" тигән һорауға суфый "Йөрәгем бер нәмәне лә теләмәүҙе теләй", тип яуап биргән.

5. Үҙаң, аңһыҙлыҡ һәм йөрәк аңы. Матди донъяға, нәфсегә һәм йөрәккә мөнәсәбәте буйынса кешелекте өс төркөмгә бүлергә була:

Беренсе төркөм - ашау, йоҡо һәм секс хаҡында ғына ҡайғыртҡан, матди донъя психологик кимәлендәге аңһыҙ кешеләр. Улар - примитив йәки ҡырағай кешеләр.

Икенсе төркөм - үҙаңлы, нәфсенең психологик кимәлендәге беренсе төркөмдәге кеүек үк кешеләр. Әммә уларға тәүгеләренән айырмалы рәүештә, дан-шөһрәт һөйөүсәнлек, үҙ-үҙенде яратыу, социаль статусты эҙләү сифаттары хас. Был төргә ҡараусыларҙы цивилизациялы кешеләр тип тә атайҙар.

Өсөнсө төркөм - йөрәк аҡылы, йөрәк аңы булған, йөрәк психологик кимәлендәге кешеләр. Улар үҙ йөрәктәрен табыусылар, улар әйберҙәрҙе һәм донъяны нисек бар, шулай күрә һәм ҡабул итә.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, хәҙер кешелек икенсе төркөмгә ҡараған кешеләрҙең сифатына, йәғни үҙаңға эйә. Өсөнсө осорға күсер өсөн кешелеккә тағы ла бер нисә быуат кәрәк буласаҡ әле. Шул саҡта ғына Ерҙә ожмах төҙөү мөмкин буласаҡ.

6. Үле йөрәк. Хәсән Басриҙан ни өсөн уның әйткән һүҙҙәре уҡыусыларын уятмауы, уларға тәьҫир итмәүе хаҡында һорағандар. "Әгәр ҙә улар былай ғына йоҡлаған булһалар, мин уларҙы һелкетеп кенә уятыр инем. Уларҙың бит йөрәктәре йоҡлай. Йоҡолағы йөрәкте күпме генә һелкетмә, ул барыбер уянмаясаҡ!" тип яуаплаған суфый. "Донъяуи байлыҡҡа ҡарата мөхәббәте уянған йөрәк һәләк була", тигән Хәсән Басри. "Аллаһы Тәғәлә (хатта дини йола үтәгән осраҡта ла) йәшәмәгән һәр йөрәк - үле йөрәк", тигән Харакани.

**(Дауамы бар).**



## 21 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00, 02.05, 03.05 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Биографический сериал. 9-я и 10-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
03.00 Новости.
03.15 "После школы". Сериал (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 10-я и 11-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.00 "Честный детектив" (16+).
23.55 "Игры разведок. Немузыкальная история", "Иные. Тело. Ничего невозможного". Часть 2". Док. фильмы (12+).
01.35 "Срочно в номер-2" Детективный сериал (16+).
02.30 "Мисс ТВ СССР".
03.30 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Семейка Джонсов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Р.Байбулатов. "Прекрасная возлюбленная" (12+).**

## 22 МАРТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят". Сериал (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Биографический сериал. 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Структура момента" (16+).
01.35 "Наедине со всеми" (16).
02.30, 03.05 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.25 "После школы". Сериал (12+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 12-я и 13-я серии (16+).
23.00 "Вести.doc" (16+).
00.45 "Крик души. Депрессия", "Приключения тела. Испытание изоляцией". Док. фильмы (12+).
02.20 "Срочно в номер-2" Детективный сериал (16+).
03.20 "Гример. Профессор маскировки" (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (0+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Малый бизнес" (12+).**
**16.00 "Следопыт" (12+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Орнамент" (0+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Автограф" (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "На скейте от смерти". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 К.Мэргэн. "Шомбай" (12+).**

## 23 МАРТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лестница в небеса". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Политика" (16+).
01.35 "Наедине со всеми" (16+).
02.35 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.25 "После школы". Сериал (12+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 14-я и 15-я серии (16+).
23.00 "Специальный корреспондент" (16+).
00.45 "Кулебякой по диктатору. Гастрономическая ностальгия", "Как оно есть. Масло" (12+).
02.55 "Срочно в номер-2". Детективный сериал (16+).
03.50 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (6+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**18.55 Трансляция спортивных соревнований.**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Возврата нет". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Гарипова. "Песнь во сне" (12+).**

## 24 МАРТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Лестница в небеса". 3-я и 4-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.
03.20 "После школы". Сериал (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай. Ради любви". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Ленинград 46". 16-я и 17-я серии. Сериал (16+).
23.00 "Поединок". Ток-шоу с Владимиром Соловьевым (12+).
00.45 "Рада Аджубей. Мой совсем не золотой век" (12+).
02.45 "Срочно в номер-2". Детективный сериал (16+).
03.45 "Комната смеха" (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Заседание Государственного Собрания - Курултая РБ. Результаты деятельности Правительства РБ в 2015. Прямая трансляция (12+).**
**11.00, 21.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Параллельные миры". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Миннуллин. "Вот так случилось" (12+).**

## 25 МАРТА ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.20 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.15 "Мастроянни - идеальный итальянец".
01.20 "Билли Джоэл. Окно в Россию".
02.50 "После школы". Сериал (12+).
03.45 "Ликвидатор". Худ. фильм (16+).
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "От сердца к сердцу". Худ. фильм
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Измайловский парк". Юмористическая программа (16+).
23.00 "Совсем другая жизнь". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
03.05 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+)**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.30 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Большое путешествие в глубь океанов" (6+).**
**13.00 "Башҡорт йыры" представляет..." (12+)**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Любимое дело" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Дориан Грей". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 А.Хусаинов. "Бандабикэ и Еранса сэсэсн" (12+).**

## 26 МАРТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Парфюмерша". Сериал (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Тело государственной важности. Подлинная история Красной королевы"
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Ширли-мырли". Комедия (16+).
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. Телеигра.
18.55 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
20.35 "Время".
21.00 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Литвы. Прямой эфир.
23.00 "Версаль". Исторический сериал.
01.10 "Морпехи". Худ. фильм (16+).
03.20 "Модный приговор".
04.19 "Мужское/Женское" (16+).
05.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.30 "Следствие ведут знатоки". "Пожар". Сериал.
06.15 "Сельское утро".
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Николай Цискаридзе" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Эгоист". Худ. фильм (16+).
13.05 "Я не смогу тебя забыть". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Я не смогу тебя забыть". Продолжение сериала (12+).
17.00 "Один в один. Битва сезонов" (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Дом для куклы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
01.05 "Путь к сердцу мужчины". Мелодрама
03.10 "Марш Турецкого". Сериал (12+).
04.35 "Комната смеха".

### БСТ
**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Кунг-фу кролик" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Автограф" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**13.30 "Золотой фонд Башкирского ТВ". "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "Жизнь полна таинств и мелодий"**
**19.00 "Бай баҡса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (0+).**
**20.45 "Знай наших!"**
**21.00 "Люди скорости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "4-й период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Пластик". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 М.Карим. "Два берега бытия" (12+).**

## 27 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Парфюмерша". Сериал (12+).
08.15 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
1.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Гости по воскресеньям".
13.40 "Каникулы строгого режима". Худ. фильм (12+).
15.50 "Черно-белое" (16+).
16.55 "Голос. Дети".
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Подмосковные вечера" (16+).
23.15 "Саранча". Остросюжетный сериал (18+).
01.10 "Клеймо ангелов: Мизерере". Триллер (16+).
03.10 "Скандальный дневник". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.10 "Без права на ошибку". Худ. фильм (12+).
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.05 "Недотрога". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Недотрога". Продолжение сериала
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2016.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "По горячим следам". Детективный сериал (16+).
02.35 "Проклятие клана Онассисов". Док. фильм (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 Мультфильм (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай баҡса" (12+).**
**09.30 "4-й период" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа" (12+).**
**16.45 "Современник". Мухамет Сагитдинов (6+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**17.30 "Любимое дело" (12+).**
**18.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**18.30 "История признания" (12+).**
**18.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.00 "Патруль времени" (16+).**
**20.45 "Красная кнопка" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ-2016" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.15 "Мертвая зона". Худ. фильм (16+).**


## *ИҒЛАН*

Өфө ҡалаһының 3-сө Балалар стоматология поликлиникаһы (Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 16/1) ошонда теркәлгән 0 йәштән алып 18-ҙе тулмаған балалар һәм үсмерҙәрҙе ҡабул итә.

Поликлиникала медицина хеҙмәте учреждениеның эш режимына һәм белгестәрҙең эш графигына ярашлы күрһәтелә. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома 8.00 - 20.00. Шәмбе - 8.00 - 16.00.

1 йәшкә тиклемге пациенттар мөрәжәғәт иткән көндә сиратһыҙ ҡабул ителә. Алдан яҙылырға кәрәкмәй.

1 йәштән өлкән балалар медицина тикшеренеүе үткәндә шулай уҡ алдан яҙылмайынса көнөндә үтә.

Тиҙ ярҙам мөрәжәғәт иткән көндә күрһәтелә.

**Табипҡа яҙылыу өсөн:**

● www.gosuslugi.ru йәки rb.k-vrachu.ru электрон адресы аша интернет порталы;

● (347) 246-32-18 телефоны аша поликлиника регистратураһы;

● Кеҫә телефондары аша 09383 номеры, стационар телефондар өсөн 246-93-83 номеры аша (поликлиниканың коды - 173) контакт үҙәге;

● Поликлиникала урынлашҡан Инфомат аша.

Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса медицина ярҙамы алыу өсөн 14 йәшкә тиклем балаларға тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, 14 йәштән өлкәндәргә РФ гражданины паспорты менән мотлаҡ медицина страховкаһы полисы кәрәк.

✓ *Ҡыҙҙарҙың ижади һәләттәрен үҫтереү, башҡорт ҡыҙҙарының матурлығын, милли йолаларыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен пропагандалау маҡсатында үткәрелә ул.*



МӘҒАРИФ, СӘНҒӘТ...

# ҒАРИПОВСЫЛАР ЛАЙЫҠЛЫ ИСЕМЛЕКТӘ



**Күптән түгел Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты ЮНЕСКО-ның ассоциациялanған мәктәптәре исемлегенә индерелде. Башҡортостанда был ойошма менән берлектә хәҙер утыҙ ике белем усағы эшләй, шуларҙың ун алтыһы Өфө мәктәптәре.**

1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында "ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре" халыҡ-ара проектына ҡушылыуға әҙерлек 2011 йылдан уҡ башлана. Ул ваҡытта гимназия-интернаттың инглиз теле уҡытыусыһы Рәйлә Хилажева ЮНЕСКО дуҫтары клубын ойоштора. Клуб ағзалары халыҡ-ара ойошманың бик күп проекттарында ҡатнаша. Мәҫәлән, Бүрәт Республикаһында үткән фестивалдә уҡыусылар ғилми-тикшеренеү эштәре буйынса бик уңышлы сығыш яһай. Улар Екатеринбург ҡалаһында ораторлыҡ оҫталығы нескәлектәренә төшөнә, тәжрибә артынан Бөйөк Британияға барып ҡайтыу бәхете лә йылмая. Һөҙөмтәлә, бер ваҡиғанан да ситтә ятып ҡалмаҫҡа тырышҡан 1-се БРГИ педагогтары һәм уҡыусылары тырышлығы менән уҡыу йорто биш йылдан һуң ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре исемлегенә инергә лайыҡ, тип табыла.

Әйткәндәй, "ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре" халыҡ-ара проекты 1953 йылда тирә-яҡты һаҡлау, бөтә донъяны һәм мәҙәни мираҫты өйрәнеү, бала хоҡуғын яҡлау, сәләмәт тормош алып барыу буйынса эште киң йәйелдереү маҡсатында барлыҡҡа килә. Ойошма менән хеҙмәттәшлек итеү уҡыусыларҙың белемдәрен үҫтерергә, ижади һәм мәҙәниәтара тәжрибә уртаҡлашырға, йәш таланттарға яҙҙам итергә киң мөмкинлек бирә. ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре һәр йыл толерантлыҡ, экологик аңлылыҡ, тыныслыҡ һәм халыҡ-ара именлекте нығытыуға булышлыҡ иткән төрлө сараларға саҡырыла. Шулай уҡ халыҡтың мәҙәни һәм тәбиғәт ҡомарткыларын һаҡлауға йүнәлтелгән конференция, фестиваль, конкурстарҙа ҡатнашалар.

# ТӘЖРИБӘ УРТАҠЛАШАСАҠБЫҘ

**БР Мәғариф министрлығы үткәрәсәк "Киләсәк мәғарифы" форумында белем биреү системаһының бөтә өлкәләренә лә тейешле иғтибар бүленәсәк. БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова һәм БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәзитов был турала журналистар менән осрашыуҙа белдерҙе.**

Билдәле булыуынса, "Киләсәк мәғарифы" төбәк-ара форумы республика мәғариф системаһының конкурентлыҡ һәләтен асыҡлау, артабан үҫеш юлдарын күҙаллау ниәтендә үткәрелә. Шуға күрә, форумдың эше тәү сиратта баш ҡаланың муниципаль мәғариф бүлектәре етәкселәренең эшлекле һөйләшеүенән башланасаҡ. Эшлекле кәңәшмәлә Томск, Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан белгестәр тәжрибә уртаҡлашасаҡ. Бынан тыш, халыҡ-ара олимпиадаларҙа иң яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән уҡыусыларҙы әҙерләүсе педагогтарҙың республикаһың һәләтле балалары менән оҫталыҡ дәрестәре үткәреүе лә ҡаралған. БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәзитов әйтеүенсә, был дәрестәрҙә 115 уҡыусы ҡатнаша. Форумда Башҡортостандың өҫтәмә белем биреү учреждениеларының уңышлы эш һөҙөмтәһе күрһәтелә. Оҫталыҡ дәресенең береһе "Йәйләү" профилле лагерына бағышлана һәм унда балаларға рухи тәрбиә биреү, халыҡтың мәҙәниәтен, традицияларын һаҡлап ҡалыу йүнәлешендәге тәжрибә сағылдырыласаҡ. БР Мәғариф министрлығы хәбәр итеүенсә, әлеге көндә дөйөм алғанда республикала 5 йәштән 18 йәшкә тиклемге балаларҙың 77,5 проценты өҫтәмә белем биреү ойошмаларында төрлө йүнәлештәр буйынса шөғөлләнә.

Баш ҡала уҡыусыларына һөнәр һайларға булышлыҡ итеү ниәтендә ойошторолған "Турникетһыҙ көн" акцияһында төрлө сәнғәт предприятиелары ҡатнашасаҡ. Теләгән һәр кем был предприятиеларға барып, ундағы эш менән ҡыҙыҡһына, экскурсия үтә һәм ниндәй һөнәр кешеләре талап ителеүен асыҡлай аласаҡ. Ә хеҙмәт юлын башлаған торған студенттар, йәш белгестәргә форум барышында 20 ойошма үҙендә эш тәҡдим итергә әҙер.

# "УРАЛ МОҢО"

**Өфөлә "Урал моңо" Халыҡ-ара төрки йәштәре конкурс-фестиваленең һайлап алыу туры үтте.**

Баһалама ағзалары алдында Стәрлебаш, Благовар, Белорет райондарынан һәм Өфө, Сибай, Учалы, Баймаҡ, Межгорье ҡалаларынан килгән 10 бәйгесе сығыш яһаны. Бар сығыштар ҙа халыҡ музыка ҡоралдары оҙатыуында башҡарылды. "Урал моңо" фестиваленең һайлап алыу комиссияһы составына композитор, Ш. Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты Урал Иҙелбаев, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты Светлана Слягузова, "Туған тел" музыкаль телеканалының генераль директоры Азат Вәхитов, фестивалдең режиссеры Альмира Сәфәрғолова, Өфө дәүләт сәнғәт институтының башҡорт музыкаһы факультетының традицион музыкаль башҡарыу кафедраһы мөдире Артур Ғәйсаров, Республика халыҡ ижады йорто белгесе Элита Йыһангирова бар. Һөҙөмтәләр буйынса икенсе һайлап алыу турына 9 кеше үтте. Ул 25 мартта Инвалидтарҙың ижад йортонда үтә. Еңеүсе 26-28 майҙа Өфөлә уҙасаҡ фестивалдең финалында Башҡортостан исеменән сығыш яһаясаҡ.

# ИҢ ГҮЗӘЛЕ КЕМ?

**БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, шулай уҡ "Туған тел" республика музыкаль-күңел асыу телеканалы, "НоваТор" йәмғиәте "Һылыуҡай - 2016" Республика телевизион конкурсы ойоштора.**

Яҙ миҙгелен һәр быуаттарҙа ла гүзәл заттың матурлығына оҡшатҡандар. Шуға ла был бәйгенең яҙ айҙарында үткәрелеүе уға тағы ла йәм өҫтәй. Ҡыҙҙарҙың ижади һәләттәрен үҫтереү, йәштәрҙә ижади эшмәкәрлектең төрлө төрҙәренә йәлеп итеү, башҡорт ҡыҙҙарының матурлығын, милли йолаларыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен пропагандалау маҡсатында үткәрелә ул. Бәйгенең I туры һәр районда, һәр ҡалала үтә. II тур 2 апрелдә "Театро" клубында үтәсәк.

Бәйгеселәргә төп талаптар шундай: улар башҡорт телендә һөйләшергә, халҡыбыҙҙың йолаларын белергә, буйы 165 см-ҙан түбән булмаҫҡа, буй-һыны һомғол, тәбиғи матурлыҡҡа эйә булырға тейеш. Конкурста 16 йәштән 26 йәшкә тиклем һылыуҡай ҡатнаша ала. Конкурстың финалына үтеүселәр 5-19 апрелдә "Һылыуҡай"ҙың телевизон версияһын төшөрөүҙә ҡатнаша, улар менән хореография, вокал, актерлыҡ оҫталығы, подиум хореографияһы, визаж буйынса белгестәр эшләйәсәк. Финал "Башҡортостан" дәүләт концерт залында 19 апрелдә үтә. Ойошторолусылар менән бәйләнеш өсөн телефон: 8-927-333-17-17

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (12) дүшәмбе | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |
| 22 (13) шишәмбе | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 18:02 | 19:32 | 21:02 |
| 23 (14) шаршамбы | 5:42 | 7:12 | 13:30 | 18:04 | 19:34 | 21:04 |
| 24 (15) кесе йома | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 25 (16) йома | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 26 (17) шәмбе | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |
| 27 (18) йәкшәмбе | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 март "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А. Островский), драма
**20 март "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт
**25 март "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 март "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия
**23 март "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00
**23 март "Ҡыҙ урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия
**24 март "Аҡса булһа бер мукса"** (М. Багаев), музыкаль комедия
**25 март "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 10.00, 12.00

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 март** Башҡортостандың халыҡ артисы **Римма Амангилдинаның "Ҡояшлы таңым ата"** исемле яңы концерт программаһына саҡыра.

**КЕМ АЛЫҠ?**

**1.** Йырсы Башҡортостандың халыҡ артисы исеменә ҡасан лайыҡ була? **2.** Р. Амангилдина кемдәр менән дуэттар башҡарған? **3.** Ниндәй йырҙарына клиптар төшөрөлгән? **4.** Март айында РФ Президенты В. Путин тарафынан ниндәй ҡаҙаныштары өсөн нимә менән бүләкләнә? **Тел.: 8 (347) 276-24-41**

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 март "Гонаһлы хыялдарым"** (Ф. Гәлимов), комедия
**25 март "Ғәлиәбаныу"** (М. Фәйзи), музыкаль драма

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮЛЕ ОСРАШЫУ БУЛҺЫН!

**Континенталь хоккей Лигаһының Гагарин кубогы өсөн алышта Өфөнөң "Салауат Юлаев" командаһы еңеүле аҙымдары менән көйәрмәндәрен һөйөндөрөүен дауам итә. Әлбиттә, "Авангард" бөтөнләй уҡ төшөп ҡалғандарҙан булмай сыҡты. 16 мартта Омскиҙа үткән осрашыуҙа Көнсығыш конференция финалына сығып, дәғүәсеһен көткән Магнитогорскиҙың "Металлург"ына ҡаршы уйнаясаҡ команда асыҡланманы.**

Беҙҙекеләр быға тиклемге дүрт уйындан һуң "ҡарсыға"ларҙы 3:1 иҫәбе менән еңеп килделәр-килделәр ҙә, сысҡанын тәпәйенән ысҡындырып-ысҡындырып алған бесәй шикелле, шаярып алырға булдылар, буғай. 16 марттағы осрашыу тамамланырға 6 минут самаһы ҡалғас, юлаевсыларҙың баш тренеры Игорь Захаркин ҡапҡа һаҡсыһы Сведберг урынына өҫтәмә майҙан уйынсыһын сығарһа ла, беҙҙең хоккейсылар үҙҙәренә өсөүләп кенә ҡаршы торған "Авангард"тың ҡапҡаһын яулай алманы. Ниһәһе ҡыҙыҡ, бер минуттан тулы составта уйнай башлау менән ҡаршы яҡтағыларҙың үксәһенә баҫтылар ҙа ул, тик ваҡыт етмәй ҡалды. Осрашыу аҙағында йәнә алтаулап уйнаһалар ҙа, тренерҙары Игорь Владимирович әйткәнсә, юлаевсылар уның тыуған көнөндә бүләккә еңеү түгел, кәнфит кенә бирҙеләр. Осрашыу 2:3 иҫәбенә майҙан хужалары файҙаһына тамамланды. Киләһе осрашыу, бәлки, ул "Авангард" менән һуңғы осрашыу булыр, ул "Өфө-Арена"ла үтәсәк.

***✓ Быйыл театр үҙенең идеялары менән хоккей клубына сыҡты, улар ҙа ҡаршы булманы, мәҫәлән, актерҙар милли кейемдәр кейеп, Салауат Юлаевтың ырыуҙаштары, ҡәрҙәштәре булып, Боҙ аренаһында ултырһа, шәп тә инде.***



ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

**Интервьюлар төрлө була. Ҡайһы саҡта ярты сәғәткә генә һуҙылған һөйләшеүҙә лә иң мөһим фекер әйтелә. Ҡайһы бер бәхетле осраҡтарҙа һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәй. Гәзитебеҙҙә, ғәҙәттә, монолог, диалогтар ярайһы оҙон һәм уларҙы уҡыусыларыбыҙ, аҙна дауамында, яйлап, мәғәнәһенә төшөнә-төшөнә, аҡыллы фекерҙәргә ҡабаттан әйләнеп ҡайта-ҡайта уҡыйбыҙ, тиҙәр. Шуға ла беҙ уҡыусыларыбыҙға ҡыҫҡараҡ әңгәмәләр ҙә тәҡдим итмәксебеҙ. Геройҙарыбыҙ - йәмғиәтебеҙҙәге әүҙем милләттәштәребеҙ булыр, уларҙан ҡыҫҡа һорауға - тапҡыр яуап көтөп ҡалабыҙ. Тәүге ҡунағыбыҙ - М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры - Шәһит ХАММАТОВ.**



# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" КОМАНДАҺЫНЫҢ...

## ...ҡото булырға дәғүә итәм түгелме?

**Шәһит, һине "Салауат Юлаев" хоккей клубының штаттағы Хоттабыч ҡарты тиҙәр, шул дөрөҫмө? Команда еңелгән осраҡта көйәрмәндәр бар асыуын ҡартҡа төшөрөр тип ҡурҡмайһыңмы, әллә был көндө матчтан иртәрәк ҡайтып китәһеңме?**

- Мин электән үҙебеҙҙең хоккей командаһының көйәрмәне. "Салауат Юлаев" командаһы ҡатмарлы осорҙар ҙа кисерҙе, еңеүҙәр еңелеүҙәр менән аралашып килә, шуға, ҡулды төшөрөп, мыжып ултырырға ярамай. Актерҙар булараҡ, беҙ башҡорт хоккейына үҙ ярҙамыбыҙҙы тәҡдим итергә тырышабыҙ. Быйыл театр үҙенең идеялары менән хоккей клубына сыҡты, улар ҙа ҡаршы булманы, мәҫәлән, актерҙар милли кейемдәр кейеп, Салауат Юлаевтың ырыуҙаштары, ҡәрҙәштәре булып, Боҙ аренаһында ултырһа, шәп тә инде. Ә Хоттабычҡа килгәндә, мин эш был тиклемгә барып етер тип уйламағайным, ниндәйҙер талисманға әйләндем дә ҡуйҙым. Һәр бер уйын һайын яуаплылыҡ өҫтәлә барған кеүек, еңһәләр - маҡтайҙар, минең менән фото төшәләр, ҡеүәтләйҙәр, хатта "Салауат Юлаев" командаһы менән бергә ярыштарға йөрөргә тәҡдим итәләр. Мин уйындың аҙағына тиклем мотлаҡ ҡалам, еңәләрме, еңеләләрме, аҙаҡҡаса бергә хәҙер... Команда еңелгәндә көйәрмәндәрҙең ҡайһы берҙәре үҙ фекерҙәрен әйтеп китә, был тәбиғи, яратҡан командаһынан улар еңеү генә көтә.

**Һин йәштәр генә түгел, ололар ҙа әүҙем ҡулланған социаль селтәрҙәрҙә лә "Уйҙар, цитаталар, фекерҙәр, эҙләнеүҙәр" тигән төркөмөң аша үҙ һүҙеңде әйтеп киләһең. Фекерҙәштәрең күпме, ундағы фекерҙәрҙе үҙең уйлап сығараһыңмы?**

- Төркөмгә быйыл ике йыл булып киткән икән, аудитория биш меңгә барып етеп бара, был үҙе бер район үҙәге халҡына тиң. Күп күренекле шәхестәрҙең шиғырҙарын, әйтемдәрен, уйҙарын теркәргә тырышһам да, күберәк теге йәки был ваҡиғаға үҙемдең фекерҙәремде яҙам. Башҡорт ауылдары яҙмышына битараф ҡала алмайым, милләттәштәрҙә ватансылыҡ, илһөйәрлек тойғолары уятырға тырышам. Бик күп таныштар таптым уның аша, улар үҙҙәренең тәҡдимдәрен яҙалар. Әгәр ошо төркөм кемделер бәхетле иткән икән, был минең өсөн оло бәхет, бүләк. Төп маҡсаттарымдың береһе - кешелеккә социаль селтәрҙәр аша ыңғай уйҙар, дәрт, киләсәккә ышаныс еткереү.

**Ошо төркөмөңдә: "Минең кәләш - ипотека һымаҡ, баштан сыҡмай", тип яҙғайның бер. Икегеҙ ҙә актер, бер үк театрҙа ижад итәһегеҙ, өйҙә нисек, бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыямы былай?**

- Кәләшем Алтынай Хамматова менән беҙ һәр ваҡыт бергә - эштә лә, өйҙә лә, аш-һыу бүлмәһендә лә, урамда ла, бесән эшләгәндә лә... Бер-берегеҙҙән ялҡмайһығыҙмы, тип һорай күптәр. Быға бер генә аңлатма барҙыр, ул да булһа, мөхәббәт хисе һәм юмор тойғоһо. Ул - минә, мин уға терәк, кәләшемдең үҙ ҡаҙаны, минең үҙ ҡаҙаным. Йондоҙнамә буйынса ул кәзә, мин тәкә. Ғүмер бер тапҡыр ғына бирелә, кисәге көндө лә ҡабаттан йәшәп, кире ҡайтарып булмай - ошоно аңларға ғына кәрәк. Төрлө хәлдәр була, әлбиттә, шунһыҙ тормош булмай, тик ошо хәлдәр ғаилә нигеҙен нығытырға тейеш.

**Шулай итеп, йәш актер, юмор оҫтаһы, бөгөнгө замандың сәсәне Шәһит Хамматов менән яңы рубрикаға старт бирҙек. Тағы кемдәргә ниндәй һорауҙар бирергә теләйһегеҙ, был турала беҙгә хәбәр итә алаһығыҙ, хөрмәтле уҡыусылар.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТИҘ ҺӨЙГӘН...

## ...тиҙ айырылыр

Аҡ тунынды яманлап, атлас ҡайҙан табырһың; түрәләрҙе яманлап, ғәҙелен ҡайҙан табырһың?

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йыһандың төпкөл генә урынында бер кибет урынлашҡан. Алтаҡталарын да әллә ҡасан ел осороп алып киткән, әммә уның теләктәр һата торған урын икәнен барыһы ла белә. Кибеттәге тауарҙар ассортименты бик бай: унда яхта ла, фатир ҙа, машина ла, матур буй-һын да, шулай уҡ яҡшы эш урыны, вазифа, наградалар, конкурстарҙа еңеүҙәрҙе лә һатып алып була. Бында йәшәү менән үлем генә һатылмай, уның менән Йыһандағы Баш офиста шөғөлләнәләр. Кибеткә ингән кеше иң тәүҙә үҙенең теләгенең хаҡын белер-гә теләй. Хаҡтар ҙа бында төрлөсә. Мәҫәлән, яратҡан эшеңде алыуға өлгәшеү тотороҡлолоҡтан һәм асыҡлыҡтан, тормошоңдо үҙ аллы планлаштырыуҙан, үҙ көсөңә ышаныуҙан баш тартыуға һәм кәрәкле урында түгел, ә үҙеңә оҡшаған урында эшләргә юл ҡуйыуға тиң. Власть өсөн саҡ ҡына ҡиммәтерәк түләргә кәрәк: үҙеңдең инаныуҙарыңдан баш тарт, үҙеңдең баһаңды бел һәм һәр кемгә лә ярҙамға ташланма, әйләнә-тирәләгеләрҙең хуплауына-хупламауына ҡарамаҫтан, үҙеңә "Мин!" тип әйтергә рөхсәт ит.**

**Ҡайһы бер хаҡтар бигерәк тә ҡыҙыҡ: кейәүгә сығыуға бушлай ҙа өлгәшеп була, ә бына бәхетле тормош бик ҡиммәт тора: улар - үҙ бәхетең хаҡына үҙеңдең яуаплы булыуың, тормоштан ҡәнәғәтлек ала белеү, әйләнә-тирәләгеләргә ярарға тырышмау, булғанды баһаларға өйрәнеү, үҙеңдең ҡиммәтеңде һәм әһәмиәтеңде белеү, үҙеңде ҡорбан итеүҙән, ҡайһы бер дуҫтарыңды юғалтыуҙан ҡурҡмау.**

**Кибеткә килгән һәр кеше лә теләк һатып алырға ашыҡмай. Ҡайһы берәүҙәр хаҡтарҙы күреү менән кире боролоп сығып китә. Икенселәр уйланған көйө урынында ҡатып ҡала ла, был тиклем хаҡты түләргә ҡайҙан аҡса табырға, тип баш вата. Өсөнсөләр юғары хаҡҡа зарланып, теләктәрҙең хаҡын бер аҙ кәметеүҙе үтенә.**

**Бар йыйған мөлкәтен һатып, кибеттән ялтыр ҡағыҙға төрөлгән теләген һатып алғандар ҙа була. Бындай бәхетлеләргә башҡалар көнләшеп ҡарап тора һәм үҙ-ара: "Магазин директоры уның танышы бит", - тип һығымта яһай һала.**

**Кибет хужаһына йыш ҡына хаҡтарҙы кәметергә тәҡдим итәләр. Һатып алыусыларың күбәйер ине, тиҙәр. Ләкин кибет хужаһы һәр ваҡыт бындай тәҡдимдән баш тарта, былай эшләһәң, сифат яғы аҡһаясаҡ, ти. Былай эшләгәс, бөлмәҫһеңме һуң, тип һорай кешеләр кибет хужаһынан. "Юҡ, - ти хужа, - тормошон үҙгәртеүҙән ҡурҡмаған, күнегелгән йәшәйештән баш тартҡан, үҙенә ышанған, үҙ теләктәренең тормошҡа ашыуы өсөн түләр мөмкинлек тапҡан тәүәккәлдәр һәр саҡта ла булып тора..."**

**...Ә кибет ишегендә оҙаҡ йылдар бер үк иғлан элеүле тора: Әгәр ҙә һинең теләктәрең тормошҡа ашмаған икән, тимәк, һин уның өсөн түләмәгәнһең әле..."**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЫЛАҒАЙ, ҺҮҘЕНДӘ ТОРМАЙ...

**Сымыры** - йыйнаҡ;
**Төйөрөм** - тулы, тос;
**Әҙепләү** - туҡымаға, йәки кейемгә тиҫкәре яҡтан ялғау;
**Һумтайып** - оҙонайып;
**Әшкәтәү** - ебеткәк, ҡар ҡатыш ямғыр, рашҡы яуған көн;
**Хиләүәттә йәшәү** - рәхәт тормошта йәшәү;
**Күңелем туҡ** - ҡәнәғәт булыу;
**Тарҙай** -мөлдөрәмә тулы;
Атайым, **еленем тарҙай,** тип әйтә торғайны - яҡшылыҡ эшләргә әҙер булыуын белдерә торғайны.
**Ек күремсе булып ултырыу** - артыҡ тикшереп, ҡарап ултырыу;
**Сәсәтмә** - йүткерек;
**Әпәр итеү** - доға уҡығандан һуң битте һыйпау;
**Үңәсе өҙөлә яҙғансы эшләй** - ныҡ тырыша;
**Сүпрә** - әсетке;
**Былағай** - һүҙендә тормаған кеше;
**Ҡаулан** - үткән йылдан ҡалған үлән.
**Сәртеп яра** - ваҡлай;
**Ҡуры кеше** - барлы, бай кеше;
**Серкәү яҡмағыҙ** - битемә оятлыҡ килтермәгеҙ;
**Тайса** - бүлеп бирелгән биләмә.

**Гөлдәр КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Йылайыр районы Шанский ауылы.**

ҺҮҘЛЕК



# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Каучук ағасы** - дерево каучуковое
**Каштан ағасы** - каштан
**Кейәү үләне** - чабрец башкирский, тимьян
**Келән ҡурай, шыма ҡурай** - дудник лесной
**Керән** - хрен
**Кесерткән** - крапива двудомная
**Кесерткән уҡаһы** - повилика европейская
**Кесерткән япраҡлы ҡыңғырау** - колокольчик крапиволистный
**Кипарис ағасы** - кипарис
**Кипкәр** - сушеница
**Көҙгө сәскә** - безвременник
**Көкөрт үләне** - плаун
**Көнбағыр, ҡояш сәскәһе** - козлобородник восточный
**Көнбағыр һөтлөгән** - молочай солнцегляд
**Көнбағыш** - подсолнечник
**Көнбағыш шомбояһы** - заразиха подсолнечная
**Көпшә** - купырь похожий
**Көрән күрән, шыбаҡ** - осока буроватая
**Көтөүсе ҡумыҙы** - частуха

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 470/03